Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Һеҙ ҙә "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына ҡушылып, гәзитебеҙҙе туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәрегеҙгә, мәктәптәргә, мәсеттәргә, дуҫтарығыҙға һәм таныштарығыҙға яҙҙырып бүләк итә алаһығыҙ. РФ Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә МЫРҘАБАЕВА башланғысына ҡушылып, был юлы матур йолабыҙҙы "Башбланкиздат" нәшриәте директоры Гөлсәсәк ӘЛИБАЕВА күтәреп алды һәм Хәйбулла районы Мәмбәт ауылының тыл һәм хеҙмәт ветерандарына 40 дана "Киске Өфө" гәзите яҙҙырып бүләк итте.

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

18 - 24 ОКТЯБРЬ (ҠАРАСАЙ) 2014 йыл

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№42 (616)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ҡунаҡ ҡаршыларға әҙерләнәбеҙ



5

Ҡорамалар...

усаҡ йылыһы кеүек



6

Интернетты сүп ояһынан...



8-9 гөл-баҡсаға әйләндереү беҙҙән дә тора

Ҡалҡан булдың һин уҡтарҙың

Беҙгә йүнәлгәненә...



11

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Күптән түгел Халыҡ-ара ауыл ҡатын-ҡыҙҙары көнө билдәләнде. Был көндө булдырыу идеяһы юҡтан ғына барлыҡҡа килмәгәндер ул?

*Гүзәл ВИЛДАНОВА, философия фәндәре докторы, БДУ профессоры:* Халыҡ-ара ауыл ҡатын-ҡыҙҙары көнө, йәмәғәтселектә әле киң таралып өлгөрмәһә лә, 2008 йылдан бирле билдәләнеп килә. Был датаны булдырыу идеяһы 1995 йыл БМО-ның Пекинда үткәрелгән ҡатын-ҡыҙҙар конференцияһында барлыҡҡа килә һәм 12 йылдан һуң ғына рәсми рәүештә раҫлана. Үҙегеҙ әйтмешләй, был көн, ысынлап та, юҡтан ғына бар булмай. Уның маҡсаты - ауыл ҡатын-ҡыҙҙарының еңелдән булмаған хәленә иғтибарҙы йүнәлтеү, шулай уҡ уларҙың аҙыҡ-түлек һәм сәнәғәт индустрияһына индергән хеҙмәт өлөшөн лайыҡлы баһалау, тип әйтелә ошо туралағы документтарҙа. Ысынлап та, бөгөнгө көндә ауылда йәшәү - үҙе бер батырлыҡ, тип әйтер инем мин. Бөтөн донъя ҡатын-ҡыҙҙарының сирек өлөштән ашыуы ауыл ерҙәрендә йәшәй. Ҡала халҡын аҙыҡ-түлек һәм үҫемлекселек сеймалы менән өҙлөкһөҙ тәьмин итеп тороу мәсьәләһе улар ҡулына ҡалдырылған. Уйлап ҡараһаң, улар етештергән ит, һөт, икмәк, йәшелсә-емеш һәм башҡа төр аҙыҡ-түлек менән магазин кәштәләре көн дә тулып тора. Ошо факт ҡына ла ауыл ҡатын-ҡыҙҙарының хеҙмәт ҡаһарманлығы тураһында һөйләмәйме ни? Бынан тыш, улар бөткөһөҙ йорт хужалығы мәшәҡәттәре, ғаилә ҡарау хәстәрлектәре менән дә мәшғүл. Ҡатын-ҡыҙ ҡулы теймәгән, уның әсәлек наҙынан мәхрүм йортта тормош та һүнә, ҡотһоҙлоҡ хөкөм һөрә. Ҡояшыбыҙ кеүек көләс, Еребеҙ кеүек йомарт, фәрештәләй изге йөрәкле ҡатындар тотоп тора барыбер ҙә ауыл тормошон (ир-егеттәр бер үк үпкәләмәһен). Юҡҡа ғынамы ни, туйындырыусы ла, һыйындырыусы ла еребеҙҙе, ололоҡлап, Ер-әсә, тибеҙ...

Элгәрерәк тә, техника үҫешкән бөгөнгө заманда ла ауыл ҡатын-ҡыҙы образы Ер-әсәбеҙҙән айырылғыһыҙ. Дәһшәтле һуғыш йылдарында ауыл ҡатындары һабан артына баҫып, бураҙна ярҙы, тылда төп көсө булып, бөтөн фронтты аҫыраны. Ә колхоз-совхоз йылдарын иҫкә төшөрһәк? Тотош ауыл хеҙмәтсәндәренең фиҙаҡәрлеге, ҡаһарманлығы булып балҡыны ул саҡтағы хеҙмәт йондоҙҙарыбыҙ. Легендар яҙмышлы Банат Батырова, Гәүһәр Фәйзуллина, Эльвира Гулина, Фира Ниғмәтуллина, ауыл уҡытыусыһы Хәнифә Искәндәрова һәм башҡа бик күптәрҙең исемдәре һаман да хәтерҙә. Бөгөн дә бар үндайҙар. Колхоздар бөтөрөлһә лә, ауыл хужалығы етештереүселәренең хеҙмәтен элеккесә күтәрмәләп, бик данлап бармаһалар ҙа, тормош дауам итә. Уңған ауыл һылыуҙары бөгөн дә һыйыр һауа, сөгөлдөр үҫтерә, эшҡыуарлыҡ төрҙәре менән шөғөлләнә. Был бурысты бер кем дә төшөрмәне улар иңенән. Ул ғына ла түгел, икмәк менән генә туҡ булып булмай, тигәндәй, ауылдың рухиәт торошо ла ана шул уңған, өлгөр, талантлы ҡатын-ҡыҙ хәстәрендә. Шуныһы шатлыҡлы: һуңғы йылдарҙа улар тырышлығы менән ауылдарыбыҙ рухи күтәрелеш осоро кисерә: ағинәйҙәр хәрәкәте ауыл тормошона өр-яңы һулыш өҫтәне. Бирһен Хоҙай, үҙ еребеҙҙә ана шундай ысын хужабикәләр барҙа, йәшәр, сәскә атыр ауылдарыбыҙ ҙа.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

## ҠЫШ ЕТӘМЕ?

**Башҡортостан синоптиктары киләһе аҙнаның башында һауа торошоноң ҡапыл һәм ныҡ һыуытыуы тураһында хәбәр итә.**

- Йәкшәмбе һауа торошоноң ныҡ үҙгәреүе көтөлә, - ти Башгидрометтың баш синоптигы Анна Козаева. - Һауа температураһы түбәнәйәсәк, ә киләһе аҙнаның башы ҡыштың башы булыуы мөмкин.

Әммә был һуңғы прогноз түгел, синоптиктар процесты күҙәтә, һауа торошоноң күренештәрен баһалау схемалары төрлө һөҙөмтәләр бирә. Был аҙнала һауа торошоноң характеры нормаға яҡын буласаҡ.

- Дөйөм алғанда, һауа торошо ошо йыл миҙгеле өсөн ғәҙәти, көҙгө осорҙа һәр ваҡыт ҡапма-ҡаршы һауа массаһы йөрөй, йонсоу көндәр октябрҙә ҡапыл ғына арта, - ти Анна Козаева. - Был аҙнала өҫтөнлөк иткән температура - көндөҙ 3-8 градус йылы һәм төндә минус 1-2-нән алып плюс 6-8 градусҡа тиклем. Айырым райондарҙа термометр бағанаһы көндөҙ плюс 13 градусҡа тиклем күтәрелеүе мөмкин. Ғәҙәттә, көньяҡта йылыраҡ, төньяҡта һыуығыраҡ.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ЙӘШ ҒАИЛӘЛӘР...

## бәйге тотто

**15 октябрҙең болотло йонсоу был кисендә эштән һуң һәр кем йылы өйөнә ашығалыр төҫлө ине. Баш ҡалабыҙҙың мәҙәни-ял үҙәктәре бушап ҡалғандыр инде, йәш ғаилә конкурсын ҡарарға кеше килерме икән, тип икеләнә-шикләнә Химиктар мәҙәниәт һарайының ишеген асып ебәреүгә, бөтөн хафаларым бындағы шат тауыштарҙан иреп, юҡҡа сыҡты: алма төшөр урын юҡ!**

Ғаилә байрамы фойенан уҡ башланып киткән бит, ана, конкурста ҡатнашыусылар жюри ағзаларын, тамашасыларҙы "Ғаиләм - минең хазинам" күргәҙмә-презентацияһы менән таныштыра. Бында "Ғаилә ағасы" төп урынды алып тора. Стендтар иһә ғаиләләр тормошон, мәҙәни йолаларын, нәҫел-нәсәп бәйләнештәрен, ҡыҫҡаса тарихын сағылдырыусы фотоһүрәттәр менән биҙәлгән. Был "Йәш ғаилә -2014" конкурсының беренсе имтиханы булһа, артабанғы этаптар тамаша залына күсте.

**(Дауамы 4-се биттә).**



Һүрәттә "Йәш ғаилә - 2014" конкурсында "Хәрәкәтсәнлек һәм оригиналлек өсөн" номинацияһында билдәләнеүсе Лариса менән Рәмил Мостафиндар ғаиләһен (Калинин районы) күрәһегеҙ.

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# МАТБУҒАТ ХАЗИНАҺЫ



**Сыға башлағандан алып "Киске Өфө"нөң күптәрҙең яратҡан гәзитенә әйләнеүенә шигем юҡ. Ул, кем әйтмешләй, тап тейешле урында, тейешле ваҡытта донъя күрә башланы. Уның барлыҡҡа килеүе күптәр өсөн, атап әйткәндә, тарихсылар, телселәр, тыуған яҡты өйрәнеүселәр, яҙыусылар, студенттар, ғөмүмән, бөтә илһөйәр-телһөйәрҙәр өсөн ысын мәғәнәһендә яңы күренеш булды.**

"Киске Өфө"нөң телен дә, маҡсатын да, нимәгә йөҙ тотоуын да аңламайым, тигән кеүегерәк фекер ишеткәнем бар. Ундайҙар менән гәзиттең ҙур рухи сығанаҡ, халыҡсан телле, киң ҡоласлы, бай, тәрән йөкмәткеле баҫма икәнлеге тураһында бәхәсләшкәнем юҡ һәм йыйынмайым да. "Киске Өфө" бит илһөйәрлек тойғоһо үҫешкән, телем, илем тиеп борсолған, бөгөнгө йәмғиәтебеҙҙә барған хәл-ваҡиғаларға битараф булмаған аңлы гәзит уҡыусыларға ғына тәғәйенләнгән һәм шуларға ғына йөҙ тота. Әгәр ҙә уҡыусыла илһөйәрлек хисе үҫешмәгән икән, ысынлап та, баҫма ҡыҙыҡлы тойолмаясаҡ һәм ул уны аңламаясаҡ та.

"Киске Өфө"лә бөтә йәштәгеләр өсөн ҡыҙыҡлы темалар бар. Республикалағы ижтимағи-сәйәси тормош өлкәһендәге көнүҙәк мәсьәләләр, халҡыбыҙҙың боронғо тарихы, бөгөнгө көнитмешендәге актуаль проблемалар, әҙәбиәт, сәнғәт, мәҙәниәттәге яңылыҡтарҙан тыш, уның ҡаҙаныу серҙәрен, тормош һабаҡтарын ятлап уҡыйым. Баҫма йөнә башҡаларҙан шуныһы менән минең иғтибарҙы йәлеп итә: унда күңелле ҡырыҙҙай, шик-шөбһәгә төшөрөрҙәй хәүефле, ҡурҡыныс материалдар юҡ. Шул уҡ ваҡытта кәйеф-сафа баҫмаһы ла түгел ул. Гәзиттәге мәҡәләләр күңелдәге бушлыҡты тултыра, ғәмләндерә, сәмләндерә торған. Шуныһы менән бигерәк тә күңелгә яҡын "Киске Өфө", шуныһы менән ҡиммәт, хазинаға тиң.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Күптән түгел Халыҡ-ара ауыл ҡатын-ҡыҙҙары көнө билдәләнде. Был көндө булдырыу идеяһы юҡтан ғына барлыҡҡа килмәгәндер ул?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Сәғит МӨХӘМӘТҠОЛОВ, хаҡлы ялдағы мәғариф ветераны:*** Ҡатын-ҡыҙ хаҡында ир-егеттән дә дөрөҫөрәк итеп әйтеүсе булмаҫтыр ул. Ауыл ҡатын-ҡыҙы, тигәс тә, әсәйемде күҙ алдына килтерәм. Ғүмер буйы колхоз эшенән ҡайтып инмәне: тәүҙә һауынсы булды. Ул ваҡыттарҙа иртәнге 5-тән тороп фермаға сығып китерҙәр ине. 18 йыл шулай таң һарыһынан ҡара кискә тиклем ферма юлын тапаны. Унан һаулығы насарайғас, "енел" эшкә - быҙау ҡарауға күсерҙеләр. Бында, бәлки, уғата ҡыйынныраҡ та булғандыр, тим, сөнки бер быҙау үлһә лә колхоз рәйесе менән бригадир, уларҙан ҡала ферма мөдире ел-дауыл ҡуптара инеләр. Ләкин 15 йәшенән хеҙмәттә сыныҡҡан әсәйем бирешмәне, гел маҡталып эшләне, өйҙәге иҫке сумаҙан Маҡтау ҡағыҙҙары менән тулды. Ниһайәт, хаҡлы ялға сығыр алдынан Хеҙмәт Ҡыҙыл Байрағы ордены менән наградланды ул. Утыҙ йылдан ашыу физаҡәр хеҙмәтенә баһа шул булды. Ғүмере эштә үтһә лә, донъябыҙҙы бағырға ла (йорт алды ла, өй эсе лә шау гөл-сәскәгә күмелеп ултырыр ине), һеҙлекәшем менән икебеҙҙе бер үҙе тәрбиәләп үҫтерергә лә (атайым беҙҙе бик иртә ташлап китте), мал-тыуар аҫырарға ла (өҫтәлебеҙҙән һөт-ҡаймаҡ, ит өҙөлмәне) өлгөрә ине ул. Ул саҡ балалыҡ менән баһалай белмәгәнмен, хәҙер уйлаһам, әсәкәйем һәйкәл ҡуйырлыҡ ҡатын булған икән, тимен... Ә бит ундайҙар бер әсәйем генә түгел ине, колхоз-совхоз эшендә бил бөккән меңәрләгән ҡатындар яҙмышы ине был. Ғөмүмән, ауыл ҡатын-ҡыҙына, ысынлап та, һәйкәл ҡуйырға кәрәк, тигән тәҡдимем бар минең.

Әле лә ауылда ҡатын-ҡыҙ яҙмышы әллә ни еңеләйгән китмәне, тигән уйҙамын. Аҡса түләмәй генә көс түктереүсе колхоз булмаһа ла, күп ауылдарға газ үткәрелһә лә, ҡатын-ҡыҙға донъя көтөүе ауыр (һеҙлем миҫалынан да, башҡа күҙәтеүҙәремдән дә сығып әйтеүем). Ир кеше эсһә, йә "йоҡа елкә" булһа - бөттөң. Мал-тыуар көтөп тә, унан алынған продукцияны аҡсаға әйләндереүе күп ерҙә бик ауыр мәсьәлә. Мал, ҡош-ҡорт аҫырау өсөн бесәне, еме кәрәк. Ҡара тырыш, әрһеҙ, эт ҡайышы булмаһаң - ауылда бөгөн йәшәп ҡара!

***Мәрғизә АРЫҪЛАНОВА, Федоровка районы Бала-Сытырман ауыл хакимиәте башлығы:*** Бөгөн ауыл тормошоноң тотҡаһы, ысынлап та, ҡатын-ҡыҙ ҡулында, тип әйтер инем. Быйын менән мин ир-егеттәребеҙ ролен һис кенә лә кәмһетергә теләмәйем, уларһыҙ ҙа донъябыҙ әллә ни алға бара алмаҫ ине. Ә шулай ҙа һуңғы ваҡыт ҡайһы өлкәне генә алып ҡарама - унда күпселек ҡатын-ҡыҙ "усаҡ дөрләтеп, ҡаҙан аҫа". Ҡыҫҡаһы, тормошобоҙ гөрләп торһон өсөн көсөн дә, дәртен дә йәлләмәй. Улар бөгөн әсә лә, ҡатын да, етештереүсе лә, аҡса табыусы ла, йәмәғәт эшмәкәре лә, кәрәк икән - артист та хатта. Мин үҙемдең эшемдә фәҡәт ошондай әүҙем ҡатын-ҡыҙҙар ярҙамына таянам. Бала-Сытырманда ла, Яңы Яуышта ла ҡатын-ҡыҙҙар, ағинәйҙәр бөтөн йәмәғәт эштәрен ойоштора, теге йәки был сараларҙы үткәрешә, донъяларын да гөл иттереп көтә. Был ауылдарҙағы ҡатын-ҡыҙҙарҙың лидерҙары Рәйфә Вәлиева менән Тәскирә Ғәлина, ағинәйҙәр бергәләшеп бөтөн байрам сараларын үткәрә, экологик өмәләргә сыға, ауыр хәлдәге ғаиләләргә ярҙам ҡулы һуҙа, айыҡлыҡ өсөн көрәш сафында ла алғы сафта бара. Үҙебеҙҙең "Замандаш" менән "Айгүзәл" фольклор ансамблдәре сығыш яһағанда, артистарың ары торһон! Ә бит ауыл еренд эш тауыҡ сүпләһә лә бөтөрлөк түгел, гел йырлап-бейеп кенә йәшәп тә булмай: донъя көтөргә, мал-тыуар аҫырарға, ғаиләнде тәрбиәләргә лә кәрәк. Мал тотам тип кенә лә малдай булаһың. Ҡалала бөтөн нәмәне һатып алып йән аҫыраһалар, ауылда, астан үлмәйем, тиһәң, бөтөн нәмәне үҙенә етештерергә тура килә. Ә бында инде елкә кәрәк. Иртә тороп, һуң ятмаһаң, бөтмөр, тик тормаҫ, өлгөр булмаһаң, аҫ та тороп ҡалыуың бар. Бәхеткә күрә, ауылдаштарым етеш, мул, матур йәшәй, тип хаҡлы ғорурлана алам. Күп итеп йәшелсәемеш, картуф сәсәләр, малтыуар тоталар, "Башҡортостан ҡаҙы" йәмғиәтенән 200-ләгән баш себеш алып үҫтереп, итен тапшыралар йә йәрминкәләргә һатыуға сығаралар, шуның менән ғаилә бюджетын тулыландыралар - бер һүҙ менән әйткәндә, бөтә был эштәрҙе ойоштороп, башҡарып сығыусы - әлеге ҡатын-ҡыҙ. Ауыл ҡатын-ҡыҙы - ул үҙе бер төпһөҙ хазина, бәрәкәт, рух байлығы, йәғни, ҡыҫҡа ғына итеп әйткәндә - ауылдың ҡото улар.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле бара. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана икәнен тағы бер тапҡыр иҫегеҙгә төшөрәбеҙ.**



- Шулай итеп, 2015 йылдың беренсе ярты йылы өсөн октябрҙән **50665** индекслы "Киске Өфө"гә **513 һум 72 тингә** яҙылырға мөмкин. Предприятиелар һәм ойошмалар өсөн билдәләнгән **50673** индексылыһының хаҡы - **543 һум 72 тин**.
- Октябрҙә "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәргән 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ - **С. Руденконың "Башкиры"**, 2 уҡыусыбыҙ - **"История башкирского народа"**, 10 уҡыусыбыҙ башҡортса **"Дини календарь"**, 10 уҡыусыбыҙ **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарын алып ҡыуаныр.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

- Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға - **252 һум**.
- Яҡын йәштәгеләр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - **252 һум**.
- Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Рәсәй Федерацияһының ЮНЕСКО эштәре буйынса комиссияһы составына инде. ЮНЕСКО ярҙамында республикала бер төркөм проекттар ғәмәлгә ашырыла. 2012 йылда "Башҡорт Уралы - Урал батыр Ере" ҡатнаш тәбиғи һәм мәҙәни объекты ЮНЕСКО Бөтә донъя мираҫының яҡынса исемлегенә индерелде. Әлеге ваҡытта республикала "Шүлгәнташ" мәмерйәһе ҡарамағында музей-ҡурсаулыҡ булдырыу, унда ғилми тикшеренеүҙәр һәм эштәрҙе реставрациялауҙы ойоштороу, шулай уҡ республикала Ҡомарҡтыларҙы һәм иҫтәлекле урындарҙы һаҡлау буйынса халыҡ-ара советтың Рәсәй милли комитетының төбәк бүлексәһен асыу буйынса эштәр алып барыла.

✓ Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте Рәйесе Дмитрий Медведев Мәскәүҙә "Алтын көҙ" XVI Рәсәй Агросәнәғәт күргәҙмәһен тантаналы асыуҙа ҡатнашты. РФ Хөкүмәте Рәйесенең айырыуса иғтибарын Башҡортостан экспонаты, Өфөнөң бал мармеладынан эшләнгән Дуҫлыҡ монументы йәлеп итте. 95 килограмм ауырлыҡтағы скульптураның бейеклеге 1,3 метр, диаметры 1 метр тәшкил итә. Уны эшләү өсөн 1220 дана мармелад ҡулланылған, рецептураһында башҡорт балы һәм инә ҡорт һөтө бар. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың һындары балауыҙҙан яһалған.

✓ "Алтын көҙ" XVI Рәсәй Агросәнәғәт күргәҙмәһендә Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Гран-приға лайыҡ булды. Ойоштороусыларҙың фекере буйынса, Башҡортостандың стиллләштерелгән экспозицияһы милли колоритты ғына түгел, республиканың агросәнәғәт комплексы мөмкинлектәрен дә лайыҡлы сағылдыра. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостандың аҙыҡ-түлек һәм эшкәртеү сәнәғәте предприятиелары күргәҙмәлә төрлө-төрлө һөт, ит, ликер-араҡы, икмәк-күмәс һәм кондитер аҙыҡ-түлектәре тәҡдим итте.

✓ Федерация Советы Рәйесе Валентина Матвиенко етәкселегендә Рәсәй Мәҙәниәт министрлығында уҙған ултырышта Федерация Советының Мәғариф, фән һәм мәҙәниәт буйынса комитет рәйесенең беренсе урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова тәбәктәрҙә мәҙәниәтте үҫтереүгә федераль ҡаҙнанан аҡса бүлеү практикаһын дауам итергә тәҡдим итте. Был фекерҙе ойоштороу комитетының күпселек ҡатнашыусылары, шул иҫәптән Рәсәй Парламентының юғары палатаһы спикеры Валентина Матвиенко ла хупланы. Тәҡдим ултырыш протоколына индерелде.

*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# БАР ҺҮҘҘӘРҘЕ ЛӘ...

## тәржемә итеү кәрәкме?




**Редакцияла эшләгән ваҡытым ине. Һатыусы булып эшләгән бер таныш ҡатын ниндәйҙер мәсьәлә буйынса минән белешмә алырға булды. Мин уға күптән түгел генә гәзиттә ошо турала белгестәрҙең консультацияһы баҫылыуы тураһында әйттем. "Мин һеҙҙең гәзитте уҡымайым бит, - тине ул һәм минең һораулы ҡарашымды күреп, аҡлана башланы. - Әллә ниндәй телдә яҙаһығыҙ хәҙер, башҡортса ла түгел кеүек, һәр хәлдә, мин һеҙҙең гәзит телен аңламайым..."**

Танышымдың ниҙе күҙ уңында тотоуын шунда уҡ аңланым. Үҙгәртеп ҡороу, суверенитет яулау йылдары ине. Ул ваҡытта телебеҙҙе бөтә интернациональ һүҙҙәрҙән таҙартыу, урынына уларҙың төрки варианттарын ҡулланыу ғәҙәткә инеп китте, был яңылыҡты беҙ, журналистар, энтузиазм менән ҡабул иттек, уҡыусыға оҡшаймы-юҡмы икәнен уйлап та тормаҫтан, матбуғат баҫмалары телен үҙгәртергә тотондоҡ. Алдарына аңлатмалы һүҙлек һалып, руссаға йә сит илдекенә саҡ ҡына тартым һүҙҙәргә ғәрәп йә фарсынан алмаш эҙләп ултырыусылар аҙ булманы. Хатта ҡайһы бер һүҙҙәрҙе үҙҙәре уйлап сығарыусылар ҙа табылды. Бер коллегабыҙ, мәҫәлән, "парикмахер" һүҙен "сәстараш" тип үҙгәртте. Ә Өфөлә иһә "Парикмахерская" урынына "Бөҙрәхана"лар барлыҡҡа килде. Журналистар ғына түгел, был шауҡымға яҙыусылар ҙа эйәрҙе һәм әҫәрҙәрен "боронғоса" һүҙҙәр менән сыбарлай башланы, хатта ҡайһы бер китаптарҙа текстарҙың ярты бите һүҙлеккә әйләнде. Ул ғына түгел, әҙиптәр "Мин романымда шунсама боронғо һүҙ ҡулландым", тип маҡтаныша, тип тә ишетеп аптырағайныҡ.

- Мәҫәлән, "сәйәсәт" нимә була ул? - тип дауам итте әңгәмәне баяғы танышым.

- Политика.

- Улайһа, "сәйәсмән"е нимә?

- Политик.

- Йә, шулай әҙәмсә тел менән яҙып булмаймы инде?..

Күптәрҙең нисәмә тиҫтә йылдар буйы ҡолаҡ һәм күҙ өйрәнгән һүҙҙәрҙе икенсе төрлө әйтә башлауҙы хупламауы хаҡында аҙаҡ башҡа күп таныштарҙан ишетергә тура килде, был турала төрлө ҡор-йыйындарҙа ла һүҙ булды. Мин ошондай фекерҙәрҙе тыңлай торғас, үтә ныҡ башҡортлашҡан һүҙҙәрҙе үҙ лөғәтемдә лә, яҙған мәҡәләләремдә лә мөмкин тиклем әҙерәк ҡулланырға тырыштым. Ләкин яҙмаларым мөхәррир ҡулына эләккәс, йәнә интернациональ һүҙҙәрҙән таҙартыла ине. Берәүһе менән "Ул һүҙҙәрҙе аңлап бөтмәйҙәр бит" тип бәхәсләшеп киткәс, "Халыҡты беҙ өйрәтергә тейеш!" тигән яуап ишеттем. Уныһы менән килешәм, мәғлүмәт саралары ла тәрбиә менән шөғөлләнергә тейеш, тик бөгөнгө башҡортса гәзит-журналдарҙың яҙмышы ҡыл өҫтөндә торғанда, һәр яҙылыусы өсөн көрәш барғанда, уҡыусы минең кимәлгә күтәрелһен тип көтөп ултырмай, "Мөхәммәт үҙе тауға барған" кеүек, уның талаптарына ла эйәрергә кәрәктер, моғайын.

Беҙ быйыл үҙебеҙҙең китапханала "Алтын тирмә" уйыны ойошторорға һәүәҫләнеп киттек. Төрлө ойошмаларҙан командалар саҡырабыҙ. Шунда мин халыҡтың яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереүен тикшереү маҡсатында "Хәҙерге гәзиттәр "промышленность" һүҙен нимә тип яҙа?" тигән һорау ҡуйҙым. Яуап варианттары итеп "сәнәғәт", "фирҡә", "сәйәсәт" һәм "сеймал" тигән бөгөнгө матбуғатта иң йыш осраған һүҙҙәрҙе алдым. Һәм, беләһегеҙме, бер команда ла дөрөҫ яуап бирә алманы. Башлыса "фирҡә" менән "сеймал"ды һайланылар, ә өлкән класс уҡыусыларының бер командаһы хатта "сәйәсәт" тип әйтте. Был һүҙҙең беҙҙең телмәргә килеп инеүенә егерме йыл барҙыр. Өйрәнергә лә ваҡыт кеүек. Күрәһең, мәктәптәрҙә был темаға иғтибар бирмәйҙәрҙер. Иң ҡыҙығы, "промышленность" сәнәғәт була икәненә аптыраштылар, хатта бер уҡытыусы-пенсионер: "Мин сәнғәтте хәҙер сәнәғәт тип яҙалар икән тип уйлап йөрөгәйнем", - тип әйтеп һалды.

Телмәрҙә интернациональ һүҙҙәрҙе ҡулланыу хилафлыҡмы? Улар бит телебеҙҙе ярлыландырмай, ә байыта ғына. Латин, француз, инглиз телдәренән ингән, бөтәбеҙгә лә бала саҡтан таныш һүҙҙәрҙе филологтарҙан башҡа һирәк кеше аңлаған төрки һүҙҙәргә үҙгәртеү - башҡортлоҡтоң бер билдәһеме? Мәҫәлән, бер баҫмала "ҡулайлаштырыу" тигән һүҙ уҡып, "приспособление" тип аңлап ултырғайным, баҡһаң, бөтәбеҙ ҙә "оптимизация" тип белгән һәм һөйләгән күренешкә шундай бик уңышлы булмаған тәржемә тапҡандар икән. Мин, юғары белемле филолог, аптырап ултырғас, башҡаларға ней үпкә...

Дөрөҫөн әйткәндә, ҡайһы берәүҙәр шул яңы һүҙҙәр арҡаһында матбуғаттан, әҙәбиәттән ситләште, район гәзитенең руссаһын алдыра башланы. Ә бит республика баҫмаларының дубляжы юҡ. Бер башҡорт теле уҡытыусыһының өйөндә русса район гәзитен күреп аптырағайным. "Әй, ирем хәҙерге башҡорт телен аңламайым тип әйтә", - тип көлдө ул. Көлкөмө ни? Күпселек башҡорттар йәшәгән Әбйәлил районында хәлдәр шулай. Беҙ, телселәр, хәбәрселәр, үҙебеҙ аңлағас, башҡаларҙы уйламайбыҙ, арттан эйәрерҙәр, яйлап төшөнөрҙәр, тибеҙ ҙә ҡуябыҙ. Ләкин бөтәһе лә яңылыҡҡа эйәрергә ашыҡмай, ҡул һелтәп тороп ҡалыусылар ҙа байтаҡ бит. Ошо хаҡта кем нисек уйлай? Әйҙәгеҙ, фекерләшәйек!

**Рәхимә МУСИНА.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*



**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

# БАШҠОРТ УЛЫ МИН, ТИМӘ...

## минең улым, тиһен милләтең

**Сабир СӨЛӘЙМӘНОВ, боксер, Силәбе өлкәһе:** Журналистар Хәбир туғанымдан осрашҡан һайын: "Башҡорт булыуың менән ғорурланаһыңмы?" - тип һорағас, бер ваҡыт ул бөтөн Башҡортостанға: "Үҙ милләтең менән ғорурланыу өсөн аҡыл күп кәрәкмәй. Милләтең һинең менән ғорурланырлыҡ булһын!" - тигәйне. Был һүҙҙәр менән тулыһынса килешәм, өҫтәп, тик шуны ғына әйтер инем - халҡың өсөн эшләргә кәрәк. Илһөйәрлек, милләтең менән ғорурланыу "Мин башҡорт!" тип күкрәк ҡағып йөрөү түгел, ул тәү сиратта илеңә кәрәкле кеше булырға тырышыу. Үҙ мәнфәғәттәрен генә ҡайғыртып йәшәгән, байлығына ирәйеп, халыҡтан йөҙ борған башҡорт та башҡорт булыуы менән маһая ала, әммә милләт ундай улдарын ҡабул итмәй. Шуға күрә, йәштәр үҫкән һәм алға атлаған һайын артҡа, халҡына боролоп ҡарарға онотмаһын ине.

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР...*

# КӨНДӨ БОҘОП...

## баланды иртә өҙмә

**Йылдан-йыл миҙгелдәр бер-береһен тиҙерәк алыштырған, һыуыҡ көндәр йылыларына ҡарағанда йышыраҡ була булған кеүек тойола. Быйылғы йәйҙең дә эҫе көндәре һирәк булды, көҙ ҙә бик иртә килде.**

Сентябрь айы бөтөр-бөтмәҫтән көндәр һыуытҡанға болоҡһоп йөрөгәндә, бер танышымды осраттым. Һөйләгән хәбәре шул булды: ауылға ҡайтҡандар, урманға балан йыйырға барғандар. Шунда ҡылт итеп өләсәйемдең иртә көҙ менән балан йыйған ҡатындарға төрттөрөп әйткәне иҫкә төштө: "Балан өҙһәң - көн һыуый. Иртә көҙҙән балан йыймағыҙ", - ти торғайны ул.

Картуфын ҡаҙып алып өлгөрөргә, кәртә-ҡураны ҡышҡылыҡҡа нығытып, мал-тыуарҙы аҫырарлыҡ бесәнен әҙерләп ҡуйырға, тағы әллә күпме ваҡ-төйәк эштәрҙе сатлама һыуыҡтарҙан алда тамамларға ашыҡҡан ауыл кешеһе өсөн, ысынлап та, көҙҙөң иртә килеүе күп уңайһыҙлыҡ тыуҙыра. Өләсәйемдең бер саҡ: "Көндәр тиҙ һыуынмаһа, малдар ҙа ҡырҙа йөрөр, бесәнгә лә көс төшмәҫ ине. Өлгөрә алмаҫтай булып, бөтөн кешенән алда балан йыйып ҡайтҡанһығыҙ. Баланды һуң йыйһаң да бер ни түгел", - тип бер нисә ауылдаш ҡатынды шелтәләгәненә шаһит булынғайны. Улары: "Эргә-тирәлә бөтөп ҡуйыр тип кенә йыйҙыҡ. Бына, бешкән бит, инәй", - тип аҡланырға иткәс, "Элек бер ҙә бөтмәй торғайны, кеше алдынан да йөрөмәнек. Көндөң маҙаһын алып, иртәләгәнһегеҙ", - тип ҡырт киҫте өләсәйем. Ә иң ҡыҙығы шул - был ваҡиғаның иртәгәһенә үк көндөң маҙаһы китте, болотлап, һыуытып ебәрҙе...

Хәйер, һауа торошо ҡырҡа үҙгәреүҙә иртә көҙҙән балан йыйыусыларҙы ғына ғәйепләп тә булмайҙыр, тәбиғәт шарттарын көйләү кеше ҡулында түгел. Шулай ҙа "көндө боҙоп йөрөүсе" ауыл ҡатындарын өләсәйем тәбиғәткә зыян килтереүҙән бигерәк (һәр нәмәнең үҙ мөҙҙәте, емеште лә ваҡытын белеп йыйырға кәрәк), башҡаларҙан алда өлгөрөп ҡалырға ынтылыуҙа, нәфселәрен тыймауҙа битәрләгән, шул рәүешле тәрбиәүи һабаҡтар биргән, тип аңлайым. Үкенескә күрә, бөгөн барыһын да үҙенеке итергә ашығып мөлкәт йыйған, етеш тормош көтөргә тырышыу менән ҡомһоҙлоҡтоң айырмаһын белмәҫ хәлгә еткән кешеләрҙе йыш осратабыҙ. Әллә ошо әҙәпһеҙлекте күреп тә тәбиғәт беҙҙе аҡылға ултыртырға тырышамы икән?..

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Хөкүмәте 2015 йылда Ураҙа байрамын һәм Ҡорбан байрамын уҙғарыу даталары тураһында ҡарар ҡабул итте. "Башҡортостан Республикаһында байрам һәм иҫтәлекле даталар тураһында"ғы законға ярашлы төбәк халҡы 17 июлдә Ураҙа байрамын һәм 24 сентябрҙә Ҡорбан байрамын билдәләйәсәк. Был көндәр республикала ял көндәре тип иғлан ителгән.

✓ Күгәрсен районында Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге республика журналистар премияһы лауреаттарын бүләкләү тантанаһы уҙҙы. Быйыл был дәрәжәле профессиональ премияға өс кеше лайыҡ булды. Улар: "Молодежная газета" редакцияһының бүлек мөдире Людмила Кашапова, "Атайсал" гәзитенең баш мөхәррире Хәйҙәр Тапаҡов һәм "Кызыл таң" гәзите редакцияһының бүлек мөдире Олег Төхвәтуллин. Тантанала республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов, БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһе Борис Мелкоедов ҡатнашты.

✓ Башҡорт дәүләт медицина университетында Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы илдәре проекттарының инновацион-эксперт майҙансығы ойошторolасаҡ, тип белдерҙе "Мәскәү эшҡыуарҙар ассоциацияһы" төбәк-ара йәмәғәт ойошмаһында Инновацион һәм венчур финанслауы буйынса комитет Рәйесе, инвестор, директорҙар советы ағзаһы һәм бер төркөм компаниялар, ойошмалар етәксеһе Дмитрий Горбунов. Уның әйтеүе буйынса, өс айҙан һуң Башҡорт дәүләт медицина университетында тәүге экспертиза уҙасаҡ.

✓ Яҡын арала республика етештереүселәре тарафынан әҙерләнгән ит аҙыҡтары эмбарго һөҙөмтәһендә рестарандар һәм супермаркеттарҙа бушаған урындарҙы аласаҡ. БР Сауҙа буйынса дәүләт комитеты һәм Башҡортостан сауҙа ассоциацияһы тарафынан әлеге миҙгелдә тәүге тапҡыр ойошторолған сауҙа-һатып алыу конференцияһында ҡатнашыусылар ошондай һығымтаға килде.

✓ Салауатта йәш таланттар өсөн Владимир Спиваков исемендәге музыка мәктәбе асылды. Рәсәйҙең халыҡ артисы асыу тантанаһында үҙе ҡатнашты. Мәктәп билдәле дирижер хәстәре аҫтында эшләйәсәк. Рәсәйҙең халыҡ артисы музыка мәктәбенә бүләккә яңы музыка ҡоралдары: алты скрипка һәм бер виолончель тапшырҙы. Халыҡ-ара хәйриә фонды президенты, бөтә донъяға билдәле музыкант Владимир Спиваковтың республикаға ике көнлөк сәфәре Өфөлә хәйриә концерты менән тамамланды.

**"Башинформ"дан.**

*✓ Гөлнара менән Михаил икеһе лә ваҡытында Башҡорт дәүләт аграр университетында уҡып, ошо вуздың иң әүҙем КВН-сылары булған. Асҡын һылыуы менән Йылайыр егете, шулай итеп, баш ҡалала матур ғаилә ҡороп, өс бала үҫтерә.*



*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

**2004 йылдың 29 декабрендә ҡабул ителгән "Рәсәй Федерацияһының Торлаҡ кодексын ғәмәлгә индереү тураһында" 189-ФЗ Федераль законында билдәләнгәнсә, күп фатирлы йорт йәки йорт составына ингән башҡа күсемһеҙ милек объекттары урынлашҡан ер участкалары күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәрҙең дөйөм милке булып тора (16-сы статья, 1-се пункт).**

# ТӨҘӨЛӨШ ЕРЕНӘ КЕМ ХУЖА?

Шулай уҡ 214-ФЗ Федераль закондың 2-се статьяһының 1-се өлөшөнә ярашлы, төҙөлөш эштәрен алып барыусыға ер участкаһы милек, ҡуртым, субаренда йәки бушлай ваҡытлыса файҙаланыу хоҡуғында бирелә. Закон акттары һәм юғары хоҡуҡ органдары аңлатмаларына ярашлы, кадастр теркәүенә ҡуйылған ер участкаһы төҙөлөшкә өлөшләтә ҡатнашыусы булып ингән бина хужаларының дөйөм милек өлөшсөнә хоҡуғы төҙөлөштә ҡатнашыусыларҙың хоҡуғы дәүләт теркәүе алған мәлдән башлана. Төҙөлөүсе объектҡа милек өлөшсөнә хоҡуғына дәүләт теркәүе дөйөм милек өлөшсөнә булыу хоҡуғын бирә. Был нормалар буйынса, граждан күп фатирлы йорттағы теләһә ниндәй бинаға үҙ хоҡуғын теркәтеү менән йорт ҡарамағындағы ер участкаһы йортта йәшәүселәр милкенә күсә һәм төҙөүсе йәки быға тиклем булған милексе уға хоҡуғын юғалта.

Төҙөлөштә өлөшсө булараҡ ҡатнашыу тураһындағы закондың 12.1 статьяһының 1-се пунктына һәм 13-сө статьяһының 1-се пунктына ярашлы, төҙөүсенең өлөшсө булараҡ ҡатнашыусылар менән төҙөлгән килешеүҙә ҡаралған барлыҡ йөкләмәләр үтәлгәнгә тиклем, ошо ерҙә төҙөлгән йорт йәки башҡа объект дәүләт теркәүе тураһында килешеү төҙөлгәндән башлап төҙөлөштә өлөшсө булараҡ ҡатнашыусыларҙа залогта тип иҫәпләнә. Өлөшсө булараҡ төҙөлөштә ҡатнашыу тураһындағы закондың 12-се статьяһының 1-се пунктына ярашлы, төҙөүсенең йөкләмәләре ике яҡ араһында объекттың тапшырылыуы тураһында документҡа ҡул ҡуйылғандан һуң ғына үтәлгән тип һанала.

189-ФЗ законының 16-сы статьяһының 6-сы пунктына ярашлы, РФ-ның Торлаҡ кодексы ғәмәлгә ингәндән һуң төҙөлгән йәки реконструкция эшләнгән күп фатирлы йорттар һәм улар составына ингән күсемһеҙ милек объекттары ҡабул итеү комиссияһы йорттарға ҡараған участкаһың күләме һәм сиге билдәләнгән осрақта ғына ҡабул ителә. Бынан тыш, 171-ФЗ федераль законына ярашлы, күп фатирлы йортто һәм уға ҡараған башҡа объекттарҙы файҙаланыуға тапшырыуға рөхсәт бары тик ер участкаһы сиктәре тураһындағы мәғлүмәт күсемһеҙ милектең дәүләт кадастрына индерелгән осрақта ғына бирелә.

Шулай итеп, күп фатирлы йорт һәм уның составына ингән объекттар төҙөлгән ер участкаһы ошо йортта йәшәүсе милекселәрҙең милке булып тора. Шул уҡ ваҡытта биналарға хоҡуҡтың төҙөүсенән милекселәргә күсеү зарурлығы ер һәм ҡала төҙөлөшө ҡануниәте ҡағиҙәләре буйынса формалашыуы менән аңлатыла. Ул формалаштырылғанға тиклем милексе (төҙөүсе, муниципаль берәмек һ.б.) ерҙең күп фатирлы йорт төҙөлә торған өлөшө менән идара итә алмай. Бина милекселәре был ер участкаһы менән йортто һәм уға ҡараған күсемһеҙ милек объекттарын эксплуатациялауға талап ителгән тиклем генә файҙалана ала. Күп фатирлы йорт һәм уның составына ингән объекттар төҙөлгән ер участкаһын дөйөм милекҡә бушлай күсертеү өсөн был йортта ошо ерҙең ер һәм ҡала төҙөлөшө ҡануниәте талаптарына ярашлы формалаштырылыуы һәм уны дәүләт кадастр иҫәбенә индерелеүе кәрәк.

**Юлия ГРИШИНА,**
**БР буйынса Дәүләт теркәүе, кадастр һәм картография федераль хеҙмәте идаралығы белгесе.**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ЙӘШ ҒАИЛӘЛӘР...

## бәйге тотто



Өфөнөң ете районынан йөҙәк ҡашылай ете ғаилә: Воротниковтар (Ленин районы), Юриндар (Киров районы), Шакировтар (Совет районы), Вәлиевтар (Орджоникидзе районы), Мостафиндар (Калинин районы), Карповтар (Дим районы), Шабановтар (Октябрь районы) йыр-бейеүгә, нәфис һүҙ оҫталығына маһирлығын күрһәтте, ғаилә тормошонда осрап торған донъяуи күренештәрҙе сәхнәләштереп, теге йәки был хәлдәрҙән изгелек, юмор һәм йыр ярҙамында мөнәсәбәттәр юғарылығына өлгәшеү юлдарын эҙләп тапты.

Бала тәрбиәләү - камил ғаиләнең иң изге бурысы икәнлеген дә онотманы конкурсанттар. Был ижади имтихан ата-әсәләренең иң яҡшы сифаттарын туплаған, шул уҡ ваҡытта заманға ярашлы, үҙ һыҙаттары ла беленә башлаған өр-яңы быуат талантары үҫеп килеүен күҙәләндерҙе.

Конкурстың финал өлөшө - "Берәү - бөтәһе өсөн, бөтәһе - берәү өсөн!" тип аталған өйгә эш сәхнәһе тамашасылар алҡышынан гөрләп-гөрләп барҙы. Кемдәлер айырып билдәләүе лә ауыр ине (жюри комиссияһы ни хәл ҡылғандыр): береһенән-береһе матурыраҡ, талантлыраҡ, татыураҡ был ғаиләләр үҙ райондары буйынса иң-иңдәрҙән һайлап алынғайны бит!

Һөҙөмтәлә һәр ярыш төрөнә бирелеп, тупланып барған баһа - мәрәйҙәр һаны буйынса Киров районынан Гөлнара менән Михаил Юриндар ғаиләһе Гран-при бүләге - автомобилгә лайыҡ тип табылды. Гөлнара менән Михаил икеһе лә ваҡытында Башҡорт дәүләт аграр университетында уҡып, ошо вуздың иң әүҙем КВН-сылары булған. Асҡын һылыуы менән Йылайыр егете, шулай итеп, баш ҡалала матур ғаилә ҡороп, өс бала үҫтерә. Ҡыҙҙары Полина бал һәм спорт бейеүҙәре буйынса ҡала, республика һәм хатта Бөтөн Рәсәй конкурстары призеры. Игеҙәк улдары Демид менән Владислав та йыр-бейеүгә ынтылып тора, теремек, шуҡ, шаяндар.

- Өфө - йәшлек ҡалаһы. Баш ҡалабыҙҙың һәр икенсе гражданын 35 йәшкә тиклемгә йәш кешеләр тәшкил итә, - тине Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов еңеүсе ғаиләне тәбрикләп. - Йәш ғаиләләрҙең дә арта барыуы ҡыуаныслы күренеш. Уларға буш ваҡыттарын файҙалы итеп үткәреү, бергәләп ял итеү һәм спорт менән шөғөлләнеү өсөн баш ҡалабыҙҙа уңайлы шарттар булдырыла, спорт ҡоролмалары, мәҙәниәт үҙәктәре, парктар төҙөлә. Уникаль мәҙәни һәм тәрбиәүи сараларҙың береһе булған йәш ғаилә конкурстары ла йылдан-йыл камиллаша, популярлаша бара. Дәүләт ғаилә программалары уңышлы тормошҡа ашырыла. Бөтөн был саралар йәш ғаиләләрҙең бөтөнлөгөн тәьмин итеүҙә, уны ныҡытыуҙа баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә, сөнки ныҡлы һәм татыу ғаилә йәмғиәтебеҙ ҡеүәтен, уның нигеҙен тәшкил итә.

Сынтимер Баязитов Гөлнара менән Михаил Юриндарға төп приз - өр-яңы автомобиль асҡысын тапшырҙы.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*АФАРИН!*

# РӘСӘЙҘЕҢ ЭКОЛОГИК ИМЕН ҠАЛАҺЫ

**Илдең 87 иң эре ҡалаһы араһында барған экологик рейтингта Өфө иң юғары баҫҡысҡа күтәрелде. Уның артынан Саранск, Вологда, Мәскәү һәм Воронеж тора.**

РФ тәбиғәт ресурстары һәм экология министры урынбаҫары Ринат Ғиззәтуллин белдереүенсә, атап үтелгән мегаполистарҙың барыһында ла тиерлек атмосфера һауаһы һәм һыу ҡулланыу, транспорт, ҡала территорияларын файҙаланыу, энергияны ҡулланыу буйынса имен хәл-торош күҙәтелә. Рейтинг халыҡ-ара практикала ҡулланылған һәм Рәсәй шарттарын иҫәпкә алып аныҡланған күрһәткестәргә ярашлы төҙөлгән. Өфөлә, мәҫәлән, экология өлкәһендә бик күп эшләнә. Ҡаланың барлыҡ эре предприятиеларында һауаға сығарылған ҡалдыҡтарҙы теркәп барыусы ҡоролмалар ҡуйылған. Был бигерәк тә Өфөнөң төньяҡ өлөшө өсөн, унда 130-ҙан ашыу предприятие, шул иҫәптән нефть эшкәртеү заводтары булыуын иҫәпкә алғанда, көнүҙәк. Шулай уҡ территорияны йәшелләндереүгә лә ҙур иғтибар бүленә. Быйыл ғына ҡала урмандарында 56 мең яңы үҫенте ултыртылған. Парктар, скверҙар, аллеялар төҙөкләндерелә, яңылары асыла.

Автомобилдәрҙең һәм башҡа транспорттың атмосфераны бысратыуын кәметеү буйынса ла саралар күрелә - юлдар нормативҡа яраҡлаштырыла, киңәйтелә, реконструкциялана, был иһә тығындарҙы кәметә. Яғыулыҡтың экологик төрөнә күсеү буйынса ла эштәр алып барыла, йәмәғәт транспортының эше камиллаштырыла.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓2014 йылдың 1, 2, 3 һәм 4 ноябре ял көндәре тип иғлан ителгән. Халыҡтар берҙәмлеге көнө - 4 ноябрҙә - бөтә Рәсәй территорияһында эшләмәгән көн булып тора. Байрам алдындағы көн, йәғни дүшәмбе 3 ноябрь, шулай уҡ ял көнө буласаҡ. Был 2014 йылдың 24 февраленән күсерелгән ял көнө. Шулай итеп, эш аҙнаһы биш көн булған эшсәндәрҙе шәмбе 1 ноябрҙән алып шишәмбе 4 ноябргә ҡәҙәр 4 ял көнө көтә.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһы "Төрлә ҡалалар мөһим" бөтә Рәсәй конкурсында ҡатнашыусы ҡалалар рейтингында, беренселекте Ступино ҡалаһына биреп, икенсе урын яуланы. Бөгөнгә көнгә Өфө 146 меңдән ашыу тауыш йыйған. Конкурста Рәсәй Федерацияһының 53 субъектының йәмғеһе 160-тан ашыу ҡала ҡатнаша. Башҡортостан ҡатнашыусы ҡалалар иҫәбе буйынса лидерлыҡ итә. Исемлеккә республиканың туғыҙ ҡалаһы инә: Өфө, Туймазы, Күмертау, Ағиҙел, Салауат, Стәрлетамаҡ, Дүртөйлө, Благовещен һәм Мәләүеҙ.

✓Волгодонск ҡалаһында ҡыҫҡа метражлы фильмдарҙың II өлкә кинофестивале тамамланды. "Башҡортостан" киностудияһының Өфө режиссеры Булат Йосопов төшөргән "Визит" фильмы кинофестиваль Гран-прийһын яуланы һәм "Иң яҡшы уйналған фильм" тип табылды. Сарала төрлө жанрҙарҙа һәм номинацияларҙа профессиональ кинематографтарҙың һәм һәүәҫкәр авторҙарҙың 30-ҙан ашыу эше ҡатнашҡан.

✓Йыл башынан алып "Башнефть" автомобиль заправкалау станцияларында бензинға хаҡтар алты тапҡыр ҡиммәтләнде. Ошо арала "Башнефть" бер литр бензинға хаҡты яғыулыҡтың маркаһына ҡарап тағы 20-70 тингә арттырҙы. Супер Евро-98 бензины 70 тингә ҡыйбатланды һәм хәҙер уның бер литры 37,4 һум тора. Премиум Евро-95 -30 тингә (35,1 һум), Регуляр-92 һәм Нормаль-80 - 20 тингә артты (31,5 һәм 30,7 һум).

✓21 октябрҙән алып 26-на тиклем Өфөлә Рус дәүләт академия драма театры сәхнәһендә Бөләкәй дәүләт академия театрының (Мәскәү) гастролдәре уҙасаҡ. Гастролдәр 25 һәм 26 октябрҙә Рәсәйҙең халыҡ артистары Ирина Муравьева, Борис Клюев, Александр Потапов, Лилиә Юдина ҡатнашлығында Александр Островскийҙың "На всякого мудреца довольно простоты" комедияһы менән ябыласаҡ.

✓ Ҙур саммит алдынан республиканың баш ҡалаһында милли ризыҡтар әҙерләүсе кафе һәм рестораандар селтәрен булдырыу зарурлығы килеп тыуҙы. Улар яңы төҙөлгән ҡунаҡханаларҙа урынлашасаҡ.



БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# ҠУНАҠ ҠАРШЫЛАРҒА ӘҘЕРЛӘНӘБЕҘ

**2015 йылда баш ҡала ШОС һәм БРИКС саммиттарын уҙғарырға әҙерләнә. Был йәһәттән ябай гәзит уҡыусыға нимә белергә кәрәк?**

ШОС - Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы. Рәсәйҙе, Ҡытайҙы, Ҡаҙағстанды, Ҡырғыҙстанды, Тажикстанды һәм Үзбәкстанды берләштерә. Ойошма Сик буйындағы хәрби өлкә районында ышанысты нығытыу тураһында һәм Сик буйы районында ҡоралды көстәрҙе ике яҡлы кәметеү тураһында бер яҡтан - Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Рәсәй, Тажикстан, икенсе яҡтан Ҡытай араһында 1996, 1997 йылдарҙа ҡабул ителгән килешеү нигеҙендә төҙөлә. ШОС-тың юғары ойошмаһы - ШОС ағза-илдәре башлыҡтары советы. Ул өҫтөнлөклө йүнәлештәрҙе билдәләй, башҡа дәүләттәр һәм халыҡ-ара ойошмалар менән хеҙмәттәшлек буйынса һәм башҡа көнүҙәк халыҡ-ара мәсьәләләрҙе хәл итә.

БРИКС - биш тиҙ үҫешеүсе ил төркөмө: Бразилия, Рәсәй, Һиндостан, Ҡытай, Көньяҡ-Африка Республикаһы. Ойошма 2006 йылда Рәсәй Президенты Владимир Путин инициативаһы менән барлыҡҡа килә. Халыҡ-ара аренала БРИКС-тың йоғонтолоҡ нигеҙен ағза-илдәрҙең үҫешеүсе иҡтисади ҡеүәте, уларҙың кешелекте ресурстар менән тәьмин итеүҙә мөһим урын алып торған демографик позициялары билдәләй.

**ШОС һәм БРИКС-тан ҡаласаҡ мираҫ:**

- "Өфө уттары" йәштәр үҙәгенән алыҫ булмаған урында, Октябрҙең 50 йыллығы урамында төҙөлгән HAMPTON BY HILTON ҡунаҡхана комплексы. Дөйөм майҙаны - 7,6 мең квадрат метр.
- БДУ территорияһы эргәһендә төҙөлгән HILTON ҡунаҡхана комплексы. Дөйөм майҙаны - 33,27 мең кв. метр.
- Менделеев урамында төҙөлгән HILTON ҡунаҡхана комплексы. Дөйөм майҙаны - 17 мең квадрат метр.
- "Аҡбуҙат" ипподромы эргәһендә төҙөлгән LINE ҡунаҡхана комплексы. Дөйөм майҙаны - 13 мең квадрат метр.
- "Ҡунаҡһарай" эргәһендә төҙөлгән HOLIDAY INN ҡунаҡхана комплексы. Дөйөм майҙаны - 49,79 мең квадрат метр.
- Ленин урамындағы "Башҡортостан" ҡунаҡханаһына төкәтмә. Дөйөм майҙаны - 6,7 мең квадрат метр.
- Маяковский скверы ҡаршыһында, Цюрупа урамында төҙөлгән ҡунаҡхана комплексы.
- Революцион урамында, "Уралсиб" банкы эргәһенә төҙөлгән RADISSON ҡунаҡхана комплексы. Дөйөм майҙаны - 13,67 мең квадрат метр.
- Цюрупа һәм Зәки Вәлиди урамдары киҫелешендә төҙөлгән ҡунаҡхана комплексы.
- Гоголь урамында төҙөлгән ҡунаҡхана комплексы. Дөйөм майҙаны - 8,18 мең квадрат метр.

Бынан тыш, халыҡ ремонтланған ҡала урамдарына, яңы юлдарға, юл сиселештәренә эйә буласаҡ. Әлеге ваҡытта барлығы баш ҡаланың 29 урамы ремонтланған. Өфө-Ырымбур, Өфө-Аэропорт юлдары ла яңырасаҡ. Ағиҙел ярының көнбайыш битләүе төҙөкләндереләсәк, шәхси йорттар күсереләсәк. Яңы юл сиселеше, Затон күперенең икенсе сираты, тиҙ йөрөшлө трамвай линияһы төҙөләсәк. "Нефтсе" мәҙәниәт һарайы реконструкцияла на. Шулай уҡ тимер юл төҙөлөшөнөң ике объекты ҡалҡып сығасаҡ, Өфө тимер юл вокзалы төҙөлөшө тамамланасаҡ.

**Волонтерҙар.** Октябрь башында ШОС һәм БРИКС илдәре саммитында эшләү өсөн ете меңенсе ирекмән теркәлгән. Улар араһында Башҡортостан студенттары ғына түгел, Ҡытайҙан, Ирандан, Тажикстандан, Ҡаҙағстандан да вәкилдәр бар.

**"55/55".** Башҡортостандың Кушнаренко районы Түбәнге Сәйет ауылы эргәһендәге баҫыуҙа 55 градус төньяҡ киңлек һәм 55 градус көнсығыш оҙонлоҡ киҫешкән урында 4 метр оҙонлоғонда географик билдә ҡуйылған. Унда Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһына ингән Ҡытай, Рәсәй, Ҡаҙағстан, Тажикстан, Ҡырғыҙстан, Үзбәкстан илдәренең һәм БРИКС илдәре - Бразилия, Рәсәй, Һиндостан, Ҡытай һәм Көньяҡ Африка республикаһы баш ҡалаларының күрһәткестәре ҡуйылған. Был - планетала ҡоро ерҙә булған берҙән-бер "55/55" нөктәһе. Башҡа бындай нөктәләр донъя океанында урынлашҡан.

**"Сикләүҙәрһеҙ белем биреү".** Былтыр Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы юғары уҡыу йорттары консорциумына (ШОС университеты) Башҡорт дәүләт педагогия университеты инде. Уҡыу йорто ШОС илдәре мәғарифы киңлегендә алдынғы педагогик вуздарҙың береһе булып тора. Хәҙер Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы университеты составында бөтәһе 82 юғары уҡыу йорто бар. Был университет ғәҙәттәге айырым белем биреү йорто түгел. Ул өҫтөнлөклө иҡтисад, ғилми-уҡытыу, техник һәм мәҙәни хеҙмәттәшлек өлкәләре буйынса юғары квалификациялы кадрҙар әҙерләү маҡсаты менән берләшкән ШОС дәүләттәренең вуздар селтәре. Университеттар селтәре шулай уҡ күҙәтеүсе илдәрҙә: Һиндостанда, Иранда, Монголияла һәм Пакистанда бар.

Селтәрле юғары уҡыу йортонда төбәктә өйрәнеү, экология, IT-технологиялар, нанотехнологиялар йүнәлештәре буйынса юғары квалификациялы кадрҙар әҙерләйҙәр. Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы университетына Рәсәйҙән Мәскәү дәүләт халыҡ-ара мөнәсәбәттәр институты, Мәскәү дәүләт университеты, Санкт-Петербург мәғлүмәти технологиялар, механика һәм оптика тикшеренеү университеты, Новосибирск дәүләт милли тикшеренеү университеты, Санкт-Петербург дәүләт электр-техник университеты, Б.Ельцин исемендәге Урал федераль университеты, Халыҡтар дуҫлығы исемендәге Рәсәй университеты кеүек эре вуздар инә.

Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһының селтәрле университет студенты булыу өсөн үҙ илендәге базалы вуздарҙың береһенә уҡырға инергә, ә артабан килешелгән программа буйынса белем алыуҙы ошо уҡ вузда йәки Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы университетының икенсе вузында дауам итергә кәрәк. Уҡыуҙы тамамлағанда студентҡа төп белем биргән юғары уҡыу йорто дипломы һәм Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы университеты сертификаты бирелә.

**Милли кухня.** Ҙур саммит алдынан республиканың баш ҡалаһында милли ризыҡтар әҙерләүсе кафе һәм рестораандар селтәрен булдырыу зарурлығы килеп тыуҙы. Улар яңы төҙөлгән ҡунаҡханаларҙа урынлашасаҡ. Башҡорт милли аш-һыуын тәҡдим итеү менән бер рәттән, уларҙың сифаты ла юғары булыуы мөһим. Был йәһәттән Башҡортостан кулинарҙары төшөп ҡалғандарҙан түгел: апрелдә Мәскәүҙә үткән конкурста оҫталар илдең 40 иленән килгән коллегалары менән төрлө номинациялар буйынса дүрт көн буйына көс һынашып, дүртенсе урын яуланы.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ШТРАФ АРТА

**Башҡортостан парламентарийҙары балиғ булмаған йәштәгеләргә алкоголле эсемлектәр һатҡан өсөн иң түбән штраф күләмен Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында РФ кодексының 2-се бүлеге 14.16 статьяһында ҡаралған иң юғары административ кимәлдә билдәләүҙе тәҡдим итә.**

Был башланғыс Дәүләт төҙөлөшө, хоҡуҡ тәртибе һәм хөкөм мәсьәләләре буйынса комитет ултырышында ҡаралды, тип хәбәр итә республика парламентының матбуғат хеҙмәте. Закон проекты Дәүләт Думаһы ҡарауына индереләсәк.Комитет шулай уҡ Енәйәт кодексының 158-се статьяһына һәм Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында Кодекстың 7.27-се статьяһына үҙгәрештәр индерергә тәҡдим итте. 158-се статьяла граждандарға килтерелгән зыян ҙур түгел тип иҫәпләнгән сумманың юғары кимәлен 2,5 меңдән 4 меңгә тиклем арттырырға тәҡдим ителә. Ваҡ урлашыуҙар өсөн штраф күләмен 1 меңдән 2 меңгәсә арттырыу ҡарала. Был тормош ысынбарлығынан сығып та, шулай уҡ ҡулланыу әйберҙәренә хаҡтар артыуын күҙҙә тотоп та эшләнә.

## БЫСРАНЫУҘАН ҺАҠЛАП...

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары республиканың Экология кодексына төҙәтеүҙәр индерҙе.**

Аграр мәсьәләләр, экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу комитеты ултырышында автомашиналарҙың тирә-яҡ мөхиткә тәьҫирен кәметеүгә йүнәлтелгән әлекке саралар ҙы бер аҙ йомшартырға тәҡдим ителде. Комитет рәйесе Рәсүл Ғосманов билдәләүенсә, бөгөнгө көндә тирә-яҡ мөхитте мотор яғыулығынан барлыҡҡа килеүсе матдәләрҙән һаҡлау буйынса мәсьәләләрҙе көйләү дауам итә. Мәҫәлән, депутат төҙәтмәләрендә мотор яғыулығының тирә-яҡ мөхиткә сығарылыусы зарарлы матдәләрен кәметеүсе прибор ҡуйып йөрөүен нығытҡан нормалар билдәләнгән.

## КЕМДЕҢ ПРОЕКТЫ ЯҠШЫРАҠ?

**Өфөлә Салауат Юлаев проспекты, Әй, Баҡалы, Минһажев урамдары менән сикләнгән территорияны үҫтереү буйынса асыҡ конкурс иглан ителә. Иң яҡшы идеялар кварталды планлаштырыу проектын әҙерләгәндә файҙаланыласаҡ.**

Конкурста проект ойошмалары, архитектура оҫтаханалары, дипломлы архитекторҙар ҡатнаша ала. Тәҡдим ителгән эштәр техник талаптарға һәм федераль, республика, муниципаль кимәлдәге ғәмәлдәге нормативтарға яуап бирергә тейеш. Проекттар 24 октябргә тиклем С. Богородская урамы, 25а адресы буйынса ҡабул ителә. Һорауҙарға: (347) 267-78-77 телефоны буйынса яуап алырға мөмкин.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Балан

❖ **нервы ауырыуҙарынан. 1)** Был сара тынысландырыусы булараҡ, хроник арыу, нервылар ҡуҙғыған ваҡытта ҡулланыла. 10 г балан ҡайырыһына 5 г мелисса япраҡтары өҫтәп, 1 стакан ҡайнар һыу өҫтәргә. Талғын утта 20-30 минут ҡайнатып, ярты сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. 7 көн дауаланғас, ял итеп алырға һәм дауаны ҡабатларға.

**2)** 2 ҡалаҡ балан, 2 балғалаҡ вахта үләне япрағы, 2 балғалаҡ бөтнөк япраҡтары, 3 балғалаҡ айыу ҡурайы (дягиль) тамыры, 1 балғалаҡ бесәй үләнен (валериана) ҡушып болғатырға. 1 ҡалаҡ үлән ҡатнашмаһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр стакан эсергә.

❖ **танау ҡанауын туҡтатыу.** 1 ҡалаҡ балан ҡайырыһына ярты стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 10 минут ҡайнатырға. 10 минут төнәтсәк, йылы көйөнсә һөҙөргә. Мамыҡты ошо төнәтмәгә манып, танау ҡыуышлығына ҡуялар.

❖ **һалҡын тейгәндә** балан төнәтмәһенә ҡушып һырғанаҡ майы һәм бал ҡулланырға кәрәк. 2 ҡалаҡ балан ҡайырыһы, 1-2 балғалаҡ бал, 5-10 тамсы һырғанаҡ майы. Балан ҡайырыһына 1 стакан һыу ҡойорға, 10 минут ҡайнатырға. Уттан алып, 10 минут төнәтергә. Һырғанаҡ майы һәм бал өҫтәргә. Көнөнә 2-3 тапҡыр ашарҙан алда яртышар стакан эсергә.

❖ **иммунитет нығытыу.** 100 г балан емеше, 200 г алоэ япрағы, 1 лимон, 200 г әстерхан сәтләүеген ит турағыстан үткәреп, 200 г аҡ май, 200 г бал өҫтәргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң 2 балғалаҡ ҡабул итергә.

❖ **экзема менән ауырығанда** көн һайын 2 стакан яңы һығылған балан һуты эсергә. 2 ҡалаҡ балан емешенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут төнәтеп, көнөнә 2-3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда яртышар стакан эсергә.

❖ балан ҡайырыһы төнәтмәһе төрлө **яраларҙы, йәрәхәттәрҙе дауалауҙа** ҡулланыла. 1 ҡалаҡ балан ҡайырыһы, 1 ҡалаҡ юшан (вероника) үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Термоста 2-3 сәғәт төнәткәс, һөҙөргә. Төнәтмә менән яраларҙы йыуырға, уға манылған мамыҡты ауыртҡан урындарға бәйләргә.

*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*



# ҠОРАЙТ, ҠОТОМ... кил, ҡотом!

**Төрлө ырым-йолалар балаларҙы дауалау өсөн дә киң ҡулланылған. Мәҫәлән, бала тотлоҡһа йәки оҙаҡ атламаһа, йылы икмәк һындырыу йолаһы башҡарылған.**

Яңы бешкән икмәкте баланың баш осонда һындарғандар, уның бер өлөшөн кендек инәһенә, икенсеһен этҡә биргәндәр. Бала оҙаҡ һөйләшмәһә, яңы ай тыуғанда табала бер-берәһенә йәбештереп өс йоморо икмәк бешерәһең. "Ай нисек яҡтыра, асыла, баламдың теле лә шулай асылһын", тип теләп, был икмәкте баланың биле һәм башы тәңгәленән ундан һулға ҡарай әйләндереп алалар.

Халыҡта эт имсәге тип йөрөтөлгән шеште йылы икмәк киҫәге менән дауалағандар. Икмәкте шешкә төртөп, шулай тип һамаҡларға кәрәк булған:

*1, 2, 3, 4, 5, 6, 7, 8, 9 - Туғыҙҙан ҡайтһын,*
*Туҙанға, тупраҡҡа китһен,*
*1, 2, 3, 4, 5, 6, 7 - Етенән ҡайтһын,*
*Елгә-ҡуҙға китһен.*
*1, 2, 3, 4, 5 - Биштән ҡайтһын,*
*Биш юл сатына китһен.*
*1, 2, 3 - Өстән ҡайтһын,*
*Осһон, бөтһөн.*
*1 - берҙән ҡайтһын,*
*Минең ҡулым түгел,*
*Ғәйшә, Фатима ҡулы.*

Бынан һуң икмәкте эткә ашатырға кәрәк. Ҡайһы берҙә һалма йәйеп, эттән килдең - эткә кит, ҡайҙа килдең, шунда кит, тип һамаҡлап, уны 40 (41) өлөшкә бүлеп, шешкә тейҙереп алғандар. Изге урындарҙан алынған һыу шулай уҡ шифалы сифаттарға эйә булған. Таңғы ысыҡты, иртә таң менән алынған шишмә һыуын махсус әйтемдәр менән имләгәндәр:

*Таңһыу әбей, һыу бир,*
*Шундай-шундай балаға*
*Имгә-йомға һыу кәрәк.*
*Оҙон сәсле, зифа буйлы,*
*Көмөш тешле һыу ҡыҙы,*
*Һыу бирең миңә.*

Тиф, бүҫер, нервы ауырыуҙары мәлендә мулла Ҡөрьәндән ауырыуға тап килгән доғалар табып, уны ҡара менән сынаяҡ аҫтына яҙған, һуңынан доғаны һыу менән сайып, ауырыуға эсергән. Ҡот ҡойған саҡта ҡулланылған һыу шулай уҡ шифаға эйә, тип иҫәпләнгән.

*Кил, ҡотом, кил, ҡотом,*
*Эйәләрең бында, ҡотом,*
*Ағын һыуҙай ағып кил,*
*Аҡ балыҡтай йөҙөп кил,*
*Эйәләрең бында, ҡотом,*
*Кил, ҡотом, кил, ҡотом,*
*Ҡорайт, ҡотом, кил, ҡотом!* - тип һамаҡлап, ҡото осҡан кешенең баш осонда тотолған һыулы һауытҡа иретелгән ҡурғаш ҡоялар. Һыуыҡ һыуҙа ҡатып ҡалған һын буйынса кешенең нимәнән ҡурҡҡанын белергә була. Был һыу менән ауырыуҙың битен, ҡулдарын, башын йыуалар, өс йотом һыуҙы эсергә ҡушалар:

*Имен бир, йүнен бир,*
*Иҫәнлеген бир.*
*Елдән килһәң, елгә кит!*
*Һыуҙан килһәң, һыуға кит!*
*Ҡайҙан килһәң, шунда кит!*
*Тфү, тфү, тфү!*

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ*

**Ҡорама оҫтаһы Рәшиҙә Ғиззәтуллина менән танышып китеүем осраҡлы булманы. Уның 2013 йылда сыҡҡан "Йәншишмә ҡайҙан башлана?" тигән китабы ҡулыма килеп эләккәс, мин уны сат йәбешеп уҡып сыға һалдым. Китап миңә электән белгән, бер ҡарауҙа ябай ғына күренгән тәғлимәттәрҙе икенсе юҫыҡта аңлатты. Рәшиҙә апайҙы саҡырып, уны ағинәйҙәребеҙ менән таныштырып, китабында яҙылғандар хаҡында уның үҙенән һөйләткем килде.**

# ҠОРАМАЛАР...

## усаҡ йылыһы кеүек



Бөрйән ерендә тыуып-үҫеп, оҙаҡ йылдар Стәрлетамаҡ ҡалаһында йәшәп, балаларға белем биргән Рәшиҙә Хәй ҡыҙы беҙҙең саҡырыуҙы ҡыуанып ҡабул итте. Ағинәйҙәребеҙ, мәктәп уҡыусылары менән уның китабы буйынса осрашыуҙар үткәрҙек. Ололар өсөн дә, балалар өсөн дә бик файҙалы булды был осрашыуҙар. Инде хаҡлы ялда булһа ла, һаман да балаларҙы уҡытыу эше менән булып, ереккән ерен ташлап, тыуған яғына ҡайтып төпләнергә мөҙҙәте етмәйерәк торған Рәшиҙә апайыбыҙ быйыл бөтөнләйгә Бөрйәненә ҡайтты һәм ихласлап "Ағинәйҙәр ҡоро" эшенә тотоноп китте. Ағинәйҙәребеҙ үҙ сафына ихлас ҡабул итеп алды уны.

Белмәгән һөнәре юҡ Рәшиҙә Хәй ҡыҙының. Ҡорама ҡораһынмы, мәрйен теҙһенме, кейеҙ баҫһынмы, буҙа эшләп эсерһенме, махсус рецепт менән арыш икмәге бешереп ашатһынмы - торғаны бер хазина һандығы ул. Күптән түгел район китапханаһында ағинәйебеҙ үҙенең шәхси ҡорамалар күргәҙмәһен ойоштторҙо. Төрлө сағыу төҫтәрҙәге ҡорама юрған-түшәктәр, рюкзак-сумкалар, кейем-һалым, баш кейеме, ҡашмау, милли кейемдәр - барыһы ла зауыҡ менән ҡорап-һырлап тегелгән. Халыҡ һоҡланып, ихлас ҡараны был күргәҙмәне. Сара ваҡытында Рәшиҙә апай үҙенең ҡорама ҡорарға нисек өйрәнеүен, теге йәки был ҡораманы ниндәй алымдар менән эшләүен матур итеп тәфсирләп һөйләп торҙо:

- Ҡорама ул - минең бала сағымдың яҡты һәм матур иҫтәлеге, - тип һөйләне ул. - Әсәйемдең төрлө тауар киҫәктәрен бергә йыйып, матурлап тегеп-һырлап ҡалдырған ҡорама юрған, түшәктәре әле лә йортомдо биҙәй. Ҡарап торғанда ҡатмарлы кеүек тойолһа ла, ҡораманың заманса технологияһы бик ябай. Уны ҡулына бер ваҡытта ла энә тотмаған кеше лә бер тотоноуҙа ҡорап ҡуя ала. Икенсе яҡтан, ҡорама ябай ғына әйбер ҙә түгел. Ҡорама ҡорауҙы ҡатын-ҡыҙҙың тормошто ҡороуы менән сағыштырам мин. Тормошоңдо төрлө мәшәҡәттәрҙән, ҡыуаныс-шатлыҡтарҙан нисек итеп бер бөтөн итеп ҡораһың, ҡораманы ла шулай, төрлө киҫәктәрҙе йыйып, тегеп, бер бөтөн итеп тоташтырып ҡуяһың. Минең ҡорамалар яҡты, сағыу киҫәктәрҙән тора, уларҙа ҡара төҫтәр юҡ тиерлек. Тормошто ла ҡатын-ҡыҙ тик матур, сағыу хис-тойғо, күңелле хәл-ваҡиғаларҙан ғына ҡорорға тейеш. Тормошоңдо нисек ҡораһың, ул шулай була. Өҫтөнлөктө ҡара төҫтәргә бирәһең икән, тормошоң да негатив юҫыҡта китә һәм, киреһенсә, сағыу, яҡты төҫтәргә өҫтөнлөк бирһәң, тормошоң да яҡты була. Быны психологтар күптән иҫбат иткән инде. Минең улдарым бәләкәйҙән ҡорама түшәктә йоҡларға яратты. Керләнә, тип, өҫтөн аҡ япма менән ҡаплаһам, беҙҙең ҡорама түшәктә ятҡыбыҙ килә, тип ныҡыша торғайнылар. Әйткәндәй, ҡораманы ирҙәр ныҡ ярата. Уларҙы ниндәйҙер көс тарта шул ҡорамаларға. Ҡорамала ҡатын-ҡыҙҙың күҙ нуры, ҡул йылыһы ҡалалыр, шул көс ир-егеттәрҙе үҙенә тарталыр, күрәһең.

Әйткәндәй, ҡорама әсәй-өләсәйҙәребеҙҙән тапшырыла килгән аманат ҡына түгел, ул - йортобоҙҙоң ҡото-бәрәкәте, йылыһы, тормошобоҙҙағы ваҡ ярсыҡтарҙы бергә тоташтырыусы ла. Усаҡ йылыһы кеүек улар. Кеше ҡорамалы өйгә инһә, уның күҙе иң беренсе шул сағыулыҡҡа төшә. Тимәк, ҡорама һаҡлағыс магияға ла эйә...

Рәшиҙә апай ағинәйҙәр менән бергә ҡорама ҡорарға өйрәнеү буйынса дәрестәр үткәрергә лә йыйына, сөнки күргәҙмәгә килеүселәр араһында ошондай теләк белдереүселәр күп булды.

- Йәй Бөрйәнгә ҡайтһам, шуға аптырай инем: туристар күп, әммә уларға тәҡдим итерлек, сувенир итеп һатырлыҡ бер әйбер юҡ, - ти Рәшиҙә апай ни өсөн ошондай эшкә тотонорға ҡарар итеүенең сәбәбен аңлатып. - Шул уҡ ҡораманан түшәк, йә башҡа әйбер, кейем тегеп, Бөрйәнгә ял итергә килеүселәргә тәҡдим итһәң, моғайын да, теләп һатып алырҙар ине. Ҡораманы кәсеп итеп тергеҙһәк, халыҡ та әҙ-мәҙ килем алыр ине. Минең ошо күргәҙмәмде ойоштороуымдың да төп маҡсаты шул: әсәй-өләсәйҙәр һөнәрен дауам итәйек, уларҙы аҡсаға әйләндерергә лә өйрәнәйек. Иш эргәһенә ҡуш була бит ул...

Ысынлап та, заман хәҙер егет кешенән генә түгел, ҡатын-ҡыҙҙан да етмеш һөнәрле булыуҙы талап итә. Рәшиҙә апайҙың ҡорамалары ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың күңелен арбап, шул һөнәргә өйрәнергә әйҙәгән икән, ҡыуанырға ғына ҡала.

**Фәриҙә АЙЫТБАЕВА.**
**Бөрйән районы**
**"Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе.**

*ХЕҘМӘТ ҺАБАҠТАРЫ*

# ИҢ ЯБАЙ БУҘА ШУЛАЙ ӘҘЕРЛӘНӘ

**Буҙаны Әбйәлил, Учалы яҡтарында урын-еренә еткереп, боронғо рецепт буйынса әҙерләйҙәр. Күптәр уны ҡатмарлы һымаҡ ҡабул итә һәм ошо файҙалы эсемлекте әҙерләү эшенә тотонорға ҡыйыулыҡ итмәй.**

Ә беҙ һеҙгә буҙа әҙерләүҙең яп-ябай рецебын тәҡдим итәбеҙ. 3 литр һалҡын һыуға 0,7 литр банка менән "Геркулес" ярмаһы һалып, 5-10 минутҡа ултыртып ҡуйырға. Артабан кәстрүлде талғын утҡа ҡуйып, бер ҡалаҡ аҡ май һалып, болғатып тораһың. Бер сәғәттән һуң килеп сыҡҡан кеҫәл һымаҡ массаны иләк аша үткәрергә һәм һыуытырға. Буҙа сифатлы булһын тиһәң, уны һыуытыу мотлаҡ. Һыуыған массаға 1-2 сынаяҡ ҡымыҙ (магазинда һатылғаны ла ярай) менән 1 сынаяҡ шәкәр ҡомо өҫтәргә. Бынан һуң буҙа ҡойолған һауытты йылыға төрөп ултыртып, бер көн генә көтөргә ҡала. Түҙемле булһаң, башҡорт халыҡ эсемлеге телеңде йоторлоҡ тәмле килеп сығасаҡ. Тик буҙағыҙҙан бер-ике сынаяҡ ойотҡо ҡалдырырға онотмағыҙ. Икенсе юлы буҙа әҙерләгәндә иһә ҡымыҙ түгел, ә ошо ойотҡоно ғына ҡулланырға була.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# БАШҠОРТОСТАНЫБЫҘ...

## Беренсе донъя һуғышы осоронда

**Тарих фәндәре кандидаты, Рәсәй Стратегик тикшеренеүҙәр институтының өлкән хеҙмәткәре Рәмил Насибулла улы Рәхимов Беренсе донъя һуғышы осорондағы Башҡортостан менән таныштырыуын дауам итә.**



### Башҡортостанда төҙөлгән полктар

Башҡортостанда ла мобилизация уңышлы үтә. Беҙҙә 170-се йәйәүлеләр полкы төҙөлә, уны генерал Корнилов етәкләй. Полк фронтҡа ебәрелә һәм 48-се дивизия менән берлектә данлыҡлы юл үтә, Карпат походында ҡатнаша, Венгрияға тиклем барып етә. Ләкин австро-венгрҙарға Германиянан ярҙам килеп төшөүе арҡаһында часть ғәскәренең күп өлөшө әсирлеккә эләгә. Шулай уҡ Златоуст өйәҙендә 330-сы полк ойоштороло. Ул һуғышты 1917 йылда тамамлай.

Уларҙан тыш, Башҡортостанда ополченсылар, дружинниктарҙан торған полктар төҙөлә. Был полктар, алдан уйланыуынса, тылда хәрби складтарҙы, хөкүмәт биналарын һ.б һаҡларға тейеш була. Башҡортостан дружиналары Петроградта Ҡышҡы һарайҙың һаҡ хеҙмәтен алып бара. Шулай уҡ Башҡортостандан ополченсылар полктары Кавказда, Себерҙә күп була. Һуңынан хәрби резервтар бөткән һайын дружинниктар ҙа, ополченсылар ҙа әүҙем рәүештә фронтҡа ебәрелә башлай.

Әлбиттә, Башҡортостандан кешеләр ошо бер нисә полкта ғына хеҙмәт иткән тип уйларға ярамай. Һуғыш башланған осорҙа уҡ Башҡортостандан регуляр ғәскәрҙәрҙә хеҙмәт итеүселәр күп була. Был турала архив материалдарында, тарихи сығанаҡтарҙа күп мәғлүмәт табырға була. Шулай уҡ бөгөн сәйер күренгән, ләкин ул ваҡытта аңлашыл булған күренештәр ҙә була. Францияның ҡоралы күп була, шул уҡ ваҡытта кешеләре етешмәй. Рәсәйгә иһә ҡорал кәрәк була. Һөҙөмтәлә ил етәкселеге ҡорал урынына һалдаттар бирә. Махсус бригадалар Архангельск аша Францияға ебәрелә. Златоуста беҙҙең яҡ кешеләренән 4-се һәм 5-се бригадалар төҙөлә. Улар Грецияла булған яуҙарҙа ҡатнаша. Бик күптәр француз миҙалдары менән наградалана.

### Ғәскәрҙәрҙе тулыландырыу

Рәсәйҙең хәрби законы 1774 йылдан алып үҙгәрмәгән була. Хәрби хеҙмәткә 18-19 йәштән алалар. Төҙә хәрби хеҙмәт ваҡыты 7 йыл булһа, һуңынан бер аҙ ҡыҫҡартыла. Ләкин кеше күп булыу арҡаһында әрмегә бөтәһен дә алмайҙар. Бер ауылдан 40 ирегет килә икән, йәрәбә тартыпмы, башҡа төрләсәме, уларҙан ун кешене һайлап, әрмегә алалар ҙа, ҡалғандарын ауылдарына ҡайтарып ебәрәләр. Икенсе йыл был кешеләр тағы килә, уларға тағы йәше еткән егеттәр ҡушыла. Тағы ла бөтәһенә лә урын етмәй. Һөҙөмтәлә һуғыш башланғанда ҡулдарына ҡорал тотмаған, уның менән эш итә белмәгән кешеләр бик күп була. Һуғыш башлангас, фронтҡа тәүгеләрҙән булып элек әрме сафтарында хеҙмәт итеүсе кешеләрҙе алалар. Йәнәһе, уларҙы өйрәтергә кәрәкмәй, бөтәһен дә беләләр, онотҡандарҙы иҫкә төшөрөү ҡыйын булмаясаҡ, тип һанай хәрби етәкселек. Ләкин был резервтар тиҙ арала бөтә.

Бында йәнә бер проблема килеп тыуа. Фронтҡа алынған ҡайһы бер ирҙәр 40 йәштә тултырған була. Ә уларҙың хужалыҡтары, ғаиләләре бар. Уларҙа: "Урам тулы эшһеҙ йәш егеттәр йөрөгәндә, ни өсөн мин һуғышырға тейешмен?" тигән хаҡлы ризаһыҙлыҡ тыуа. Ысынлап та, ғаиләләре лә, хужалыҡтары ла булмаған йәш егеттәр өйҙә тороп ҡалғанда, инде тормош ҡорған ир-егеттәрҙең һуғыш яланында ятып үлгеһе килмәүен аңларға була.

Хеҙмәт итмәгән кешеләрҙе лә тиҙ арала һуғышҡа әҙерләү зарурлығы тыуа. Яңы һалдаттарҙы өйрәтеү буйынса махсус запас частар ойоштороло. Уларҙа уҡытыу тәүҙә алты ай, һуңынан өс ай алып барыла. Запас частарҙы үткән һалдаттар фронтҡа ебәрелә. Әммә бында ла проблемалар килеп сыға. Бер кемдең дә һуғышҡа барғыһы килмәй. Кешеләр фронтҡа эләкмәү өсөн төрлө саралар эҙләй. Ләкин һуғыштың дауамлы булыуы арҡаһында ул үҙенә бер-бер артлы янынан-яны резервтарҙы йәлеп итеп тора. 1917 йылға кеше резервтары ла бөткән була. Хатта ҡорал тоторға ярамаған миноциттар сектаһы вәкилдәрен дә фронтҡа йәлеп итә башлайҙар, зәғифлектәре ныҡ көслө булмағандар ҙа яу ҡырына эләгә.

### Прапорщиктар курстары

Армия һуғыш башында уҡ офицер кадрҙарының күп өлөшөн юғалта. Был бушлыҡты тултырыр өсөн прапорщиктар мәктәптәре ойоштороло (прапорщик ул ваҡытта офицер званиеһы була). Ырымбурҙа, Ҡаҙанда, Мәскәүҙә ошондай курстар асыла. Тәүҙә уҡытыу ярты йыл алып барыла, һуңынан өс айға тиклем ҡыҫҡартыла. Был курстарҙа ниндәйҙер тәрән теоретик белем бирелеп өлгөрмәй, шуға күрә прапорщиктар белемде яу ҡырында ала.

Кемдәрҙе прапорщиктар итеп алалар һуң? Офицер званиеһы булғанға күрә, рус телендә һөйләшкән, уҡыйяҙа белгән кешеләр кәрәк була. Кем был талаптарға яуап бирә? Әлбиттә, уҡытыусылар. Шулай итеп, ябай ауыл уҡытыусылары офицерҙар булып китә, ә прапорщик булыу дворян сословиеһына инеү тигәнде аңлата. Дворяндар ергә дәғүә итә ала, юғары ҡатлам кешеләре генә сағылырлыған йыйылыштарҙа, императорт алдында смотрҙарҙа ҡатнаша. Уларға "Һеҙҙең ғәли йәнәптәре", тип өндәшәләр. Дәүләт наградаларына, күп ташламаларға эйә булалар. Был прапорщиктар Беренсе донъя һуғышында шәп үрләйҙәр. Әгәр үҙҙәренән юғарыраҡ вазифаны алып торған офицер үлә икән, улар ошо урынға ҡуйылалар. Һөҙөмтәлә, ҡайһы берәүҙәре һуғыш аҙағына полковник званиеһына барып етә.

Иң ҡыҙығы шунда, тап ошо прапорщиктар, Граждандар һуғышы ваҡытында аҡтарҙың, йәки аҡ офицерҙарҙың төп көсө була. Ленин дворянлыҡ бөтөрөлә тип иғлан иткәс, улар большевиктарҙың сәйәсәтенә ҡаршы сыға. "Нисек инде, беҙ үҙ ҡаныбыҙ менән был дәрәжәне яуланыҡ, яраландыҡ, ҡан түктек, дуҫтарыбыҙ үлде, хәҙер һеҙ быны бөтөрөргә теләйһегеҙ", тип ризаһыҙлыҡ белдерә улар. Әйтергә кәрәк, вәлидовсылар сафында ла бик күп ошондай прапорщиктар була. Һуңынан улар биографияларының ошо өлөшөн йәшертергә тырыша, сөнки 30-сы йылдарҙа дворяндар репрессияға эләгә һәм атыу аша яҙалана.

### Әсирҙәр

Һуғыш барышында һалдаттар күпләп әсирлеккә эләгә. Германия Рәсәй халҡының төрлө милләттәрҙән, дин вәкилдәренән торғанын яҡшы аңлай. Ошо төрлөлөктө үҙ мәнфәғәттәрендә ҡулланырға тырыша. Шул маҡсатта мосолман халыҡтары өсөн айырым лагерҙар төҙөй. Был лагерҙарҙа мосолмандарға ғибәҙәт ҡылыу өсөн ҡаршылыҡтар булмай, мәсеттәр төҙөлә, дини белем биреү рөхсәт ителә. Мосолмандарҙың дини байрамдарында немец генералдары, хатта Германияның юғары вазифалы кешеләре лә ҡатнаша. Рәсәйҙә лә әсирҙәргә ҡарата ҡараш насар булмай. Халыҡ-ара Ҡыҙыл Тәре ойошмаһы эшләй. Хөкүмәт ҡаршы булыуына ҡарамаҫтан, төрөк әсирҙәренә урындағы мосолман халҡы ярҙам итеп тора.

Беҙ архив материалдарына таянып әҙерләгән йыйынтыҡта яҡташыбыҙ Сәләймән Нағаевтың мемуарҙарынан өҙөктәр килтерҙек. Бик ҡыҙыҡлы яҙмышлы кеше ул. Ул фронтта мулла булараҡ хеҙмәт итә. Әсирлеккә төшә, немец лагерҙарын үтә. Унан Госман империяһына ебәрелә, ошо империя составында Месопотамияла инглиздарға ҡаршы һуғыша. Шунан әсирлеккә эләгә. Һиндостандағы, Цейлондағы әсирҙәр лагерына ебәрелә. Унда 1920 йылға тиклем була. Унан Ҡырымға ҡайта. Был ваҡытта Ҡырымда Врангель ғәскәрҙәре була. Ләкин йәше оло булғанға күрә, ул һуғышҡа алынмай. Шулай итеп, оҙаҡ йылдар, алыҫ аралар үткәндән һуң ул тыуған Уралына ҡайта һәм һуңынан ошо ғүмере хаҡында мемуар яҙа. Был иҫтәлектәрҙән һуғыштың айырым кеше һәм бар халыҡ яҙмышына ниндәй йогонто яһауын асыҡ күрергә була.

Шулай уҡ Башҡортостанға ҡасаҡтар күп килә. 1915 йылда, Бөйөк сигенеү башлангас, Германия ғәскәрҙәре тарафынан баҫып алынған ерҙәрҙән латыштар, йәһүдтәр, белорустар күпләп күсерелә. Ҡасаҡтарҙы ҡабул итеү эше яҡшы ойоштороло, тиҙ арала бик күп кеше урынлаштырыла, уларға ярҙам күрһәтелә.

**Азамат ӘБУТАЛИПОВ яҙып алды.**

**(Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Ғаилә көнкүреше һәм халыҡ байрамдары

Икенсе яҡтан, ҡатын-ҡыҙ үҙенең әфәндеһе тип һаналған ирҙән түбәнерәк тип һаналған. Туй йолалары араһында йәш кәләштең ире менән беренсе осрашыуҙа буйһоноу билдәһе итеп уның итеген систереү йолаһын да күрҙек. Әгәр ғаилә ағзалары араһында ҡатын-ҡыҙ улар менән бергә ултырып ашаһа, сит ир-ат булғанда, әгәр ул яҡын туғаны булмаһа, ҡатын-ҡыҙ ашамлыҡтар ултырта, әммә үҙе табын янына ултырмай.

Барлыҡ йорт эше гүзәл зат иңендә ята: ул ашарға бешерә, бала ҡарай, һыйыр һәм бейәләр һауа, ҡышҡылыҡҡа ризыҡ әҙерләй, өҫ һәм аяҡ кейеме тегә, киндер һәм буҫтау һуға, кейеҙ баҫа һ.б. Ураҡ ваҡытында ул иген ура, ҡайһы бер урындарҙа бесәнен дә саба, ҡул тирмәнендә онон да тарта, баҡсала ла эшләй һ.б. Күрем ваҡытында ғына ул аш-һыу әҙерләүҙән ситләшә, был осраҡта ир-ат үҙенең ҡатын-ҡыҙ туғанын саҡыра.

Ир-ат бурысы булып өйөр артынан ҡарау, уларҙы йәйләү урынына ҡыуыу, урман кәсебе, һунарсылыҡ һәм ҡортсолоҡ тора. Игенселек үҫешкән урындарҙа башҡорт үҙе ер һөргән, тырматҡан, үҙе уҡ сәскән һәм урған, ҡатыны менән бергә элгәргән.

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары башҡа мосолман халыҡтарының ҡатын-ҡыҙҙарына ҡарағанда сағыштырмаса ireклерәк булған. Көнсығыш Урал арьяғы ҡатын-ҡыҙы, ҡайныһынан башҡа ир-ат алдында йөҙөн ҡапламаған. Быны таулы яҡтарҙағы башҡорт ҡатын-ҡыҙы хаҡында ла әйтергә мөмкин. Көнбайыш ҡатын-ҡыҙы иһә был йәһәттән күрше татар ҡатын-ҡыҙҙарынан әллә ни айырылмаған. Оло йәштәге ҡатындар һәм 11-12 йәшлек ҡыҙҙар бөтөнләй йөҙҙәрен ҡапламай. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ирҙәр менән бер рәттән ҡайһы бер халыҡ байрамдарында ҡатнаша, ә ҡайһы бер урындарҙа (төньяҡ-көнбайышта) XX быуат башында егеттәр менән ҡыҙҙарҙың дөйөм уйындары һәм күңел асыуҙары күҙәтелә.

Башҡорттарҙа айырылышыу бик еңел башҡарыла һәм шуға күрә ул йыш күҙәтелә. Талаҡ сәбәбе ҡатынының тыңламауы ла, донъя көтөргә һәләте булмауы ла, тоғролоҡ һаҡламауы һ.б. булыуы мөмкин. Ҡатын-ҡыҙ ирен, әгәр ул уның менән ҡаты мөғәмәлә булып, ҡул күтәрһә йәки асыҡтан-асыҡ хыянат итһә, ташлап китә ала. Ҡатынын айырырға теләп, ир мулла һәм ҡарттар алдында талаҡ әйтһә, уларҙы яраштырырға тырышҡандар, әгәр ҙә был мөмкин булмағанда, ҡатыны иренән китә, әммә икенсе кешегә кейәүгә сыға алмай. Күпмелер ваҡыттан һуң улар, ярашып, ҡабаттан бергә йәшәй ала. Әгәр ир мулла һәм ҡарттар алдында өс тапҡыр талаҡ әйтһә, был инде тулыһынса айырылышыуҙы аңлата; мулла айырылышыу тураһында кенәгәгә теркәй, ир кеше ҡатынына айырылышыу ҡағыҙын - холоғ бирә. Ошо ҡағыҙ менән ул үҙе теләгән кешегә кейәүгә сыға ала, әммә ире менән ярашҡан хәлдә лә, улар ҡабат бергә була алмай. Әгәр ҡатын-ҡыҙ икенсе кешегә кейәүгә сығып, уныһы үлгән йәки айырылышҡан осраҡта ғына ул үҙенең тәүге ире менән ҡабат ҡауышыу хоҡуғына эйә.

***✓ Бөрйән районында гер спорты буйынса донъя чемпионы Хәлитова Сәмәрә Әхәт ҡыҙы йәшәй. Мин уның фотоһын күреп ҡалдым да уның тураһында төрлө сығанаҡтарҙан эҙләп алып, мәкәләне "Википедия"ға "ултыртып" та ҡуйҙым.***



**Хәҙер интернет донъяһына йәштәр, балалар ғына түгел, ә оло йәштәгеләр ҙә бик әүҙем ылығып китте. Ә шулай ҙа башҡорт кешеһе интернет донъяһында ниндәй мәғлүмәт тирәләй тупланырға тейеш? "Википедия" сайты уға ниндәй офоҡтар аса? Интернеттағы тау-тау мәғлүмәт араһынан үҙеңә кәрәклеһен ҡайҙан, нисек табырға? Интернетта кемгә ышанырға ярамай? Башҡорт телендәге "Википедия" сайты мөхәррире Рөстәм НУРЫЕВ менән яҙыусы, күренекле йәмәғәт эшмәкәре Гүзәл СИТДИҠОВА ошо һәм бүтән темалар буйынса фекер алыша.**

# ИНТЕРНЕТТЫ
## гөл-баҡсаға әйләндереү

**▸ "Википедия"ға һеҙ нисек ылығып киттегеҙ? Һеҙҙенсә, энтузиазм нимә ул?**

**Гүзәл Ситдиҡова:** Энтузиазм төшөнсәһенә Лада Вульфтың "Истинное счастье - минуты энтузиазма" тигән һүҙҙәре бер ни тиклем аңлатма бирә, минеңсә. Башҡорт "Википедия"-һына нисегерәк аяҡ баҫыуыма килгәндә, урыҫ телендәге "Википедия"ны электән файҙаландым, тик ул саҡта башҡортсаһы барлығын ғына белмәгәнмен. Көндәрҙән бер көндө башҡорт телен үҙаллы өйрәнгән Вячеслав Чернев исемле егет интернет аша минең менән бәйләнешкә сығып, әлеге сайтҡа нисек теркәлергә, нисек мәкәлә урынлаштырырға кәрәклеген ентекләп өйрәтте. Башлаған саҡта сабыр, түҙемле, егәрле юл күрһәтеүсең булыуы кәрәк шул. Эстәлеге менән таныша-таныша, сайттың минең күңел талаптарыма тулыһынса тап килеүен аңланым. Шулай итеп, хаҡлы ялымда сайтҡа яҙышыу ҙур бер күңел хеҙмәтемә әйләнде.

Сайт мине тағы нимәһе менән ылыҡтырҙы? Беренсенән, журналистикаға, икенсенән, фәнгә бәйле булыуы менән. Эш шунда: мин һүҙлектәр, энциклопедиялар менән эшләргә яратам. "Бәйләнештә"ге битемдә лә: "Сәскә урынына миңә ун тәңкәлек кенә булһа ла энциклопедиялар, һүҙлектәр, белешмәләр бүләк итһендәр", - тип яҙып ҡуйғанмын. Ә интернетҡа инеүемдең төп сәбәбе - нисек кенә яңғырауыҡлы булып тойолмаһын, ихластан әйтәм - халҡымды яратыуым, уға файҙа килтерергә тырышыуымдыр, күрәһең...

"Википедия"ла һәр телдә мотлаҡ булырға тейешле мәкәләләр исемлеге бар. Мин башта шул мәкәләләрҙе яҙырға тотондом. Тотондом да, телебеҙҙең һоҡланғыс бай икәнлегенә тағы бер тапҡыр инандым. Ни тиклем генә ҡатмарлы темалар, йүнәлештәр, тарихи ваҡиғалар булмаһын - һәр береһен башҡорт телендә матур, аныҡ итеп һүрәтләрлек төшөнсәләребеҙ бар икән. Шул уҡ ваҡытта мәғлүмәттәр өҫтөндә эшләгәндә бик күп һүҙлектәр ҡулланырға тура килде. Башҡорт телендә һүҙлектәрҙән тыш, ҡайһы бер төшөнсәләрҙе төрки телдәр һүҙлектәренән дә, немец һүҙлектәренән дә дөрөҫләнем. Немецтар шул хәтлем теүәл халыҡ - улар инглиз телендәге төшөнсәләрҙе (мәҫәлән, бөгөнгө компьютер төшөнсәләрен), фән буйынса төшөнсәләрҙе инглиз теленән туранан-тура тәржемә итмәй, ә үҙ теленән ала. Уларҙың тәржемә алымын ҙур кинәнес менән үҙебеҙҙең телдә файҙаландым. Мәкәләләрҙе төндәр буйына, таңға хәтлем тәржемә иткән саҡтарым да булды. Бер заман ҡарап ебәрһәм, минең биттә "Википедия"ның миҙалы тора...

**Рөстәм Нурыев:** Эйе, "Википедия"сылар аҡса өсөн эшләмәй - эскерһеҙ эшләй. Эшеңде күреп, ниндәйҙер баһа ишетһәң, әлбиттә, күңел күтәрелеп китә. Рәсәйҙә "Википедия" проекттарын ҡурсалаусы "ВикимедиаРУ" тигән йәмәғәт ойошмаһы бар. Ойошма 2011 йылда төрлө йүнәлештәге, төрлө номинациялағы премиялар булдырған. Быйыл ул премияларҙы Рәсәй халыҡтары телдәрендәге проекттар араһында ла булдырырға ҡарар ителгән. "Википедия"ларҙың эшмәкәрлеген тикшереп ҡарап (ә унда һәр гәмәл яҙылып бара, иҫәптә тора), 2013 йылғы эшмәкәрлек буйынса иң әүҙем татар, чечен, башҡорт һәм саха телдәрендәге "Википедия"ларҙы һайлағандар. Башҡорт бүлегендә иң әүҙем мөхәррир-ҡатнашыусы мин булып сыҡтым. Был бүләк минең генә түгел, ә Башҡорт Википедияһын төҙөүҙә ҡатнашҡан барлыҡ ирекмәндәрҙең бүләге итеп ҡарарға кәрәк.

"Энтузиазм нимә ул?" тигән һорауығыҙға килгәндә... Бөгөн иртән әсәйгә Мәскәүҙән ҙур-ҙур бурыстар йөкмәп ҡайтыуым тураһында әйткәйнем, ул: "Эй, улым, атайың да хыялый булды, һин дә шундай хыялыйһың", - тине. Энтузиаст кеше шул уҡ хыялый түгелме икән?..

Мин "Википедия"ға 2005 йылда тап булдым: тәүҙә төрлө мәғлүмәттәр алыу өсөн инһәм, бер аҙҙан ҡайһы бер мәкәләләрҙәге хаталарҙы күреп, төҙәткеләй башланым. Бер йыл шулай нимәлер яҙҙым, нимәлер төҙәттем. Бер саҡ сайттың күп кенә телдәрҙәге варианттары барлығын күреп ҡалдым. Башҡа ҡылт итеп: "Ә башҡорт телендәгеһе юҡмы икән ни?" - тигән уй килде. Күрәм, башланғыс хәлдә генә булһа ла ундай сайт бар икән. Етмәһә, ярты тиҫтәгә яҡын мәкәлә яҙып һалынған. "Башҡортостан" тип исемләнгән тәүге мәкәлә 2005 йылдың 16 апрелендә яҙылған. Шунан сайт менән ныҡлап таныша башланым. Башҡортса сайтҡа яҙышыусылар һирәк икәнен шәйләгәс,"Башҡорттар, башҡортса "Википедия" бар бит!" тип, интернетта оран һалдым. Оранымды ишетеп, эләктереп алыусылар булды. Көн дә яҙышыуымды күреп, 2006 йылдың ғинуар айында донъя кимәлендәге администраторҙар (уларҙы стюарттар тип тә атайҙар), минән һорап та тормайынса, миңә "хаким", "бей" дәрәжәләрен йөкмәтеп тә ҡуйҙылар ("бей" - сайтта иң оло вазифа).



**▸ Башҡорт "Википедия" һы сайтының бөгөнгө йөҙөн, тимәк, һеҙҙең һымаҡ эшлекле, аҡыллы, зирәк ағайҙар, апайҙар барлыҡҡа килтергән. Башҡортса сайттың һуңғы йылдарҙағы эшмәкәрлеге тураһында ла һөйләп үтмәҫһегеҙме?**

**Рөстәм Нурыев:** 2012 йылда Ҡаҙағстанда үткән Төрки телле "Википедия"сылар конференцияһында ҡатнаштыҡ. Сара нимәһе менән әһәмиәтле булды? Егеттәребеҙ ҡорҙан бик шәп белем алып ҡайтты. Артабан башҡортса "Википедия"ға башланғыс материалдарҙы "Бот", йәғни компьютер программаһы ярҙамында тултырыу сараһы барлыҡҡа килде. Ҡаҙаҡ, урыҫ, немец "Википедия"-сылары беҙгә был гилемде үҙләштерергә ярҙам иткәс, Башҡортостан ауылдары тураһында 4 мең ярым башланғыс мәкәлә яҙылды. "Бот" менән яҙыуҙың өҫтөнлөктәре лә, етешһеҙлектәре лә бар. Өҫтөнлөгө : мәкәләләрҙә йыш ҡабатланған һүҙҙәрҙән, һөйләмдәрҙән ҡалып төҙөү мөмкинлеге. Әйтәйек, ауылдар тураһында ниндәйҙер бер һөйләм һәр мәкәләлә осрауы ихтимал. "Бот" ярҙамында яҙған саҡта ауылдың ниндәй районға, ҡайһы ауыл биләмәһенә ҡарауын яҙыу өсөн махсус графаға атамаларҙы ғына индерәләр ҙә, үҙгәрә торған мәғлүмәтте таблицаға ҡуялар. Робот таблицанан үҙгәрә торған мәғлүмәттәрҙе файҙаланып, баш ҡуйып, яңы мәкәлә төҙөп тә ҡуя. Етешһеҙлеге: улар ауыл-ҡалалар тураһында тик башланғыс мәғлүмәт кенә бирә.

2013 йылдың февралендә, мәкәләләребеҙ һаны 30 меңгә еткәс, "бот" менән яҙыуҙы ваҡытлыса туҡтатып торҙоҡ. Йыл ярым дауамында хәҙер ҡул менән 3 меңгә яҡын мәкәлә яҙылды. Әлеге ваҡытта башҡортса "Википедия"ла 33 меңдән ашыу мәкәлә бар. "Бот" менән яҙыуҙы ниңә туҡтатып торҙоҡ? Сөнки, ундай мәкәләләрҙе тулыландырыу талап ителә. Башланғыс мәкәләләр күп булыу менән генә эш бөтмәй бит. Улай булһа, "Википедия"ның ҡыҙығы ла ҡалмай. Хәҙер сифат өҫтөндә эшләйбеҙ. Ошо башланғыс кимәлдәге мәкәләләрҙе тулыландырыу, уларҙы йырып сығыу өсөн әүҙем яҙыусылар етмәй. Аҙ һанлыбыҙ. "Күп күтәрһәң, биртенәһең", тип тә әйтәләр.

**Гүзәл Ситдиҡова:** Беҙ былтыр ҡыш бер сайтта Силәбе өлкәһендәге башҡорт атамалары буйынса бик ныҡ бәхәсләшеп тә алғайныҡ. Мәҫәлән, "Аша"-мы, әллә "Әшә"ме? "Сыбаркүл", "Эткүл" атамаларының дөрөҫ яҙылышы нисек? Дөрөҫ яуапты урындағы халыҡ ҡына белә - улар легендаларҙан сығып, ер-һыу, ауыл-ҡалалар атамаларын дөрөҫ кенә итеп әйтә, дөрөҫ булмаған осраҡта, төҙәтә ала. Шуға күрә Башҡортостандан ситтә йәшәгән милләттәштәрҙең дә ҡатнашлығы бик кәрәк.

Мәкәлә эшләй башлағанда китапханамдағы бөтөн булған энциклопедияларҙы, һүҙлектәрҙе ҡарап сығам. Беренсенән, һүҙҙең башҡортса дөрөҫ яҙылышын, икенсенән, мәғлүмәттең дөрөҫ булыуын тикшерәм. 25 томлыҡ Совет энциклопедияһы миндә тулы килеш бар. Ана шул энциклопедия, әйткәндәй, бик сифатлы итеп сығарылған - унда бер генә дөрөҫ булмаған мәғлүмәт тә юҡ. Унда талаптар шул тиклем көслө. Шуға күрә, мин "Википедия"нан алда шул энциклопедияға күҙ һалам. Интернетта төрки телдәр һүҙлектәре булыу ҙа бик ярҙам итә. "Википедия"ға инеп киткәс, мин үҙемдең интернетта ултырыуымдың мәғәнәһен таба башланым.

**▸ Ысынлап та, үҙен зыялы тип иҫәпләгән кеше интернетта ябай ҡулланыусы кимәлендә генә ултырырға тейеш түгелдер ул. Интернетта әүҙем яҙышыусы шәхестәребеҙ тағы ла бармы? Ундайҙарҙан кемдәрҙе айырып атар инегеҙ?**

**Рөстәм Нурыев:** Бар, әлбиттә, беҙҙең башҡорт интернеты киңәйгәндән-киңәйә бара. Мин 90-сы йылдарҙан алып интернетта ултырам. Ул йылдар менән бөгөнгөнө сағыштырғанда, айырма бик ҙур. Ошо көндәрҙә Мәскәүгә конференцияға барғанда ике көн Илдар Кинйәбулатов менән аралаштым. Ул егеттең стратегик кимәлдә уйлау, фекерләү ҡеүәһе бик көслө. Уның фекерҙәрен тыңлап, үҙем дә ғорурланып ҡуйҙым. Һәр бер зыялыны телгә алып бөтөп булмай, әлбиттә. Башҡорт телен интернет аша өйрәнеп ултырған егеттәр барлығын беләм. Ундайҙар Силәбе өлкәһендә айырыуса күп.

**Гүзәл Ситдиҡова:** Әле беҙҙең яҙыусылар ҙа үҙҙәренең әҫәрҙәрен Викикитапханаға ҡуя башланы. Яҙыусыларыбыҙ был эште артабан дауам итһә, һәйбәт булыр ине. Сөнки сит яҡтарҙа йәшәгән милләттәштәр башҡорт телендә китап уҡый алмауҙарына зарлана.

Йәнә, мәкәләләрҙең күп төрлө тематикалы булыуын иҫәпкә алып, үҙебеҙҙең шәхестәребеҙ тураһында мәғлүмәтте лә тулыландыра барырға кәрәк. Мин теге айҙа бер-нисә билдәле милләттәшебеҙҙең биографияһы яҙылған мәкәләне тулыландырҙым, яңыларын яҙҙым. Мәҫәлән, беҙҙең Бөрйән районында тыуған гер спорты буйынса донъя чемпионы Хәлитова Сәмәрә Әхәт ҡыҙы йәшәй. Мин уның фотоһын осраҡлы рәүештә "Бәйләнештә" сайтында күреп ҡалдым да уның тураһында төрлө сығанаҡтарҙан эҙләп алып, мәкәләне "Википедия"ға "ултыртып" та ҡуйҙым.

Ошо йәһәттән мин "Википедия", интернет бар икән, башҡорт теле йәшәйәсәк, тигән инаныстамын. Башҡорт теле интернетҡа ингән икән -ул тарала бара. Бөтә социаль селтәрҙәрҙә лә башҡортса яҙырға тыры-

***"Башҡортостан" тип исемләнгән тәүге мәкәлә 2005 йылдың 16 апрелендә яҙылған. Шунан сайт менән ныҡлап таныша башланым. Башҡортса сайтҡа яҙышыусылар һирәк икәнен шәйләгәс,"Башҡорттар, башҡортса "Википедия" бар бит!" тип, интернетта оран һалдым. Оранымды ишетеп, эләктереп алыусылар булды. Көн дә яҙышыуымды күреп, 2006 йылдың ғинуар айында донъя кимәлендәге администраторҙар (уларҙы стюарттар тип тә атайҙар), минән һорап та тормайынса, миңә "хаким", "бей" дәрәжәләрен йөкмәтеп тә ҡуйҙылар ("бей" - сайтта иң оло вазифа).***

✓ *Минән бер танышым: "Һин интернетта ни эшләйһең? Унда сүплек бит", - тип һораны. Мин уға: "Кем нимә эҙләй - шуны таба инде. Мин үҙем унда гөл-баҡса үҫтереү менән булам", - тинем.*

# СҮП ОЯҺЫНАН...

## беҙҙән дә тора

шам. Ҡайһы берҙә юйып ташлайҙар, ҡайһы берҙә - тороп та ҡала. Сәнскеле һүҙҙәр булһа ла иғтибар итмәй, үҙебеҙҙең телдә яҙам да яҙам. Йыш ҡына ҡаҙаҡ ресурстарына инәм. Ҡаҙаҡтарға ла башҡортса яҙып ҡуям. Бөгөн генә "Бәйләнештә" сайтында бер мәҡәлә ултыртып ҡуйҙым. Мәҡәлә илле йәшенә тиклем ҡаҙаҡса һөйләшә белмәгән, ир уртаһына еткәс, туған телен өйрәнә башлаған бер ир тураһында. Үҙенең ысулы тураһында бер китап баҫтырған. Хәҙер, баҡһаң, Ҡаҙағстандағы урыҫтар уның китабын бик теләп һатып ала икән. Ул нимә ти? "Беҙҙең ҡаҙаҡ телсе ғалимдары бергә йыйылып алалар ҙа, ҡаҙаҡ теле бөтә, маңҡорттар, һатлыҡтар, тип, әрләшеп ултыралар ҙа таралышалар. Ә урыҫ телле ҡаҙаҡ уларҙың һүҙен ишетмәй ҙә, күрмәй ҙә. Беҙ ана шул ҡаҙаҡтар өсөн эшләргә тейешбеҙ", - ти. Уның тураһындағы мәҡәләне мин ни өсөн үҙемдең сәхифәмә ултыртып ҡуйҙым һуң? Сөнки уның әйткәндәре беҙгә лә ауаздаш. Беҙҙең зыялыларыбыҙҙа ла бар бындай етешһеҙлек. Ә бит беҙгә урыҫ телле башҡорт араһында күберәк эшләргә кәрәк. Был йәһәттән "Википедия" нимәһе менән отошло? Уның руссаһы ла бар, шул уҡ теманы башҡорт телендә лә уҡып була.

**▸ Гугл-маркетта бер программаға тап булдым - ул программа ярҙамында микрофонға һөйләйһең, һөйләгәнең текстҡа әйләнә бара. Руссаһы ярайһы уҡ камил, тип әйтергә була. Әммә башҡортсаһы юҡ. Әгәр башҡорт телендәге тәржемә китабы базаһы төҙөлөп бөтһә, ошондай программаларҙа башҡорт телендә һөйләп, тел ярҙамында ғына текст яҙҙырыу технологияһы барлыҡҡа киләсәк, тип ышанып буламы?**

**Рөстәм Нурыев:** Әлбиттә. Һөйләгәнде яҙыу тексына әйләндереү мөмкинлеге лә, синхрон тәржемәләр ҙә бар хәҙер. Әммә бындай технологияға инеп китеү өсөн беҙгә параллель текстар, һүҙлектәр төҙөргә кәрәк. Ә быны бер кеше генә атҡарып сыға алмай. Бында күмәк халыҡ, өмә менән эшләү кәрәк. Донъя кимәлендә ул "краудсорсинг" ысулы тип атала.

**Гүзәл Ситдиҡова:** Быны ҙурҙан ҡубып эшләү мотлаҡ та түгел, уны беҙҙең башҡорт теле уҡытыусылары ла, журналистар ҙа атҡара ала. Беҙҙең "Википедия"ға кереп, берәй шәхес тураһында бер генә һөйләм өҫтәп ҡуйылһа ла файҙа. Шуға күрә, милләтте бергә туплау, рухыбыҙҙы һаҡлау, телебеҙҙе пропагандалау йәһәтенән дә был сайтты дөйөм өмә урыны, тип әйтергә була.

**▸ "Википедия"ны йәмәғәтселек фекере иләге, тип атаһаҡ, моғайын да, хата булмаҫтыр. "Википедия" форматында милли идея булырҙай идеялар барлыҡҡа килә ала тип әйтеп буламы?**

**Гүзәл Ситдиҡова:** Ғөмүмән, башҡортса "Википедия"ла мәҡәләләр бик уйлап һалына, хакимдарыбыҙ ҙа уларҙы бик ентекләп ҡарап, тикшереп баралар. Һәр береһе ниндәйҙер матур бер мәғлүмәт бирә, ниндәйҙер әһәмиәткә эйә. Әлбиттә, унда сәйәси уйындар менән мауығыу юҡ. Минең уйымса, башҡортса "Википедия" сәйәсәт менән мауығыу урыны булырға ла тейеш түгел. Беҙгә әле башҡорт "Википедия"һының нигеҙен булдырырға кәрәк. Донъя мәҙәниәте, фән ҡаҙаныштары, ғөмүмән, цивилизация ҡаҙаныштары менән таныштырыу менән бер рәттән, беҙ үҙебеҙҙең республикабыҙҙы, тарихыбыҙҙы, шәхестәрбеҙҙе, рухи ҡомартҡыларыбыҙҙы, төрлө өлкәлә ҡаҙаныштарыбыҙҙы, ифрат бай телебеҙҙе лә күрһәтергә, күтәрмәләргә тейешбеҙ. Бына ошо үҙе милли идеялыр.

**Рөстәм Нурыев:** "Википедия", уның туғандаш проекттары менән шөғөлләнеүселәрҙең төп тәғлимәте, идеологияһы - асыҡ, ирекле ҡулланыуҙа булған ғилем сығанаҡтарын төҙөү. Ул сығанаҡтар донъялағы һәр бер кешегә үҙенең туған телендә асыҡ булырға тейеш. Ә "Википедия" төҙөүселәрҙең бер-береһенә мөнәсәбәтенә килгәндә, улар бөтөн сетерекле мәсьәләләрҙе, күренеште асыҡ рәүештә уртаға һалып тикшереп, уртаҡ фекергә килергә тырышалар. Шул яҡтан минең үҙемде "Википедия" ныҡ йәлеп итә. Унда һәр бер фекергә иғтибар ителә. Һин нимә менәндер риза булмаҫҡа ла мөмкинһең, әммә уртаҡ ҡараш менән иҫәпләшеп эш итәһең.

**Гүзәл Ситдиҡова:** Алтын урталыҡты таба белеү кәрәк.

**▸ Әммә ҡайһы саҡта Интернетта ул алтын урталыҡты тойоуы ла ауыр. Ул саҡта бәхәсте туҡтатып ҡуйыу хәйерлерәкме? Әллә үҙ фекереңдә, инанғаныңды дәлилләргә тырышыу хәйерлерәкме?**

**Гүзәл Ситдиҡова:** Бәхәсләшергә лә тура килә шул, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Әгәр бындай һөйләшеүҙәргә ҡул һелтәп кенә ҡараһаң, бөгөн бәхәс предметы булған хәл-күренеш тураһында дөрөҫлөккә тап килмәгән фекер таралыуы ла ихтимал.

**Рөстәм Нурыев:** Әлбиттә, бәхәстән ҡасырға ярамай. Әле Голливуд артисы Рәүил Иҫәнов тураһында бәхәс бара. "Бәйләнештә"ге "Исторический фильм" төркөмө уны милләте буйынса башҡорт тип күрһәткән, ә "Википедия"лағы мәҡәләлә уны башҡорттар - башҡорт, татарҙар - татар, тип төҙәтә. "Һуғыш" инде күптән бара. Мин "Википедия"ға ингәндә уның милләтен "башҡорт" тип яҙып ҡуйғайнылар. Шул мәғлүмәт тапҡырына "Ниндәй сығанаҡ быны дәлилләй?" тигән һорау яҙып ҡалдырҙым. "Исторический фильм" төркөмөндә: "Һәр һуғыш солох менән тамамлана. Әммә һәр һуғыштың һөҙөмтәһе - ҡорбандар. Ваҡытығыҙҙы ҡорбан итеп булһа ла, сығанаҡты табығыҙ", - тигән яҙыу ҡалдырҙым. Иң абруйлы сығанаҡ ул - кешенең үҙенең әйткән һүҙе. Әйтәйек, Фәдис Ғәниевкә "Ҡурай" телеканалындағы интервьюһында: "Һеҙ кем?" - тигән һорау бирҙеләр. Ул: "Милләтем - мишәр, телем - татар, рухым - башҡорт", - тип яуап бирҙе. Ошондай дәғүәһеҙ сығанағы булмай тороп, "Википедия"сылар ундай бәхәскә ташланырға тейеш түгел. Башҡорттарҙың да бәхәсләшеү ысулы шундай булһын ине.



*Ғөмүмән, башҡортса "Википедия"ла мәҡәләләр бик уйлап һалына, хакимдарыбыҙ ҙа уларҙы бик ентекләп ҡарап, тикшереп баралар. Һәр береһе ниндәйҙер матур бер мәғлүмәт бирә, ниндәйҙер әһәмиәткә эйә. Әлбиттә, унда сәйәси уйындар менән мауығыу юҡ. Минең уйымса, башҡортса "Википедия" сәйәсәт менән мауығыу урыны булырға ла тейеш түгел. Беҙгә әле башҡорт "Википедия"һының нигеҙен булдырырға кәрәк. Донъя мәҙәниәте, фән ҡаҙаныштары, ғөмүмән, цивилизация ҡаҙаныштары менән таныштырыу менән бер рәттән, беҙ үҙебеҙҙең республикабыҙҙы, тарихыбыҙҙы, шәхестәрбеҙҙе, рухи ҡомартҡыларыбыҙҙы, төрлө өлкәлә ҡаҙаныштарыбыҙҙы, ифрат бай телебеҙҙе лә күрһәтергә, күтәрмәләргә тейешбеҙ. Бына ошо үҙе милли идеялыр.*

**Гүзәл Ситдиҡова:** Баҫылған әйбергә генә ышанырға була, тиер инең, һуңғы йылдарҙа "бит йыумаған" баҫмалар ҙа күбәйҙе. Әгәр берәй алдаҡсы үҙенең дөрөҫ булмаған фекерен аҡ ҡағыҙҙа баҫтыра икән, күпмеләр ваҡыт үткәс, ул белешмәләрҙең дөрөҫлөккә тап килеү-килмәүе тураһында шикләнеүселәр ҙә ҡалмай. Мәҫәлән, ҡәрҙәштәрҙең Мәжит Ғафуриҙы "татар" тип яҙыуы бәхәстәр уятмай ҡалмай. Уның паспортында милләте "башҡорт" тип яҙылған, тимәк, төп документ менән раҫланған, бәхәскә урын да булырға тейеш түгел. Шуға, милли мәсьәләгә ҡағылышлы һорауҙар килеп тыуһа, береһен дә иғтибарһыҙ ҡалдырмаҫҡа тырышам. Зәки Вәлиди тураһында ла күпме бәхәс барҙы. Мин бәхәскә нөктә ҡуйыр өсөн интернеттағы диуарыма Вәлидиҙең ҡәбер ташы фотоһүрәтен ҡуйҙым. Унда төрөк телендә ап-асыҡ итеп "Көҙәнле башҡорт Зәки Вәлиди Туған ғаиләһе" тип яҙып ҡуйылған. Ҡәбер ташын ул үҙе эшләткән бит.

**▸ Интернетта аралашыу мәҙәниәте ниндәй кимәлдә? Интернет яңы тарала башлаған осор менән сағыштырғанда, кешеләрҙә үҙ һүҙе өсөн яуаплылыҡ тойғоһо арттымы, әллә кәменеме?**

**Гүзәл Ситдиҡова:** Интернетта мутлашыу осраҡтары күп, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Ҡайһы бер кешеләр төрлө вәғәҙәләр менән "алтын тауҙар" вәғәҙә итеп, күптәрҙе "кәкре ҡайынға терәтә".

**Рөстәм Нурыев:** Реаль донъя виртуаль донъя менән бер тигеҙ ул. Ҡәҙимге донъя ниндәй - виртуаль донъя ла шундай. Минән бер танышым: "Һин интернетта ни эшләйһең? Унда сүплек бит", - тип һораны. Мин уға: "Кем нимә эҙләй - шуны таба инде. Мин үҙем унда гөлбаҡса үҫтереү менән булам", - тинем. Шуға күрә, беҙ ҡарашыбыҙҙы киләсәккә йүнәлтәйек әле. Киләһе йыл беҙҙең башҡорт "Википедия"һының 10 йыллығы. Әлегә төп маҡсат- шул байрам айҡанлы күләмле саралар үткәреү. Интернетта шул темаға фекер алышыу. Аралашыуҙа "Википедия"сылар ғына түгел, һәр кеше ҡатнашһын, кәңәштәрен еткерһен, беҙгә ярҙам итһен ине. "Википедия" - унда яҙышыусыларҙың ғына милке түгел, ә бөтөн йәмғиәттең милке бит.

**▸ "Википедия" тураһында һүҙ сыҡҡас, кемдер: "Ә унда яҙышҡан өсөн аҡса түләйҙәрме икән?" - тип һорап ҡуйғайны...**

**Рөстәм Нурыев:** Юҡ, әлбиттә. Рухи ҡәнәғәтлек тойғоһо менән сағыштырғанда, матди сығым - сүп кенә. Шатлыҡты бит үлсәп булмай. Матди байлыҡты ла үҙең менән теге донъяға алып китеү юлы юҡ. Ә рухи байлыҡ беҙҙән һуң да ҡала...

**▸ Интернеттың зарарлы сүпсарынан нисегерәк һаҡланырға тәҡдим итер инегеҙ?**

**Гүзәл Ситдиҡова:** Беҙҙең рухи мөхитебеҙҙе емереү бара. Был мине шулай уҡ ныҡ хафаландыра. Әллә ниндәй төркөмдәр бар. Кемдер үҙ-үҙенә ҡул һалыуы тураһында мәҡәлә һалһа, психик тулҡын китә. Ә алама күренештәр кеше күңеленә, бигерәк тә йәш кеше күңеленә йоғонтоһоҙ үтмәй. Йыш ҡына быны махсус рәүештә эшләйҙәр. Шуға ата-әсәнең балаһы интернетта нимә уҡый, нимә яҙа икәнен белеүе бик мөһим.

**Рөстәм Нурыев:** Әйткәнемсә, виртуаль донъя шул уҡ фани донъя һымаҡ. Интернет менән файҙаланған балаларыбыҙ рухлы, зиһенле булып үҫһен өсөн интернетта халҡыбыҙҙың рухи байлығы булған мәғлүмәт сығанаҡтарын күрһәтергә кәрәк. Беҙҙең Урал бабабыҙ нимә тигән? "Кеше булһын затығыҙ, яҡшылыҡ булһын атығыҙ. Яманға юл ҡуймағыҙ, яҡшынан баш тартмағыҙ". Башҡорттоң милли идеяһы бына ошо һүҙҙәрҙә ята. Яманға юл ҡуймауҙың асылы - яҡшылыҡты таратыу. Ул яҡшылыҡ күберәк булырға тейеш. Ҡайҙа ғына танау төртһәң дә, ҡайҙа ғына баш борһаң да, күҙ алдында яҡшылыҡ торһон.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Башҡорт халҡы элек-электән үҙенең аҡыллы ул-ҡыҙҙары менән дан тотҡан. Мәғрифәтселәребеҙ халҡыбыҙҙы ғына түгел, күрше ҡәүемдәрҙе лә аң-белемгә яҡынайтҡан. Бөгөн дә борондан килгән мәғрифәтселек традициялары дауам итә. Ул сылбыр әле лә ныҡлы, ышаныслы. Үрҙә яңғыраған әңгәмәлә кемгәлер яҡшы таныш, кемгәлер бик үк таныш булмаған өлкә тураһында һүҙ барҙы. Беҙҙе шул ҡыуандыра: халҡыбыҙҙың, телебеҙҙең киләсәген хәстәрләп, зыялыларыбыҙ әле лә заман менән бергә атлауҙы дауам итә.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Минең ҡырға, шәйт, үҙең инеп йәп иттең. Ошонда бар монаятым, - тип һөйләнә-һөйләнә бабай шыпа тултырылған һандыҡты асты. - Күҙ терәгем - һин. Йортом да, әҙ-мәҙ аҡсаларым да һиңә тәғәйен яҙылған...***




# Ҡибла ҡайһы яҡта?

Сәғирә ШӘРӘФЕТДИНОВА

хикәйә

Ҡыбырлаған һайын шығырҙаған тубыҡ һөйәктәрен яҙырға теләп кенә эшкә тотонғайны Йәғәфәр ҡарт. Эш тигәс тә, әллә нимә ҡыйратҡаны ла юҡ, шулай ҙа ауыл ерендә уныһын һалып, быныһын һөйәһәң дә арыттыра. Эшкә ашмағанын белә-күрә, эш артынан тыпырлап йөрөүен әйтсәле. Әле лә башгүҙлек кенә тигән эше ҡояш төшкөлөккә боролғансы етә яҙҙы.

Арыуы ла үҙенекен итте булһа кәрәк: аяҡ быуындары ҡапылайымға йомшаны, ширегә ҡалған тарамыштары тартышып ҡуйҙы. Ҡартлас болдорона ҡарай тәнтерәкләне. Ыңһарлап баҫҡысына терәлде.

Ҡартайҙың, Йәғәфәр! Улай ғына ла түгел, бәлтерәнең! Ғүмер ҡояшындың йылыһы ла шөйлә һүрәнәйҙе. Ул меҫкене офоғоноң ҡай осонан байырға икән тип һандырап тора-тора ла, имиз булмағас, күҙҙән юғала. Көн дә шулай. Ә Йәғәфәрҙең, иншалла, елеге һурылған сираҡ аяҡтары шамтырап төшкән кәүҙәһен өҫтөрәп, һаман да йөрөп ята. Йөмлә йорт менән бергә ята ла, тау аҡтарырға йыйынған эшем эйәһеләй һин дә мин килә лә тора! Эх! Ә шулай ҙа оһолло саҡтарға етәме һуң? Кәүҙәгә артыҡ ырамалы булмаһа ла, тауҙа ғына үҫкән ҡыҙыл сайырлы "кандауай" ағастай ныҡ, тос булды йәшлегендә Йәғәфәр. Беләҙек тамырҙарында тиртеп-бүртеп аҡҡан ярһыу ҡаны эштең алҡымынан тотҡанда һытылып түгелерҙәй ине.

Оҙон-оҙон күренгәйне лә шул ғүмерҙәр! Ә ул һалмауыр шайылай шыйылдап үтте лә китте. Үпкәһе юҡ Йәғәфәрҙең мөкәддәренә - ғүмерҙең оҙонон, һаулыҡтың нығын ҡуша бирҙе Хоҙай уға. Үҙенә рәттәш түгел, байтаҡҡа йәшерәктәр ҙә хәҙер инде арала юҡтар. Ә ул, һыр бирмәҫ һыпата, донъя көтәм, тип тырмашаланып ятҡан була...

Биш тауыҡты бер итеп борҡолдатҡан ҡыҙыл әтәс ҡапыл туҡтаны ла, хужаһы ҡаршыһына килеп баҫты. Ник хәсрәткә батып ултыраһың, тигәндәй, бабайға ҡарап ҡыҙыл кикереген тегеләй-былай ҡаҡайтып тора бирҙе. Хужаһының иғтибарһыҙлығына үртәлепме, әле генә таҙалап һеперелгән келән таҡтаға шыйыҡ нәжәсен сырҡылдатып ҡойҙо ла, башын текә тотоп, төнлөк яғына юл тотҡайны... Һыртына артыш таяғы ҡополдауға, йыһан ярып ҡысҡырып, әллә ҡайһы арала юҡ булды.

Йәғәфәр ҡарт өйөнә йүнәлде. Алаҡ-һолаҡ ҡапҡылаған иртәнге тамағы аҫҡайны. Ул-был иткеләр ҙә, түшәк-яҫтығына терәлеп алыр. Йоҡламаһа ла, серем иткән - иткән булыр. Унан инде офоҡто бөләңгерт нурҙарға мансып, май эңере тартылыр.

Эш бөтмәгән әле - күршеһе Заһиҙулланы күрәһе бар. Ҡыуанысына ла, хәсрәтенә лә ултырҙаш булған һағышташ Заһиҙуллаға әйтәһе һүҙҙәре күп. Ана шул ниәттәрен бөгөндән ҡалдырмаҫҡа булды. Донъяның ни эше юҡ - бөгөн бында, иртәгә - тегендә. Заһиҙулла мал-тыуарын теүәлләп йыйып алһын да, шунан имиз итер. Унса булмай, шығырлап солан ишеге асылды. Тупһала ҡулына сеүәтә тотҡан күршеһе күренде.

- Бөгөн күренмәне, тип, инеп килешем. Хәлдәрең нисек, апа?

Киленең тауыҡ һурпаһы бешергәйне. Ҡоротланған. Әйҙә, эҫеһендә ашап ал! - Заһиҙулланың гөрөлдәк тауышы өйҙө тултырҙы. Үҙе, йәтешләп, ҡартлас ҡаршыһына ултырғысын тартты. Бабай туҡтауһыҙ хәбәр сурытты, тегенеһе иһә йылмаякөлә тыңланы. Йәғәфәр ҡарт ҡапыл шымып ҡалды. Төп һүҙен ниҙән башларға белмәне. Ул иңкәйеп, урындыҡ аҫтынан семәрле һандыҡ һөйрәп сығарҙы, һандыҡ ҡапҡасына бергилке бармаҡтарын бейетеп ултырҙы.

- Минең ҡырға, шәйт, үҙең инеп йәп иттең. Ошонда бар монаятым, - тип һөйләнә-һөйләнә бабай шыпа тултырылған һандыҡты асты. - Күҙ терәгем - һин. Йортом да, әҙ-мәҙ аҡсаларым да һиңә тәғәйен яҙылған...

Заһиҙулла аптырауҙан һүҙҙән ҡалды.

- Һуң, апа, минән башҡа туғандарың бар ҙа баһа?

- Ә һин, балам, ошонда йәшәгәне бирле миңә кемдең булһа ла килгәнен күргәнең бармы?

- Күрмәһәм дә...

- Ни әйтеренде самалап торам. Серек өйгә лә талашыусылар табыла ул, тиһеңме? Һиңә һис борсолорға урын юҡ. Көллө ҡағыҙҙар ҙа нотариус аша раҫланған. Зат-зәүерем талашмаҫлыҡ итеп. Һиңә бер генә үтенесем бар: еренә еткереп арыулаһың. Миңә, Алексейға аят уҡытып, саҙаҡаһын биреп торһаң, шул еткән. Йәнбикә мәрхүмәкәйемә кесе йома уҡ биреһең. Мәрхүмә әруахтар сыҙамһыҙ була...

- Алексей, тиһеңме?

- Йән дуҫым ине. Урыҫ тип ғәжәп итәһеңме? Беҙ һәммәбеҙ ҙә бер Хоҙай балалары.

- Һы! - Заһиҙулла сикәләрен ыуып ҡыҙартып бөттө. - Һы! - Тағы ҡабатланы. - Әллә апам бөтәүләй китергә йыйынған ул. Әле һин йәштәргә биргеһеҙ, осорта баҫып йөрөйһөң!

- Бүтәне бүтән, һәр хәлдә, әжәл килмәй ҡала торғандан түгел...

Береһе оҙон-оҙаҡ ғүмер кисереп, туҡһанды туңҡайтҡан ҡарт, икенсеһе бер утыҙын көҫкә ашатлаған йәш кеше ҡыҙыл эңер ергә ҡара пәрҙәһен элгәнсе сөкөрҙәштеләр...

* * *

Үткән көнөнән ифрат ҡәнәгәт ҡалған Йәғәфәр ҡарттың талсыҡҡан тәне ҡапыл йоҡоға тартты.Тәрән йоҡо аралаш ыңғырашты. Баҫлыҡты. Тегеләй-былай бәргеләнде. Ыһылдап-ныйылдап ята торғас, көҫкә уяна алды. Төш күрҙе булһа кәрәк. Төштәр, шулай булмаһа, күргәндәрен мәлемәле менән генә иҫләр инеме ни?

Туҡта!.. Кем менәндер бура бурайҙар ине түгелме? Кем булды ул кеше? Һын-һыпаты Заһиҙуллаға тартым, буғай. Бит-йөҙ өлөшөн төҫмөрләй алмауы аяныс. Йәғәфәр ҡарт тегене ниңәлер сәбәләнеп ҡыуырға маташа. Ә уныһы оторо ныҡыша, оторо анталаша. Киҫекһеҙ икән. Үҙен аямай. Ҡапыл бүрәнә башы ысҡынды. Йәғәфәр ҡарт алға табан ҡулын һуҙғайны - ҡулы етмәне, ниҙер әйтергә уҡталғайны - теле әйләнмәне. Теге ҡәһәр һуҡҡан бүрәнә Заһиҙулланы һағалай түгелме? "Заһиҙуллау, ҡас, балам, торма бында!" Өлгөрмәне, һуҡты, иҫәңгерәтә һуҡты. Соңҡаһынан ҡан урғылды. Киҫкәләй ауҙы бахыр бала... Ыһ!

Шул уяныуҙан Йәғәфәр бабайҙың күҙенә башҡа йоҡо төйөлмәне.

Тигенгә түгел был төш. Хәйерлегә түгел. Изгегә булһын! Әжәл үҙенә килә ятһа, хуш, ашарын - ашаған, йәшәрен - йәшәгән, тигәндәй. Уйҙарынан убылыр сиккә етеп, йөрәге сәңкене. Үҙен тынысландырырға теләп, түшәм таҡталарын һанай башланы. Ҡөлһыуаллаһын ҡабатлай-ҡабатлай, түшәгенән ҡалҡынып килгән саҡта ҡапҡаһын доңғорҙаттылар.

Аҫҡаҡ кәүҙәһен еңел генә ҡуҙғатып, болдорҙан йүгереп тигәндәй төштө.

- Әй, әттәгенәһе, ауыҙыңа май тулғыры. Былай ҙа ауырға торған ҡапҡамды шутиклем ҡаҡмаһаң ни була? Заһиҙулла ошо арала рәтләрмен тигәйне лә. - Мөңгөрләй-һөйләнә, ҡартлас ҡапҡа биген күтәрҙе. Әхмәҙулла икән. Йөҙө ҡомһарып киткән.

- Ҡапҡаңдан алда үҙе йығылып киткән ағайым, - тине Әхмәҙулла, алҡымына тығылған төкөрөгөн көскә йотоп.

- Атаҡ, ҡайҙа киткән? Кис ҡорон ғына буйтым һөйләшеп ултырҙыҡ, һурпа индергәйне. Ҡайҙалыр китерен аңғартмағайнысы.

Хәлдең айышына төшөнгәс, кинәт зиһене буталды, быуындары ҡороно. Йығылдым, тигәндә генә көслө ҡулдар уны ҡармап тотто ла болдор баҫҡысына терәне. Берғауым һеңгәҙәп ултырғас, һорауҙарын ҡайтанан ҡабатланы ҡарт. Йөрәк өҙгөс иңрәү менән, ҡушарлаған тубығына башын һалып, бәүелеп, өнһөҙ генә һыҡтаны. Күҙҙәрен сылт-сылт йомғоланы - күҙ йәше сыҡманы. Әхмәҙулла ниҙер һөйләп маташты, бабай аңламаны. Бөтә ғәм-уйын тотошлайы менән Заһиҙулланың көтөлмәгән вафаты биләп алды. "Һы, кисә кис кенә ҡапма-ҡаршы ултырып, ихлас гәп һатҡан күршең таң атҡансы юҡ булһын әле. Кем-кем, иллә Заһиҙулла түгел ине. Эх, Заһиҙулла, ташланың да киттең. Тамырынан һурылған ҡыуалдай япа-яңғыҙ тор ҙа ҡал хәҙер. Өрләктәй бейек, йәҙрәләй ныҡ шул әзмәүерҙе лә аямағас, Хоҙайым, һиңә үпкәләнең ни ҙә, үпкәләмәнең ни?"

Яурынынан еңелсә генә ҡаҡҡан Әхмәҙуллаға бабай сәйерһенеп ҡараны. Мәрхүм өйөнә барырға кәрәклеген аңлатҡас, һеүҙәп кенә уның артынан эйәрҙе.

Ҡайғынан һығылған Мәхмүзә киленен күреүгә йөрәгенә тағы ҡан һауҙы. Мәрхүмде мәйетханаға алып китмәҫ борон тип, ясин сығырға ултырҙы. Йыйылған әбей-һәбейгә арыулауҙа кәрәгер кәрәк-яраҡтар әҙерләргә ҡушты, дүрт-биш иргә истинәжә ҡылыу түгел, тулы тәһәрәтле килергә бойорҙо. Ә үҙе егелгән атҡа Зөлфаятты ултыртып, әруахтар йортона юл тотто.

* * *

Зыяратта кеше байтаҡ ҡына йыйылғайны. Эшкә тотонмағандар, әйтерһең, кемдеңдер килеп әйтерен көтәләр. Берәүҙәре зыярат ҡыҙыра, бәғзеләре Бәхтегәрәйҙең туҙға яҙмаған лөғәтен тыңлай, ер һелкетеп көлөргә лә тартынмайҙар. Бәхтегәрәйҙең йүнле хәбәре бармы инде, эткә һалһаң, эт еймәҫ һүҙҙәренән ниндәй кинәнес табаларҙыр, аңламай Йәғәфәр ҡарт.

Ғүмерендә күпте күргән Йәғәфәр ҡарт кешеләрҙең ҡылыҡтарын, үҙ-ара мөнәсәбәттәрен һаман да төшөнөп бөтә алмай. Әле лә, килеп етеү менән һәр ҡайһыһының йөҙөнә текәлде. Уларҙа йәлләү, хәсрәт ғәләмәттәре юҡ икән дәһә. Кеше үлеме һуҡыр бер тингә лә тормай!

- Оһо! Комендант килә! - Буштан-бушҡа устарын шапылдатҡан Бәхтегәрәйгә бабай уҫал итеп ҡараны. Бәреһе һөймәй ошо әҙәмде. Донъяла йәшәй бит Хоҙайҙың мөхәббәтһеҙ бәндәләре лә. Шайтандың да иманлыһы булалыр, иллә-мәгәр бисмиллаһыҙ яралған был иблистә унын осмото ла юҡ. Кеше вафатына ҡыуанысының сиге булмай. Емтек көҫәгән ҡоҙғон ише элмәндәп алдан саба. Эшенең рәте-сираты булһа - ни асыу. Комендант тигән ҡушаматты ла ошо мөрәүәтһеҙ таҡты. Уныһы кәп кенә ҡартыңа йәбеште лә ҡуйҙы. Үпкәләмәй ул. Әйҙә, әйтһендәр. Хатта ғорурланып та ҡуйғандай. Йыназа тәртиптәрен уның шайы атҡара белгән кеше ауылда юҡ, тигәндәй.

Үзбәк илендә ислам ғилемдәренә лә апаруҡ өйрәнеп ҡайтҡайны. Зирәк Заһиҙулланың да дингә барымы булманы түгел, булды, йәһәт кенә уныһын-быныһын әләктерә һалыр ине. Бына бит ҡайһы яҡтан килеп кәкте яҙмыш...

Кәре бар саҡта мәрхүмдең үлсәмдәренә ҡарап, ҡәбер ҡаҙҙырыр ине. Хәҙер нишләйҙәрҙер, һуңғы осорҙа бында килгәне юҡ.

Иҡсанбай Йәғәфәр ҡарттың ырыяһыҙ йөҙөнә ҡарап, көрәккә тотондо. Унан күрмәксе, тағы өс ир ҙә ҡуҙғалды.

- Иркенерәк алығыҙ, бөкшөрөп ней. Заһиҙулла мәрхүмдең ниғоро дәү икәнен беләгүрә. - Күҙҙәре соҡорҙа булһа ла, күңеле өнһөҙ генә һеүҙәгән бабай ирҙәрҙең зыулаған тауышына айнып китте. Бәй, ҡәберҙе ыратып ҡаҙып ташлағандар икән. Ере шау ҡара тупраҡ, балсыҡмаҙар күренмәй. Ҡай аралалыр соҡорға һикереп төшкән Бәхтегәрәй ҙур ғына баш һөйәген өҫкә күтәрҙе.

- Комендант, ҡарале, нимә таптым! - тип һөрәнләне. - Һин хан заманынан башты төньяҡҡа һалып әҙәмде һандыратҡанһың. Ә был һөлдәнең башы көньяҡтан килеп сыҡты. Ҡибла ҡайһы яҡта булғанын аңлат хәҙер. Нимә аңшайҙың?

Бабай өндәшмәне. Йүнһеҙ хәбәр менән мейене сарға кеүек игәгән теге үжәткә һарғылт күҙҙәренән зәһәр осҡондар сәсрәтеп ҡарап ҡуйыуҙан үтә алманы. Соҡорҙа торған Иҡсанбайға һөйәктәрҙе өҫкә сығарырға ҡушты:

- Аҙаҡ аят уҡытып, Заһиҙулла мәрхүмдең аяҡ осона күмербеҙ.

Бәхтегәрәй үҙе тотҡан табышҡа тәғәйен иғтибар даулай алмағанға көйөнөп, бурҙаттай көрәнәйҙе. Зыяратҡа килгән кешеләрҙең әле генә хакимлыҡ иткән Бәхтегәрәйҙән йөҙ бороп, шымтыраған Йәғәфәр ҡартҡа әйләнеп киткәндәренә эсе көтөрләне. "Ҡартығыҙ доңғорҙап китеп барһа, белермен мин һеҙҙең менән ҡалайтырға ". Эстән үртәлде Бәхтегәрәй, ҡара янды. Бабайҙың йөрәген шартлатырҙай һүҙҙәр эҙләне.

- Комендант, ҡарале, һин үлһәң, урыныңа мин ҡалам, шәйт. Ныу ҡылам бит ҡылыҡты-ы-ы. Бисәңә аяҡташ һалам, валлаһи! Әйҙә, ятығыҙ тибешеп, - тип һөрәнләне.

Тегене шаштырғандай, бүтәндәр хихылдашты. Йәғәфәр ҡарт күкһел ирендәрен ҡанатҡансы ҡымтыны. Тормошто төрлө сүрәттәрҙә күреп сыныҡҡан Йәғәфәрҙе бер әтрәгәләмдең һүҙҙәре һындыра алмаҫ ине лә, тик себенде лә сиртмәҫ Йәнбикәнең рухына бысраҡ теле менән йоғона ла баһа. Әрнене Йәғәфәр, эй, әрнене. Тарамыштары һытыла яҙып семетеп ҡуйҙы, сикә тамырҙары бүлтәйҙе. Эх, һеңдерә әйт ине шуға. Аҡыллы һүҙ һөйләү ҙә фәтүәһеҙ. Хәйер, ахмаҡҡа аҡыл өйрәтеп кенә шул халәтенән арындырып булһасы.

Ә шулай ҙа бабайҙы эстән ниндәйҙер хөсөтсө уйҙар, әйтәйт, тип ойотҡолағандай булды.

- Ишшу, кем-кемде күмер әле!

Ҡот осҡос һүҙ ауыҙҙан атылып сыҡты ла йөрәккә уҡ булып ҡаҙалды.

Бабайҙан үс алырға тип соҡорҙан тарбаланып сыҡҡан Бәхтегәрәйгә ирек бирмәнеләр. Тимерхан дәү кәүҙәһе менән Йәғәфәрҙе ҡапланы.

**(Дауамы бар).**

✓ *Беҙҙең заман шиғриәтендә ысын башҡорт образын тыуҙырған ижадсы ул - Рәйес Түләк. Ул башҡорт халыҡ шағиры. Ошо исемде рәсмиләштереп ҡуйғанда - шағирҙың ижадына оло һәм лайыҡлы баһа булыр ине.*



ХӘТЕРКИТАП

# ҠАЛҠАН БУЛДЫҢ ҺИН УҠТАРҘЫҢ

## Беҙгә йүнәлгәненә...



**Әхмәр ҮТӘБАЙ:** Ошо көндәрҙә ауылдашым, танылған шағир Рәйес Түләккә 55 йәш тулған булыр ине...

Рәйесте ҡайҙалыр ынтылыу, ашҡыныу, үрһәләнеү кәйефе бер ҡасан да ташлап китмәне. Бөгөн генә бөтә тулылығында аңлайым мин уның был халәтен: йөрәгендәге бер туҡтауһыҙ яныу уны шулай ҡайҙалыр ашҡындырып-талпындырып йәшәткән. Һәүетемсә, һәлмәк, талғын ғына һөйләшеп ултырып та булмай ине бит уның менән. Уның күңел маятнигының уғы йә "ампли-туда"ны, йә "ампли-сюда"-ны ғына белде, урталыҡты тойманы кеүек. Уй-фекер йөрөтөүендәге тынғыһыҙлығы, фекер динамикаһы, хистәренең ҡапыл гөлтләп тоҡаныуы менән ул, гүйә, тыуғанынан алып тик яныу өсөн генә яратылғайны. Әйтерһең дә, завод конвейерынан сыҡҡан двигателде бер тапҡыр тоҡандырғандар ҙа, ул эшлектән сыҡҡансы, бер туҡтауһыҙ эшләргә лә эшләргә тейеш. Минең уйымса, шағирҙар тап шулай булаларҙыр ҙа ул.

Рәйестең яңы ғына яҙған шиғырын кемгәлер уҡып ишеттереү теләге менән ете төн уртаһында кешене йоҡоһонан уятыу ғәҙәте хаҡында күптәр белә. "Сибай-Өфө" поезына ултырып, тәүге тапҡыр Өфөгә китеп барғаныбыҙҙа ла ул мине әллә нисәмә тапҡыр уятып, яңы ғына ҡағыҙға төшкән шиғырҙарын уҡып ишеттерҙе. Шиғырын тыңлау ғына түгел, уға ҡарата үҙ фекереңде лә әйтергә тейешһең әле. Шул сағында тәнҡит һүҙҙәре әйтеп ҡара, ул күңел емешен үҙ балаһын йыртҡыстан һаҡлаған кейек кеүек яҡлай ине. Юҡ, Рәйес тәнҡитте ҡабул итә белә ине, тик әйткән һүҙенең хаҡлығы өсөн көрәшә лә белә ине. Студент саҡта уның хатта үҙ ятағында шиғырын тыңларлыҡ кеше таба алмайынса, студент ҡаласығындағы башҡа ятаҡтарҙағы таныштарының, дуҫтарының ишектәрен туҡылдатып йөрөгәнен беләбеҙ.

Рәйестең был халәтен аңлар өсөн уның бары тик "Яныу" поэмаһын уҡыу ҙа етә. Рәйес Түләк ошо әҫәрендә бар тулылығында асыла, шағир һәм шәхес булараҡ үҙенең донъяға тәғәйенләнешен, маҡсатын билдәләй, минеңсә. Ул да булһа - халыҡты, милләтте ниндәй һәләкәт алдында торғанлығын иҫкәртеү, тарихи һабаҡты онотмаҫҡа, уяу һәм ғәмле, сәмле йәшәргә өндәү. Янған һарайға күҙ йоммай теҙелеп инеүсе һарыҡтарға ҡаршы сығып, уларҙы туҡтатырға теләүсе көтөүсегә ниндәй борсолоу хас булһа, үҙ милләтен, кешелекте шундай янғындарҙан ҡурсырға, араларға теләүсе шағир вазифаһын башҡарҙы кеүек Рәйес. Ошо бурысы үтәлгәс тә, донъялыҡтан китеүе лә ҡәҙимге ғәмәл булып тойолдо уға.

Рәйес Түләк бер ваҡытта ла дежур һүҙҙәр һөйләмәне, дежур мәҡәләләр яҙманы, дежур шиғырҙар ижад итмәне. Сибай педагогия училищеһында уҡытҡан сағында мин уның дәресенә инеп ултырҙым. Шиғыр тураһында ине ул дәрес. Әгәр ҙә уның дәрестәрен һүҙмә-һүҙ яҙып, матбуғатҡа баҫып сығарһаң, улар училище, институт, университет студенттары өсөн генә түгел, хәҙер Яҙыусылар берлеге ағзаһы тип һаналған, "... исемендәге дәүләт премияһы лауреаты" булған бик күптәр өсөн дә һабаҡ-дәрес булырлыҡ. Булмышы, асылы менән шағир ғына түгел, ғалим да, мөғәллим дә ине ауылдашым Рәйес Түләк.

Рәйес үҙе теләп янды, яныуға тиң яҙмышын үҙе һайлап алды. Дөрөҫөрәге, уның яҙмышы тотошлайы менән яныуҙан торҙо. Ғүмере лә шуға ҡыҫҡа булды. Әммә ул ғүмерен бушҡа ғына бирмәне. Күптәребеҙҙе аямай үртәгән дәһшәтле янғынға үҙе теләп инеп янды ла, беҙҙе был хаҡта иҫкәртеп китте...

*Ер сатнаһа, һин тешеңде*
*Шығырҙаттың - түҙмәнең...*
*Тәнең менән Ерҙе һаҡлап,*
*Ауҙың ғына - үлмәнең.*

*Урта быуаттарҙан килдең,*
*Килдең таш быуатынан.*
*Халҡыбыҙҙың бөйөк рухын*
*Тәфсирләп аңлатырға*
*(Янғындан аңғартырға).*

*Ҡалҡан булдың һин уҡтарҙың*
*Беҙгә йүнәлгәненә,*
*Илгә төбәлгәненә,*
*Миңә төбәлгәненә.*

*Ҡалҡан булдың, тик булманы*
*Ышыҡланыр "урының".*
*Ысын шағирына Өфө*
*Асманы шул ҡуйынын.*

*Таш йорттарҙы тиңләнең шул*
*Баррикада-табутҡа.*
*Тик Өфөнән киталманың*
*Һәм ҡалманың, ҡалып та...*

*Урта быуатыңа киттең,*
*Киттең таш быуатыңа, -*
*"Башҡорттар йәшәйҙәр!" тиеп*
*Тарихты йыуатырға.*

**Лариса АБДУЛЛИНА:** Замандашыбыҙ, һоҡланғыс талант эйәһе, башҡорт шиғриәтенең аҫыл өлгөләрен тыуҙырған Рәйес Түләк ижадта янды, әммә тере рухы булған шиғырҙары менән халҡыбыҙҙың аңын уятып, әҙәбиәттә яңы образын тыуҙырып, һуңғы һулышына, тамсы ҡанына тиклем милләтенә йәнен фиҙа ҡылып китте.

Рәйес һәр өнө, ауазы, һәр шиғыры, өтөр-нөктәһе менән башҡорт шағиры! Уның ижадында башҡорт характерының бар яҡтары ла бар - саялығы ла, сәмлелеге лә, айбарлығы ла, моңһоҙлоғо ла, моңлолоғо ла - бына ошо XXI быуатҡа нисек килеп еткәнбеҙ, ниндәй милли һыҙаттарыбыҙҙы юғалтҡанбыҙ, ниндәйҙәрен үҫтергәнбеҙ, шулар барыһы ла бар ине унда.

"Бельские просторы" журналында тәржемәләр конкурсын беҙ уның "Аҡ фонтан" шиғыры менән башлап ебәргәйнек. Шунда бер нәмәне аңлап ҡалдым: тәржемә, ғөмүмән, ҡатмарлы эш, ә милли рух, моң менән һуғарылған шағирҙың әҫәрҙәрен башҡа телгә ауҙарыу мөмкин дә түгел кеүек. Рәйестең шиғырҙары ла, үҙе кеүек, тик халҡына тоғро, тик башҡорт халҡына хеҙмәт итә! Беҙҙең заман шиғриәтендә ысын башҡорт образын тыуҙырған ижадсы ул - Рәйес Түләк. Ул башҡорт халыҡ шағиры. Ошо исемде рәсмиләштереп ҡуйғанда - халыҡ рухы, асылы тип янған шағирҙың ижадына оло һәм лайыҡлы баһа булыр ине.

## ОРАН

*Рәйес ТҮЛӘК*

Мин - яуҙарҙа үлгән башҡорттарҙың
Тере рухы - һеҙгә һүҙ ҡушам.
Уралтауҙа һеҙ йәшәһен тиеп,
Ҡайта алмай ҡалдыҡ һуғыштан.

Беҙҙең өҫкә баҫып атлайһығыҙ,
Был ерҙәрҙә беҙ - һәр аҙымда.
Башҡорт ерен, һары майҙай күреп,
Беҙ тасҡаныҡ йөрәк ҡанында.

Ер өҫтөнә һин дә, һин дә, һин дә
Шытып сыҡтың беҙҙең орлоҡтан.
Ғүмер баҡый ҡоллоҡ булыр илең,
Ошо хаҡта әгәр онотһаң.

Аҡһаҡалдар! Белмәйһегеҙ...
Һеҙме - буйҙар етмәгәнен терһәккә,
Һеҙ бит һаман булмышығыҙ менән
Алдар эленеп торған элмәктә.

Быуындарҙан күсереп быуындарға,
Һаҡлағанбыҙ икән кем өсөн?
Ҡайҙа иттегеҙ һеҙ Уралтауҙың
Ҡар(а)урманын, алтын-көмөшөн?

Был һораүҙы сабыйың теле менән
Мин һорармын, мең ҡат һорармын.
Ҡайҙа, тиеп, бәҫе, күркәмлеге
Салауаттан ҡалған Уралдың?..

Һорармын мин -
яугир башҡорттарҙың
Тере рухы:
- Эй, ил инәһе!
Башҡортлоҡто баҫҡан ошо ҡәһәр
Әллә һинән, һинән киләме?

Һин төкөрҙөңмө әллә иманыңа,
Беҙ ҡалдырып киткән ырыҫҡа?
Нисә улың илен ташлап китте,
Нисә ҡыҙың сыҡты урыҫҡа?

Ниндәй Рәсәй һуң ул туйыу белмәй
Башҡорт еркәйенә ҡаныҡҡан?
Алтын түгел - беҙҙең һөйәк бит ул,
Нефть түгел - ул бит беҙҙең ҡан!

Һеҙҙе урап ятҡан - офоҡ түгел,
Ваҡыттыр бит шуны аңларға.
Ул бит - беҙҙең ҡәбер.
Ҡояш булып,
Беҙ ҡалҡабыҙ һеҙҙе барларға.

Йөҙөбөҙ саф, сөнки намыҫ таҙа,
Беҙҙең намыҫ ҡанда сайҡалған...
Уян, башҡорт!
Үлгән улдарыңдын
Ҡәберенән тороп саң ҡағам!

ЗАУЫҠ



## ӘСӘЙЕМ ҺАБАҠТАРЫ

* * *

Ҡабатлай ине әсәйем,
Аҡыл өйрәтеп "туйғас":
"Ҡыҙ баланы ҡырҡ урындан
Тыйһаң да артыҡ булмаҫ!"

Ҡурҡа-өркә үҫтергәндер
Ете ҡыҙҙы әсәйем,
Әле бына ике ҡыҙға
Йән сығырҙай йәшәйем.

Матур ғына йөрөһөндәр,
Исемдәре сыҡмаһын,
Кеше һүҙе, йылан булып,
Бәхеттәрен саҡмаһын.

Ҡыҙ балаға талап ҙур шул!
Ир балаға кәмерәк,
Һәр кемгә лә уңған, тырыш,
Тәүфиҡле килен кәрәк.

Өйрәтеүем артып китһә,
Хатта үҙем туямын,
Ҡыҙҙарымды ҡырҡ урындан
Тыямын да тыямын...

* * *

Бер бабай аҡыл өйрәтә,
Йәнәһе, кәңәш бирә,
Үҙе дөрөҫ йәшәһәсе
Кәңәш биргәнгә күрә!

Мин үҙем дә инде күптән
Еңел-елпе ҡыҙ түгел,
Ошо нәсихәтте тыңлап
Кителеп ҡуя күңел.

Туҡтатырға уҡталам да,
Үҙем тағы туҡталам...
"Аш менән атҡан кешегә
Таш менән атма, балам!"

Келт итеп ошо һүҙҙәрең
Иҫкә төшә, әсәйем
Һинең аҡыл-кәңәшеңде
Иҫтә тотоп йәшәйем.

Үҙе эшләй алмағанды
Ул бабай өйрәтәлер,
Үҙе ҡылған хаталарҙы
Беҙҙәрҙә төҙәтәлер.

"Бер олоно, бер кесене
Тыңларға кәрәк, балам!"
Тыңлармын, әсәй. Иҫләйем
Һинең һабаҡты һаман.

* * *

Әсәйемдең, үҙен-үҙе әрләп,
Үкенгәне сыҡмай иҫемдән:
"Ҡуй, ыштанһыҙ, шулай яраймы ни?
Төш инмәгән аҡыл кис инмәҫ!"

Мин дә шулай, әсәй, һаман шулай,
Бигерәк бер ҡатлы һаман да,
Һәр бер матур һүҙгә ышанам да,
Кәкере ҡайын терәп ҡалам да,

Һине иҫкә алам. Төш инмәгән
Аҡыл инмәй икән кис еткәс...
Эй, ыштанһыҙ! Башҡа һалырға бит,
Әсәйемдән быны ишеткәс!

Бигерәк шул үҙем бер ҡатлымын!
Кейем менән генә ике ҡат...
Башты һалып илар кешем дә юҡ,
Бөтәһе лә йәнәш ете-ят.

Төп башына мине ултыртырға
Күп кәрәкмәй, беләм үҙем дә,
Ә шулай ҙа, һаман ышанырға,
Алданырға, аҙаҡ үкенергә
Көстәр табам әле үҙемдә...

**Фирүзә АБДУЛЛИНА.**
**(Аҙағы).**

ИНТЕРНЕТТАН



# АЛДАШЫУҘЫ...
## сабыйҙар тиҙерәк тоя

■ Артыҡ ауырлыҡ йыймаҫҡа тырышыуығыҙ юҡҡа ғынамы? Бәлки, һеҙ йәшәгән йорт эргәһендә сәләмәтлеккә файҙалы ризыҡтар һатылған магазин юҡтыр? Массачусетс һаулыҡ һаҡлау департаменты ғалимдары билдәләүенсә, сифатлы аҙыҡ-түлек һайлап алыу мөмкинлеге бирмәгән магазиндар тулы кешеләрҙең күбәйеүенә килтерә. Киреһенсә, өйөнөң эргәһендә генә йәшелсә, емеш-еләктәр һатылған кибет булһа, ундайҙар һомғолораҡ була. Тикшеренеүҙәрҙә ябығырға теләүсе 204 кеше ҡатнашҡан. 2,5 йыл буйына уларҙың нисек туҡланыуын, аҙыҡты ҡайҙан һатып алыуын күҙәтеп, ғалимдар ошондай һығымтаға килгән дә инде. Күптәр бөгөн автомобилдәрҙә йөрөй, улар ҙа, йәйәүлеләр ҙә аҙыҡты йорто эргәһендәге магазиндан һатып алыуҙы ҡулайлыраҡ күрә.

■ Алдағанға тиҙ ышанып барыусы кеше тураһында йыш ҡына "сабый кеүек ышаныусан" тип әйтергә күнеккәнбеҙ. Үҙенең торошо, тауышының тоны менән һәр кемде лә ышандыра алыусылар арабыҙҙа күп, әлбиттә. Канада ғалимдары тикшеренеүҙәре был күҙәтеүҙәрҙе шик аҫтына ҡуя: биш йәшлек балалар ундайҙарға бөтөнләй ышанмаясаҡ. Бала биш йәштә алдауҙың ҡайһы бер билдәләрен танырға өйрәнә. Конкордия университеты психологтары әйтеүенсә, бәләкәйерәк сабыйҙар бөтөн нәмәгә лә ышанып барһа, өлкәнерәк балалар уны алдаусыны шунда уҡ тоясаҡ.

■ Бөгөнгө заман биология фәненең иң модалы темаһының береһе - эсәк бактериялары. Улар иммунитетҡа ла, кәйефкә лә, ауырлыҡ массаһына ла йоғонто яһай. Франция менән Эстония тикшеренеүселәре бактерияларға бәйле тағы бер ҡыҙыҡ асыш яһаған. Аппетитты меланотропин гормоны яйлай. Уны икенсе төрлө "туйыу гормоны" тип йөрөтәләр. Эсәк бактериялары ошо гормонға оҡшаған аҡһым бүлеп сығарырға һәләтле. Иммун системаһы уның сит матдә икәнен танып, уға ҡаршы көрәшә башлай, шул саҡта ысын меланотропин да зыян күрә. Был кешенең туҡланыуына нисек йоғонто яһауын асыҡларға тырышып, ғалимдар ҡомаҡтарҙа һынауҙар үткәрә. Эсәктәрендә бындай бактериялар булған ҡомаҡтар башҡа төркөмдәге ҡомаҡтарға ҡарағанда ауырлыҡтарын нык юғалтҡан, йышыраҡ ашаған. Кешеләрҙә үткән һынауҙар күрһәтеүенсә, кешенең аппетиты ни тиклем боҙолған булған, уның ҡанында иммунитет сит аҡһымға ҡаршы бүлеп сығарған антиматдәләр ҙә күберәк табылған. Иң ҡыҙығы, был эффект күп ашап та туймаусыларҙа ла, ашай алмаусыларҙа ла күҙәтелгән. Әгәр ҙә бактерия бүлеп сығарған аҡһым бындай етди сирҙәргә килтерә икән, уны ҡанға анализ тапшырып белеп буласаҡ. Юғиһә, быға тиклем бындай тайпылыштарҙы психологтар ғына дауалай ала, тип иҫәпләйҙәр ине.

■ Төнөн оҙон юлда йөрөргә тура килгәндә күп водителдәр йә музыка тыңлай, йә йоҡоһон ҡәһүә менән ҡыуырға тырыша. Бөтөн донъя тикшеренеүселәре ошо һорауға яуап эҙләгән һәм ул октябрь аҙағында Чикагола үтәсәк конференцияла тәҡдим ителәсәк. Уларҙың фекеренсә, кофеин да, музыка ла берҙәй тәьҫиргә эйә. Әммә иғтибарлылыҡ ҡәһүә эскәндән һуң күпкә яҡшыраҡ була. Ә музыка, киреһенсә, водителдең иғтибарын ситкә йүнәлтеүе ихтимал.

ҺАҠ БУЛ, КЕШЕ!

**Рәсәйҙә спайс тигән афәттең күпләп таралыуы хаҡында киң мәғлүмәт саралары аша ғына таныш булһаҡ, был афәт күптән түгел Башҡортостанға ла үтеп инде. Нефтекама ҡалаһында бер-нисә кешенең ғүмере өҙөлдө, дүрт тиҫтәгә яҡын кеше дауаханаларға һалынды. Өфөлә хатта 12 йәшлек малайға ашығыс ярҙам талап ителде. Үлемесле наркотикка ылығыу йәшәрә бара һәм тирә-йүнеңдәгеләрҙең дә ошо ауға ҡапмауына тулы гарантия биреп булмай. Ысынбарлыҡта нимә һуң ул спайс? Уны ҡулланыу ниндәй эҙемтәләргә килтерә?**

# "СПАЙС" АТАМАЛЫ НАРКОТИК...
## ғүмерҙәргә һөжүм асты




Спайс (Spice) - синтетик JWH-018 канабиойд менән эшкәртелгән теләһә ниндәй төр үҫемлек. Ул тартыу өсөн һәм еҫле үләндәр сифатында ҡулланыла. Спайс тартыу сәләмәтлеккә гашиш һәм киндер тартыу кеүек үк зыянлы. Наркологтар уны ауыр наркотиктар рәтенә индерә, сөнки ул - химия продукты, кешенең психик һәм физик сәләмәтлегенә ҙур зыян килтерә. 2008 йылда ҡушылмаларҙың ғәмәлдәге компоненты булып үҫемлектәр түгел, марихуананың төп матдәһе булған тетрагидроканнабионол тороуы асыҡлана.

Спайс тартҡандан һуң... күҙҙәрҙе йомғанда төрлө образдар тыуа, тауыштар ишетелә, кеше үҙ тәнен тоймай, тулыһынса ысынбарлыҡ менән бәйләнешен юғалта. Амнезия барлыҡҡа килеүе ихтимал. Бәғзеләр түңәрәк буйлап йөрөй башлай, аңҡы-тиңке килеп, төрлө предметтарға бәрелә. Йығылғас, тыныс ҡына ятырға йәки эпилепсиялағы кеүек, тартышып бәргеләнә башларға мөмкин. Ауыртыныу һиҙмәй, үҙ-үҙен һаҡлау инстинкты юғала.

Ҡайһы бер осраҡта ҡурҡыу хисе солғап ала, һәм унан ҡотолоу маҡсатында кеше аңһыҙ рәүештә үҙ-үҙенә ҡул һала. Спайстың йоғонтоһонан сыҡҡас, күңел төшөнкөлөгөнә, депрессияға бирелә, ҡуҙғыусанға әйләнә. Тулыһынса аңына ҡайтҡас, үҙенең ошоғаса нимә ҡыланғанын иҫләмәй.

**Бәйлелек симптомдары.** Тире көлһыу төҫкә инә, күҙ аҫтында ҡара түңәрәктәр барлыҡҡа килә, аппетит юғала йәки ваҡыты-ваҡыты менән талымһыҙлыҡ, ябығыу, йоҡлай алмау, ҡуҙғыусанлыҡ, нисек мөмкин, шулай йоҡлау, хәтер насарайыу, һөйләшкәндә һөйләм төҙөй алмау күҙәтелә.

### Спайс тартыу эҙемтәләре

**Психика.** Спайстар кеше психикаһына көслө йоғонто яһай. Уларҙы йыш һәм оҙайлы ваҡыт ҡулланыу психик стационарға, артабан ҡәбергә тура юл аса. Тәүҙә хәтер, интеллект, иғтибар юғала. Ахырҙа, аҡыл юйыла.

**Физик сәләмәтлек.** Барлыҡ ағзалар һәм уларҙың функциялары зыян күрә. Хайуандарҙа оҙаҡ йылдар синтетик канабиойдтарға тәжрибә үткәреү уларҙың ағзаларында яман шеш күҙәнәктәре үҫеүен асыҡлай. Йәғни кеше 5 йыл спайс тартһа, унда үпкә рагы башлана. Химик матдәләр тәьҫирендә йөрәк нык зыян күрә. Артыҡ доза ҡулланғанда йөрәк өйәнәктәре йәки йөрәк эшмәкәрлеге туҡтауы күҙәтелә. Шулай уҡ даими рәүештә йөрәк сәнсә.

**Репродуктив система.** Ир-аттың эрекцияһы түбәнәйә, мәней әүҙемлеген һәм тиҙлеген юғалта. Ҡатын-ҡыҙҙың енси теләге һүрелә, гормональ фон үҙгәрә, күрем ваҡыты боҙола. Һөҙөмтәлә былар барыһы ла түлһеҙлеккә, репродуктив система ауырыуҙарына килтерә.

**Мейе.** Спайс иң нык тәьҫир иткән ағза - мейе. Химик ағыу капиллярҙарҙы ҡапыл ҡыҫылырға мәжбүр итә, мейегә кислород барыуы насарая. Һөҙөмтәлә күҙәнәктәр үлә, ә кеше еңеллек һәм вайымһыҙлыҡ кисерә.

Спайс ҡулланыуҙың барлыҡ эҙемтәләре лә хроникка һәм көндәлеккә әүерелә: баш ауырта, күңел болғана, ҡоҫтора, кеше тынысһыҙлана, хәүефләнә, ҡурҡа, депрессияға бирелә һ.б.

### Тыйырға!

Бөгөн Европаның һәм элекке СССР-ҙың күпселек илдәрендә спайс һатыу тыйылған. АҠШ-та һәм Яңы Зеландияла контролдә булған наркотик матдәләр исемлегенә спайс инмәй һәм хуш еҫ таратыусы ҡушылмалар сифатында ирекле һатыла. Рәсәйҙә улар 2010 йылдан тыйылған, әммә уларҙы Интернет-магазиндар аша хуш еҫ биреүсе үләндәр тип һаталар. Шулай уҡ был ағыуҙы етештереүселәр уның составын (тыйылған матдәләр урынына икенселәрен индереп) үҙгәртеп, уларҙы күңел күтәреүсе, әммә зыянһыҙ үлән ҡатнашмалары тип тәҡдим итә. Составындағы матдәләрҙең тыйылған исемлектә булмауы уларҙы ирекле таратыу мөмкинлеген бирә лә инде. Хатта был эшкә наркотиктар әйләнешен контролләүсе органдар ҙа ҡыҫыла алмай. Ә наркотик террор йәмғиәтебеҙгә көндән-көн төпкәрәк инә бара. Абай, уяу бул, кеше!

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ГРИПТАН ДА...
## сәстәр ҡойола

**Күҙ айҙарында һалҡын тейҙереп ауырыу һөҙөмтәһендә үпкәләр, бөйөрҙәр шешеүе, йә йөрәк ауыртыуы тураһында бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ. Ә бына грипп йә һалҡын тейҙереп ауырығанда дөрөҫ ҡулланмаған дарыуҙарҙан һуң төрлө өҙлөгөүҙәр барлыҡҡа килеүе мөмкин икәнен һәр кем дә беләме икән? Гриптан һуңғы өҙлөгөүҙең иң көтөлмәгән биш төрө тураһында ентекләберәк һөйләйек.**

**Һаңғыраулыҡ килә.** Ҡапыл бик насар ишетә башлауығыҙҙы һиҙеп ҡалып, быға тиклем отит менән яфаланмауығыҙ, ләкин һалҡын тейҙереп ауырыған осорҙа әүҙем рәүештә антибиотиктар эсеүегеҙҙе хәтергә төшөрөгөҙ. Белгестәр әйтеүенсә, "Тетрациклин һаңғыраулыҡ" тигән төшөнсә бар икән. Ул антибиотиктарҙы, мәҫәлән, тетрациклин төркөмдәгеләрен, саманан тыш күп эсеү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә. Был дарыуҙар ишетеү һәләте түбәнәйеүгә килтерә. Әгәр ҙә тап ошо сәбәптән ишетмәй башлаһағыҙ, тиҙ генә ҡолаҡ табибына мөрәжәғәт итегеҙ.

**"Вируслы" күңел төшөнкөлөгө.** Вируслы инфекция (ОРВИ булһынмы ул, грипмы), организмға килеп эләгеү менән үҙен хужаларса тота һәм ҡайҙа теләй, шунда "йәшәй башлай". Быһың һөҙөмтәһе төрлө булырға мөмкин, береһе - үҙәк нервылар системаһындағы шеш. Ошоноң эҙемтәһе буларак, һауыҡҡан кеүек булһағыҙ ҙа, үҙегеҙҙә ниндәйҙер көсһөҙлөк, күңел төшөнкөлөгө йәки ҡуҙғыусанлыҡ һиҙәһегеҙ, насар йоҡлайһығыҙ, урынһыҙға борсолоп бараһығыҙ. Шуға күрә, һалҡын тейҙереп һауыҡҡандан һуң нервылар менән бәйле ниндәйҙер үҙгәрештәр һиҙә башлау менән невролог йәки иммунолог ярҙамына мөрәжәғәт итергә кәрәк.

**Невриттан һаҡ булығыҙ.** Һалҡын тейҙереүҙең һәм грипп ауырыуҙарының иң насар эҙемтәләренең береһе - бит невриты, тип киҫәтә неврологтар. Ҡайһы саҡ бер яҡ битегеҙҙә ҡаты ауыртыу тойолорға мөмкин. Ләкин күп осраҡтарҙа был ауырыу үҙен бер нисек тә һиҙҙермәй үтә, кеше үҙ тәненең еңелсә сәнсеп ҡуйыуын ғына тоя. Күҙҙең тышҡы мөйөшө һәм ирендәрҙең сите бер яҡлап аҫҡа төшә, кешенең йөҙө симметрияһыҙ булып күренә башлай. Киҫекмәҫтән ҡанға анализ биреп, ауырыу тыуҙырыусы сығанаҡты билдәләү өсөн тест үтергә кәрәк. Шунан һуң ғына дөрөҫ дауа табырға мөмкин.

**Сәсегеҙгә иғтибар итегеҙ.** Кешенең көнөнә 200 сәс бөртөгө ҡойола. Ләкин сәстәр ҡапыл услап ҡойола башлаһа, тимәк, ул кеше яңы ғына һалҡын тейҙереп ауырыған, организмындағы бөтөн витаминдар шуның менән көрәшеүгә киткән.

Шулай уҡ антибиотиктар һәм вирусҡа ҡаршы төрлө дарыуҙар эсәк ауырыуҙарын барлыҡҡа килтереүе мөмкин. Файҙалы матдәләр ауыр үҙләштерелә башлай һәм был үҙ сиратында сәстәрҙең услап ҡойолоуына килтерә. Әммә эште төҙәтергә була. Һалҡын тейҙереп ауырығандан һуң сәстәргә көсәйтелгән туҡланыу (ретинол, алоэ ҡушылған маскалар, диңгеҙ ылымыҡтарының һығынтыһы килешәсәк), Е витамины (көн һайын ике ҡалаҡ етен майы, йә зәйтүн майы эсергә кәрәк), С витамины (көнөнә ике әфлисун, йә ярты лимон ашарға), селен матдәһе талап ителә (сығанаҡтары - һыра әсеткеһе, һарымһаҡ, бразилия сәтләүеге).

**Аяҡ-ҡулдар тартыша.** Быға тиклем булмағанса, йыш ҡына аяҡтарығыҙ ойой, ҡапыл тартыша башларға мөмкин. Һалҡын тейҙереп ауырыған ваҡытта организм вирустарға ҡаршы көрәшкәндә тимер матдәһен бик күп сарыф итә. Был үҙ сиратында тимер етешмәүҙән барлыҡҡа килгән аҙ ҡанлылыҡҡа оҡшаш сиргә килтерә. Шулай уҡ дарыуҙар менән бергә калий һәм магний кеүек матдәләр ҙә организмдан йыуып сығарыла, һөҙөмтәлә аяҡтар тартыша. Был осраҡта иң ҡулайлы ысул - ошо матдәләрҙең көндәлек нормаһы индерелгән "иң шәбе", "стресҡа ҡаршы" тип яҙылмаған поливитаминлы комплекс һатып алып, бер ай дауамында эсергә кәрәк.

✓ *Ишетеп кенә белгән кеше был мөғжизәгә ышанмаҫҡа мөмкин, мин Аллаһҡа шөкөр итәм, уны үҙемә барып күрергә, 1400 йыл һауала аҫылып торған 50 тонналыҡ таштың аҫтында намаҙ уҡырға насип булды.*



ХОҘАЙ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ



# АЛЛАҺЫ ТӘҒӘЛӘНЕҢ БАРЛЫҒЫ...

## уның кирәмәттәрендә, хикмәттәрендә лә сағыла

**Аллаһы Тәғәлә үҙенең барлығын белдереү һәм ҡөҙрәтен күрһәтеү өсөн Ер йөҙөндә йәшәгән бәндәләргә төрлө-төрлө мөғжизәләрен ебәреп тора. Хоҙай мөғжизәләре бик күп, тик уларҙың барыһын да беҙ белеп бөтә алмайбыҙ. Күптәр уларҙы аңлап та еткермәй, ышанмай ҙа. Аллаһы ул мөғжизәләрҙе, ғәҙәттә, үҙенең бәйғәмбәрҙәре аша күрһәтә. Миҫал өсөн Аллаһының ҡөҙрәте менән башҡарылған ҡайһы бер мөғжизәләрҙе ҡыҫҡаса ғына иҫкә алып китәйек.**

### Миғраж кисе

Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт салаллаһу ғәләйһи үәссәләм Рәжәб айының 26-сы кисендә "Бораҡ" исемле ҡанатлы атҡа атланып, йәшен тиҙлегендә Мәккәнән Иерусалимдағы "Әл-Акса" мәсетенә бара. Ошо мәсет эргәһенә Аллаһы Тәғәлә нурҙан баҫҡыс төшөрә һәм Бәйғәмбәребеҙ йәнә-тәнә менән ошо баҫҡыс аша 7-се ҡат күккә күтәрелә. Һәр бер күктең ҡалынлығы 500 йыллыҡ юл, күк менән күк араһы шулай уҡ 500 йыллыҡ юл. Ошо юлдағы 70 пәрҙәне күҙ аҫып йомғансы үтеп, Бәйғәмбәребеҙ Аллаһы Тәғәлә менән 12 мең һүҙ һөйләшә. Ожмахты һәм Тамуҡты күреп, шул уҡ төндә Мәккәгә ҡайта. Был Миғраж кисе иң бөйөк дәрәжәле мөғжизә тип билдәләнә.

### Ибраһим бәйғәмбәр ваҡиғаһы

Кафырҙар утындан бейек тау эшләп, уға ут төртөп, Ибраһим бәйғәмбәрҙе ут өҫтөнә ырғыталар. Аллаһының әмере менән ут Ибраһим бәйғәмбәргә зыян килтермәй, уттың уртаһында емеш ағастары барлыҡҡа килә һәм ут һүнгәс, кафырҙар Ибраһим бәйғәмбәрҙең емештәр менән тукланып ултырғанын күрә. Әлбиттә, Аллаһының хикмәте менән башҡарылған оло мөғжизә был.

### Муса ғәләйһи үәссәләм тураһында

Мысыр ерендә тәкәббер, усал Фирғәүен исемле батша була. Ул 400 йыл батша булып ултырып, үҙен "Мин - Алла" тип ҡабатлай башлай. Бер саҡ ул төш күрә. Юраусылар уға: "Бер ир бала тыуасаҡ, ул һинең батшалығыңды емерәсәк, һинең үҙенде һәм ҡәүемеңде юҡ итәсәк", - ти. Фирғәүен батшалығында тыуған бөтә ир балаларҙы үлтереп торорға бойора. 70 мең ир бала үлтерелә. Аллаһының хикмәте буйынса төш юраусылар әйткән ир баланы Фирғәүен үҙ ғаиләһендә тәрбиәләп үҫтерә. Фирғәүен ул йәш балаға Муса тип исем ҡуша. Шулай итеп, Муса 40 йәшенә еткәнсе Фирғәүендең тәрбиәһендә булып, Аллаһының әмере менән Фирғәүенде һәм уның ҡәүемен иманға өндәй башлай. Әлбиттә, үҙен "Мин - Алла" тип йөрөткән Фирғәүен һәм уның ҡәүеме иманға күнмәй. Улар Муса ғәләйһи үәссәләмгә ҡаршы дошманлыҡ ҡыла башлай. "Минә бойһонмаған Мусаны һәм уның яҡлы булған кешеләрҙе һыуға батырығыҙ", тигән фарман сығара Фирғәүен. Ул үҙенең ғәскәре менән Муса ғәләйһи үәссәләмде һәм уның ғәскәрен Ҡыҙыл диңгеҙ яғына табан ҡыуа төшә. Диңгеҙ ярына килеп ҡыҫырыҡлангас, Муса ғәләйһи үәссәләм Аллаһҡа доға ҡылып мөрәжәғәт итә. Аллаһтан килгән ишара буйынса Муса тылсымлы таяғын һыуға бәрә һәм диңгеҙ һыуы 12 урындан асылып, юл һала. Муса бәйғәмбәр һәм уның ғәскәре имен-аман диңгеҙҙең икенсе яҡ ярына сыға. Арттарынан ҡыуып килгән Фирғәүен дә ғәскәре менән бергә диңгеҙҙә асылған юлға керә. Ләкин Аллаһтың бойороғо буйынса һыу янынан үҙ урынына ҡайтып, Фирғәүен һәм уның ғәскәре батып үлә.

### Суҫҡалар тураһында

Насраниҙар Мәрйәм улы Ғайсаға:"Әй, Ғайса, һинең Раббындың беҙгә күктән ашъяулыҡ менән ризыҡ индерергә көсө етәме? Әгәр күктән ризыҡ инһә, беҙҙең күңелдәребеҙ пакланыр ине, һине Аллаһтың рәсүле тип таныр инек. Раббыңа иман килтерер инек, ул көн беҙҙең өсөн оло байрам булыр ине", - тип мөрәжәғәт итә. Ғайса ғәләйһи үәссәләм доға ҡылып, Аллаһтан күктән ризыҡ индереүҙе һорай. Доғаһы ҡабул була. Аллаһы Тәғәлә оло бер яланға күктән ашъяулыҡ менән ризыҡтар төшөрә. 330 насрани 3 көн дауамында байрам итә. Аллаһы Тәғәлә бынан алда: "Мин һеҙ һорағандарҙы үтәүсемен. Әгәр һеҙ шөкөр итеп, иманға килмәһәгеҙ, минең язам ҡаты буласаҡ", - тип иҫкәртә. Ләкин насраниҙар иманға килмәй, был Ғайсаның сихыр ғәләмәте генә, тип ҡабул итә. Аллаһы шунда уҡ насраниҙарҙың күбеһен суҫҡаға, ҡайһыларын маймылға әйләндерә. Суҫҡа хәләндә булғандары үҙҙәренең йорттарына ҡайтып, бәҙрәфтәрендәге нәжес менән тукланып, бәҙрәфтәрен таҙарта. Бына шуның өсөн суҫҡа ите мосолмандарға харам һанала. Суҫҡа булған ерҙә (өйҙә, йортта, колхоз-совхоздарҙа, фермерҙарҙа һ.б.) бәрәкәт булмай. Суҫҡанан йыраҡ булырға кәрәк. Әлбиттә, кешеләрҙе һынар өсөн Аллаһы Тәғәлә суҫҡаларға шынғай сифаттар ҙа биргән. Мәҫәлән, суҫҡа ите тәмле, был хайуан тиҙ үрсей, күберәк килем килтерә. Кем Аллаһҡа ҡаршы килеп, суҫҡаны хөрмәт итә - ул кешегә һуңынан Аллаһтың язаһы төшә.

### Һикһән йыл элек үлгән Әүлиә

Чечен республикаһына барып, бер Әүлиәнең ҡәберенә зыярат ҡылырға насип булды. Әүлиә 1880 йылда ерләнгән. Аллаһтың әмере буйынса 1960 йылда ҡәберҙе ҡаҙып, әүлиәнең кәүҙәһен ер өҫтөнә сығаралар. "80 йыл үтеүгә ҡарамаҫтан, Әүлиә бөгөн үлгән кеше һымаҡ ята ине", тип һөйләне ҡәберҙе ҡаҙыуҙа ҡатнашҡан, мине оҙатып йөрөгән чечен кешеһе. Бары уның кәфенлеге генә серреп бөткән була. Ҡаҙыусылар уның кәүҙәһен янынан йыуып, кәфенләп, тәрбиәләп, ошо уҡ ҡәбергә күмә.

Чечен ерендә әүлиәләр ҡәберҙәре күп. Һәр ҡәбер өҫтөнә төрлө ҙурлыҡтағы биналар ултыртылған, ҡәберҙәр араһында йөрөү өсөн мәрмәрҙән һүҡмаҡтар һалынған, ҡәбер өҫтәрендә Ҡөрьән аяттары эленеп тора. Һәр зыярат эргәһендә мәсеттәр, тәһәрәтханалар төҙөлгән.

### Алдағы көндәрҙә була торғандары

Ахырызамандың бер оло мөғжизәһе - Хоҙайҙың әмере буйынса бер көндө ҡояш көнбайыштан ҡалҡасаҡ һәм төшкә хәтлем күтәрелеп, кире көнбайышҡа табан барып байыясаҡ. Ошо көндә Ҡөрьән китабының бөтә хәрефтәре лә күтәреләсәк, аҡ ҡағыҙ ғына тороп ҡаласаҡ. Кешеләрҙең ошо көндән һуң ҡылған доғалары, тәүбәләре ҡабул булмаясаҡ.

Ғайса бәйғәмбәрҙең икенсе килеүе. Икенсе ҡат күктә булған Ғайса бәйғәмбәр ике фәрештәнең ҡанатына ҡул һалып, һары төҫтәге кейемдә, Сүриә илендәге бер мәсеткә төшәсәк. Ул төшкәс, донъяла бер генә дин - Ислам дине генә тороп ҡаласаҡ. Ғайса бәйғәмбәр бер ғәрәп ҡыҙына өйләнәсәк, ике балалары буласаҡ. Ғайса бәйғәмбәр Мәҙинә ҡалаһындағы мәсеттә Мөхәммәт салаллаһу ғәләйһи үәссәләм ҡәбере эргәһенә ерләнәсәк. Бөгөнгө көндә унда бер урын һаҡлана.

### Үҙ күҙем менән күргәне

Ергә теймәйенсә, һауала аҫылынып торған таш тураһында күптән ишетһәм дә, ул таштың ҡайһы илдә, ҡайһы урында икәнен белмәй инем. Халыҡ, Мәккә ҡалаһында шундай изге таш бар, тип һөйләгәс, Мәккәгә барҙым. Ундағы изге таш һауала аҫылынып тормай, Ҡәғбәтулла бинаһының бер мөйөшөнә ҡуйылған.

Кешеләр "Ундай таш Израиль илендә" тип аңлатты. Күпмелер ваҡыттан Израилгә барыу бәхете эләкте һәм күптән күрергә хыялланған ул изге ташты барып таптым. Ысынлап та, оло таш һауала аҫылынып тора, ерҙән сама менән 2,5 метр тирәһе күтәрелгән, аҫтында кешеләр йөрөй. Беҙ ҙә керҙек таштың аҫтына. Ундағы ергә балаҫтар йәйелгән, таштың тирә-яғын еңелсә генә көпләгәндәр, бер ҙур булмаған тәҙрә ҡуйғандар һәм лампочка янып тора. Беҙ таш аҫтында намаҙ уҡыныҡ. Күҙ менән генә таштың яҡынса ҙурлығын үлсәнем. Оҙонлоғо 4-5 метр, киңлеге 3 метрҙан күберәк булыр, ҡалынлығы яҡынса 2,5 метр. Таштың ауырлығы 50 тонна-нан ашыу, тинеләр. Ишетеп кенә белгән кеше был мөғжизәгә ышанмаҫҡа мөмкин, мин Аллаһҡа шөкөр итәм, уны үҙемә барып күрергә, 1400 йыл һауала аҫылып торған 50 тонналыҡ таштың аҫтында намаҙ уҡырға насип булды.

Шулай итеп, Аллаһ мөғжизәләрен Аллаһ ҡөҙрәте, хикмәте, кәрәмәте, тип тә йөрөтәләр. Аллаһы Тәғәлә үҙенең барлығын үҙ ҡөҙрәте аша иҫбатлап тора. Миҫалдар бик күп. Мәҫәлән, кеше йөрәгенең "Аллаһ" тип тибеүе, йөрәккә "Аллаһ" тип яҙылыуы, бал ҡорттарының кәрәҙҙәргә "Аллаһ" һүҙен уйыуы, һәм башҡалар. Аллаһының ҡөҙрәте, хикмәттәре бик күп. Уларҙы күрә, ҡабул итә белергә генә кәрәк.

**Исмәғил хәҙрәт ХӘКИМ.**
**Учалы ҡалаһы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

**Башҡаларға хеҙмәт итергә әҙерлек: алға барыу өсөн, башҡаларҙы алдан үткәр**

Моғайын, башҡаларға хеҙмәт итергә әҙерлек хаҡында уйлағанда йәмғиәт баҫҡысының иң түбәнендә торған, түбән квалификациялы кешеләргә ҡарата башҡарған эшмәкәрлек күҙ алдыбыҙға киләләр. Әгәр шулай икән, күҙаллауыбыҙ бөтөнләй дөрөҫ түгел. Башҡаларға хеҙмәт итергә әҙер булыу ижтимағи кимәл, вазифа йәки нимәләр эшләй белеү һәләтенә түгел, психологик көйләнешкә бәйле. Моғайын, һеҙ вазифаһы буйынса кешеләргә хеҙмәт итергә тейешле, әммә уларҙың ошоға ҡарата мөнәсәбәте бөтөнләй кире булыуын күргәнегеҙ барҙыр. Мәҫәлән, ведомство йәки рәсми органдарҙың тупаҫ хеҙмәткәре, һеҙҙән заказ ҡабул итергә теләмәгән, йоҡонан айный алмаған официант, һеҙҙе хеҙмәтләндереү урынына әхирәте менән телефон аша хәбәр һатҡан һатыусы һ.б.

Шулай уҡ һеҙ ниндәйҙер ойошма хеҙмәткәренең кешеләргә ярҙам итергә теләмәүен тояһығыҙ икән, лидерҙың да кешеләргә хеҙмәт итергә әҙер йөрәкле булмауын тоя алаһығыҙ. Ә бында ысын хәҡиҡәт бары тик шунда: иң яҡшы лидерҙар үҙҙәренә түгел, ә башҡаларға хеҙмәт итергә тырыша.

**Үҙендә башҡаларға хеҙмәт итергә әҙерлек сифатын туплау нисек була? Ысынлап та кешеләргә хеҙмәт итергә ынтылыусы лидер:**

● Үҙенең өҫтөнлөктәр исемлегендә башҡаларҙы алғараҡ ҡуя.

Хеҙмәт итергә теләүҙең беренсе һәм тоғро билдәһе - башҡаларҙы үҙендән һәм шәхси теләктәрендән өҫтөнөрәк ҡуйыу. Был үҙ теләктәренде ваҡытлыса ғына ситкә ҡуйып тороуҙан ҙурыраҡ. Бында үҙ кешеләреңдең ихтыяжын уйлау һәм аңлау, уларға һәр саҡ ярҙам итергә әҙер булыу һәм, ниһайәт, уларҙың теләген ысынлап та мөһим тип ҡабул итеү һәләтен аңлата.

● Башҡаларға хеҙмәт итергә мөмкинлек биргән инаныҫҡа эйә.

Башҡаларға хеҙмәт итергә әҙерлектең үҙәге булып үҙ-үҙеңә ышаныс тора. Миңә үҙен кемгәләр хеҙмәт итеүгә бағышлау өсөн бик мөһим кешемен тип уйлаусыны күрһәтегеҙ, мин һеҙгә тирә-яҡтағылар өсөн кемдең хәүефһеҙерәк булыуын күрһәтермен. Беҙ башҡаларға ниндәй мөнәсәбәттә, был үҙебеҙ хаҡында нимә уйлауыбыҙҙың көҙгөләге сағылышы. Философ һәм шағир Эрик Хоффер был фекерҙе түбәндәгесә әйтеп биргән: "Беҙ яҡындарыбыҙҙы үҙебеҙҙе яратҡан кеүек яратабыҙ: үҙебеҙгә ниндәй мөнәсәбәттәбеҙ, башҡаларға ла шундай мөнәсәбәт күрһәтәбеҙ. Әгәр үҙебеҙҙе күрә алмайбыҙ икән - башҡаларҙы күрә алмайбыҙ. Үҙебеҙгә түҙемлебеҙ икән, башҡаларға ла түҙемлебеҙ. Үҙебеҙҙе ғәфү итһәк, башҡаларҙы ла ғәфү итәбеҙ. Тормошобоҙҙо дөр һелкеткән ғәмәлдәрҙең нигеҙендә үҙебеҙгә булған һөйөү түгел, ә үҙебеҙҙе күрә алмаусанлыҡ тора".

Вәкәләттәр бүлеү ҡануны шуны күрһәтә - бары тик үҙ-үҙҙәренә һәм үҙҙәренең хәүефһеҙлегенә ышанған лидерҙар ғына башҡаларға власть бирә. Үҙендә шикләнмәгән лидерҙың ғына башҡаларға хеҙмәт итергә әҙер булыуы раҫ.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**

✓ *Аллаһтан ярҙам һораған кешегә уңышһыҙлыҡҡа осрау юҡ, кәңәшләшеп эшләгән кешегә үкенеү юҡ, һаҡлыҡ менән мал тотҡан кешегә мохтажлыҡ юҡ.*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

## БДУ-ның БАШҠОРТ ФИЛОЛОГИЯҺЫ ҺӘМ ЖУРНАЛИСТИКА ФАКУЛЬТЕТЫНА - 25 ЙӘШ




**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.**

**41-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Мелодрама. Кинйәбулатов. Треска. Ницца. Низағ. Талхина. Атолл. Вафля. Атмосфера. Шатун. Ҡыйралыш. Эхо. Зина. Йыр. Тахометр. Маҡтансыҡ. Табышмаҡ. Дегет. Абаға. Ағай. Заимов. Истисҡа. Орбита. Вәлиев. Йосопов. Морг. Акушерка. Анкер. Аҡсуға. Тәртип. Тартай. Неон.

**Вертикаль буйынса:** Эдем. Томбойоҡ. Ахилл. Руанда. Хафиз. Авив. Ирис. Кито. Навеха. Ҡатай. Иммунитет. Мейәс. Ангар. Арғаяш. Опус. Апай. Немо. Ҡонашаҡ. Саян. Антициклон. Буер. Аласыҡ. Тәҡәт. Атаман. Ыҙма. Алабай. Хжаб. Тореро. Ышаныс. Мөйөш. Ломе. Мәктәп. Шөһрәт. Ҡушаев.

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

## ҺАРАНЛЫҠ ТА - ХУРЛЫҠ

• Бераү доғалары ҡабул булыуын һәм ҡайғылары таралыуын теләһә, ауырлыҡта йәшәүсенең хәлен еңеләйтһен.

• Берәү бурысын түләргә ниәтләнһә, уға шунда уҡ Аллаһы Тәғәләнән ярҙам килер. Атайыңдың дуҫына барып йөрөү ҙә изгелек.

• Дине һәм изге ғәмәленән ҡала, берәү ҙә бер-береһенән артыҡ түгел, хурлыҡ өсөн кешегә тотанаҡһыҙ, әҙәпһеҙ, һаран һәм ҡурҡаҡ булыу ҙа еткән.

• Аллаһтан ярҙам һораған кешегә уңышһыҙлыҡҡа осрау юҡ, кәңәшләшеп эшләгән кешегә үкенеү юҡ, һаҡлыҡ менән мал тотҡан кешегә мохтажлыҡ юҡ.

• "Аллаһты иҫеңдә тот, һәм Аллаһ һине яҡлар; Аллаһты иҫеңдә тот һәм һин Уны үҙеңдең алдыңда күрерһең. Һорайһың икән, Аллаһтан һора; ярҙам эҙләйһең икән, ярҙамды Аллаһтан эҙлә. Бел, әгәр халыҡ һиңә яҡшылыҡ эшләү өсөн берләшә икән, ул - Аллаһ һиңә алдан әҙерләп ҡуйған яҡшылыҡты ғына эшләй; әгәр халыҡ һиңә яманлыҡ эшләү өсөн берләшә икән, ул - Аллаһ һиңә алдан әҙерләп ҡуйған язаһын еборә икәнен бел", тип нәсихәт әйткән Ғабдулла ибн Ғаббасҡа Бәйғәмбәребеҙ.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1435 һижри йыл.*

| Октябрь (Зөлхизә - Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 20 (26) дүшәмбе | 7:26 | 8:56 | 14:30 | 17:34 | 19:04 | 20:34 |
| 21 (27) шишәмбе | 7:28 | 8:58 | 14:30 | 17:32 | 19:02 | 20:32 |
| 22 (28) шаршамбы | 7:30 | 9:00 | 14:30 | 17:30 | 19:00 | 20:30 |
| 23 (29) кесе йома | 7:32 | 9:02 | 14:30 | 17:27 | 18:57 | 20:27 |
| 24 (30) йома | 7:34 | 9:04 | 14:30 | 17:25 | 18:55 | 20:25 |
| 25 (1) шәмбе | 7:36 | 9:06 | 14:30 | 17:22 | 18:52 | 20:22 |
| 26 (2) йәкшәмбе | 6:38 | 8:08 | 14:30 | 16:20 | 17:50 | 19:20 |

*"Дини тәҡүим"дән алынды.*

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**18 октябрь "Ай тотолған төндә"** (М.Кәрим), трагедия

**19 октябрь "Хыялый"** (С.Әбүҙәр), лирик комедия

**21 октябрь "Яңғыҙҙар ташы"** (Ә.Ғаязов), драма

**22 октябрь "Йәнем, иртәгә яңы көн тыуыр"** (Я.Пулинович)

**23 октябрь "Бирнәһеҙ ҡыҙ"** (А.Островский), драма

**24 октябрь "Ҡоҙаса"** (Б.Бикбай, З.Исмәғилев), музыкаль комедия

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**23 октябрь 76-сы иждад миҙгелен "Дирижерҙар парады"**ның гала-концерты аса. Концертта билдәле дирижерҙар һәм БР Халыҡ ҡоралдары милли оркестры сығыш яһай.

**Кем алыҡ? 1.** БР Халыҡ ҡоралдары милли оркестры етәксеһе Рәмил Ғәйзуллин ниндәй музыка ҡоралында уйнап билдәлелек яулай? **2.** "Дирижерҙар парады" нисәнсе тапҡыр үткәрелә?

**26 октябрь "Далан"** фольклор-эстрада төркөмө концерты. Төркөм тамашасыларға яңы шоу-программа тәҡдим итә.

**Кем алыҡ? 1.** Төркөмдөң етәксеһе Артур Туктағолов ниндәй төркөмдә иждад юлын башлай? **2.** Төркөм составындағы артистарҙы атағыҙ.

Яуаптарығыҙҙы **8-904-736-11-83** номеры буйынса көтөп ҡалабыҙ. Дөрөҫ яуап биреүсе тәүге кеше ике урынлыҡ саҡырыу ҡағыҙы отасаҡ.

*ҠЫҘЫҠ ТАҺА!*

## ЭҪЕ ҺЫУ... тиҙерәк туңа

• Ашамлыҡты тулыһынса эшкәртеп бөтөү өсөн кешегә 12 сәғәт ваҡыт кәрәк.

• Билдәле булған иң ауыр мейе 2,3 килограмм тәшкил иткән.

• Венера - Ҡояш системаһындағы иң ҡайнар планета. Уның өҫкө йөҙөндәге температура 450 градустан юғарыраҡ.

• Ғалимдар фекеренсә, 50000000000 галактика бар.

• Тауыш һыуҙа һауалағыға ҡарағанда 4 тапҡырға шәберәк хәрәкәт итә.

• Үбешкәндәгегә ҡарағанда, күрешкәндә микробтар күберәк күсә.

• Ай билдәле Гоби сүллегенә ҡарағанда миллион тапҡырға ҡорораҡ.

• Ер шарында иң юғары температура 1922 йылда Ливияла теркәлгән. Ул 58 градус тәшкил иткән. Ә иң түбән температура (-89.6 градус) 1983 йылда Антарктидала теркәлгән.

• Көнгөрә артҡа йөрөй белмәй.

• Тыуғандан алып үлгәнгә тиклем күҙҙәр генә бер үлсәмдә ҡала. Ә ҡолаҡтар һәм танау үҫеүҙән туҡтамай.

• Мейенең 80 проценты һыуҙан тора.

• Крокодилдар төпкәрәк сумыу өсөн таш йота.

• Ҡырмыҫҡалар бер ҡасан да йоҡламай.

• Ике ҡомаҡтан тоҡом бер йылда миллионға тиклем артырға мөмкин.

• Ҡулдағы тырнаҡтар аяҡтыҡына ҡарағанда 4 тапҡырға шәберәк үҫә.

• Бер литр һыу күпме тарта икәнен беләһегеҙме? Яуап: 3,8 килограмм.

• Эҫе һыу һыуыҡ һыуға ҡарағанда тиҙерәк туңа.

• Ғалимдар беҙҙең Ҡояш системаһынан ситтә 20 планета асҡан.

• Йыһан караптары сәғәтенә 40000 миль тиҙлек менән хәрәкәт итергә мөмкин.

АФАРИН!

# ШАЯНДАР...

## ярыш башланы



**Кешене көлдөрә белеү - үҙе бер оҫталыҡ. Ошо көндәрҙә Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында уҙғарылған Башҡорт асыҡ КВН лигаһының өсөнсө уйын миҙгелен асыу сараһында Өфө тамашасыһы тағы бер ҡат ошоға инанды.**

Тамашасыларҙың яҙҙан бирле үткәрелмәгән КВН-ды ни тиклем һағынып көтөп алыуы шунда уҡ һиҙелде, зал шығырым тулы ине. Сибай ҡалаһының "Енмештәр" КВН командаһы әйтеүенсә, "тамашасы бер бите айҙай, бер бите ҡояштай балҡып, яраткан командалары өсөн ике йөҙөн дә күрһәтеп" килеп ултырған. Алдағы ике йылдағы фестивалдә кәм тигәндә 15-17 КВН командаһы ҡатнашыуына, улар араһында күрше өлкәләрҙән, хатта Мәскәүҙән килгәндәре лә булыуына өйрәнеп киткәс, быйыл бары тик 10 ғына команда сығыш яһауы бер аҙ көтөлмәгән хәл булды. Һандар мөһим түгел, һөҙөмтәләр мөһим, тиһәләр ҙә, ҡатнашыусылар һаны аҙайыуы шаяртыуҙарҙың сифатына йоғонто яһамай ҡалманы. Шулай ҙа был юлы сирҡаныс ҡына алған йәш командалар араһында ла быға тиклем бер-нисә йыл рәттән сығыш яһап, ярайһы уҡ оҫтарып өлгөргән квнсылар менән көс һынашырлыҡтары булды. Ҡыҙыл төҫтәге пионер галстуктары тағып, барабан һуғыуы аҫтында дәртле генә килеп сыҡҡан "Райком" КВН командаһы (Учалы районы) йырсы Натализың билдәле "О, Боже, какой мужчина!" йырын оҙон көйгә һалып йырлауы менән хәтерҙә ҡалды. Уларға "Фестиваль асышы" номинацияһы бирелде. Ә шулай ҙа, һәр уйындың кимәлен билдәләүсе нәмә - йәштәрҙең илдәге ижтимағи-сәйәси ваҡиғаларға ҡарата шаярта алыуылыр, моғайын. Тәжрибәлерәк квнсыларҙың был темаға тос ҡына күләмдәстәр һөйләүе уларҙың республикабыҙҙа, донъяла барған хәл-ваҡиғаларға битараф булмауын сағылдырҙы.

"Шаяндар һәм отҡорҙар клубының Башҡорт асыҡ КВН лигаһы" рәйесе Урал Кәримов әйтеүенсә, фестивалдең өсөнсө миҙгеле һулпәнерәк башланған. "Тамашасы барыһын да бик йылы ҡабул итеүгә ҡарамаҫтан, ҡайһы бер КВН командалары менән әле эшләргә лә эшләргә тура киләсәк. КВН-да ла быуындар араһындағы күсәгилешлек ни тиклем мөһим булыуына тағы бер ҡат шаһит булынды. Әшебеҙҙе артабан да дауам итер өсөн КВН-да ҡатнашыусы булыуҙан "үҫкән" йәштәр урынына яңылары килеп тороуы бик мөһим. Яңы уйынсыларҙы тәрбиәләү ниәтендә "Башҡорт Юниор КВН лигаһы" уйындарын булдырғайныҡ, бер-нисә йылдан командалар кәмемәй, алмашынып торор, тип ышанам. Бынан тыш, ойоштороу комитеты тәжрибәле булмаған командаларға ярҙам итеү өсөн әлегә ике тапҡыр "КВН мәктәбе"н үткәрҙе, киләсәктә өмөттәр ҙур", - тип фекерҙәре менән уртаҡлашты Урал Сәлауат улы.

Айыуҙы ла бейергә өйрәтеп булғанды, йыл буйына дауам итәсәк Башҡорт асыҡ КВН лигаһының өсөнсө уйын миҙгеле фестивалендә ҡатнашыусылар ҙа урынлы шаяртырға, ҡыҙыҡ-мәҙәктәрҙе көндәлек тормоштан эҙләргә өйрәнер, моғайын. Әлегә сәхнәгә сығыусы командаларҙа ҡаты шаяртыу менән оятһыҙлыҡтың сиген билдәләп өлгөрмәгәндәр күбәйеүе күҙәтелде. Шулай ҙа, "Райком" КВН командаһы әйтеүенсә, кәзәнең баш ныйғас, арты ла һыйыр - оҫтарырҙар. Был уйындың һөҙөмтәләре буйынса, "Енмеш" КВН командаһына бик гәзел рәүештә беренсе урын бирелде. Әйткәндәй, "Иң яҡшы ир-егет роле" номинанты ла ошо командан Илнур Абдулғафаров. "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле"н М.Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның "Хыялыйҙар" КВН командаһынан Гүзәл Абайҙуллина алды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Александр Масляковтың КВН уйындарында күптән: "КВН хәҙер элеккесә түгел", - тигән һүҙ йөрөй. Был йылдан-йыл үҫешә барыуҙымы, әллә, киреһенсә, кимәл түбәнәйеүен аңлаталырмы, уйынсыларҙы һәр кем үҙенсә баһалай. Берәүҙе көлдөргән күләмәс икенсегә бөтөнләй ҡыҙыҡ тойолмауы бар. Башҡорт асыҡ КВН лигаһының өсөнсө уйын миҙгеле фестивалендә лә ҡатнашыусыларҙы һәр кем үҙенсә баһаланы. Шулай ҙа элекке кеүек башҡортса һөйләшә белмәй, билдән түбән күләмәстәр әҙерләп, иптәштәрен кәмһетеп көлөү кеүек күренештәр һирәгәйеүе бөтәһен дә ҡыуандырҙы. Артабан да башҡорт юморы тик яңы үрҙәргә артылыу юлында булыр, тип ышанайыҡ.**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

ХОККЕЙ

# ЕҢЕҮҘӘР ДАУАМ ИТӘ

**Ситтә уҙғарған һөҙөмтәле уйындарҙан һуң "Салауат Юлаев" Өфөгә ҡайтты һәм өс осрашыуҙың икәүһендә еңеү яулауға өлгөштә.**

10 октябрҙә Хабаровскиҙың "Амур"ы менән юлаевсылар дүртенсе тапҡыр көс һынашты. Алдағы өс уйындың икеһе "Салауат Юлаев" файҙаһына тамамланһа, берәүһендә иһә еңеү "Амур"ҙар яғында булды. Өфөләге дүртенсе уйын да ҡыҙыу башланды. Беренсе осорҙоң икенсе минутында уҡ юлаевсылар әҙселектә ҡалһа ла, ҡунаҡтар һөжүмен кире ҡаға алды. Ә "Амур" уйынсыһының штрафсылар эскәмйәһенә оҙатылыуын юлаевсылар оҫта файҙаланды һәм бер гол индереүгә өлгәште. Ҡунаҡтар ҙа беренсе осорҙа Виталий Коваль ҡапҡаһын асыу яйын тапты.

Икенсе осорҙа иһә исәпте "Амур"ҙар асты, ләкин Иван Вишневскийҙың мәргән голы исәпте тигеҙләне. Ә Денис Хлыстов һәм Антон Слепышевтың голдары юлаевсыларҙы алға сығарҙы.

Өсөнсө осорҙа ла "Салауат Юлаев" хоккейсыларының уйыны һоҡландырырлыҡ булды. Улар ҡунаҡтар ҡапҡаһына яуапһыҙ өс шайба индереүгә өлгәште. Гол "хужалары" - Алексей Кайгородов, Илкка Хейккинен һәм Андрей Зубарев. Уйын исәбе - 7:2.

Новосибирск өлкәһенең "Себер" командаһы менән осрашыуҙа, ҡыҙғанысҡа күрә, ҡунаҡтар көслөрәк булып сыҡты. Ике команда ла тәү минуттарҙан уҡ уйын дилбегәһен үҙ ҡулына төшөрөргә тырышты - боҙҙа көрәш тә аяуһыҙ булды, ҡағиҙәләрҙе боҙоу ҙа йыш күҙәтелде. Шулай ҙа беренсе осорҙа ике яҡ ҡапҡа ла асылмай ҡалды. Икенсе осорҙа ла тиҙлек һәм ныҡышмалылыҡ кәмемәне. Ике яҡ та боҙҙа ҡойон уйнатты, шулай ҙа уңыш юлаевсыларға йылмайҙы - тәнәфескә тиклем улар ҡунаҡтар ҡапҡаһына ике шайба сәпәне. Өсөнсө осорҙа ҡунаҡтар һөжүм итеүгә бермә-бер арттырҙы. Был үҙ һөҙөмтәһен бирмәйенсә ҡалманы - ҡунаҡтар Леланд Ирвинг һағын үтеп сығып, исәпте тигеҙләне, ә бер аҙҙан алға сыҡты. Юлаевсылар шунда уҡ һөжүмгә ташланып, бер гол индерҙе, ләкин видеояҙманы ҡарағандан һуң судьялар уны иҫәпкә алманы. Матч аҙағында юлаевсыларҙың күпселектә ҡалыуы көйәрмәндәрҙә өмөт уятты, тик юлаевсылар башҡаса гол индереү мөмкинлеге тапманы. Шулай итеп, "Себер"ҙәр юлаевсыларҙың еңеүлә серияһын өҙҙө, уйын исәбе ҡунаҡтар файҙаһына - 2:3.

14 октябрь "Өфө-Арена"ла юлаевсылар Новокузнецкиҙың "Металлург" командаһын ҡабул итте. Осрашыуҙы юлаевсылар ышанысл башлаһа ла, ҡунаҡтар ҡапҡаһын һаҡлаусы, Өфө хоккейы тәрбиәләнеүсеһе Рафаэль Хәкимовҡа тәүге минуттарҙа "эш әллә ни теймәне". Шулай ҙа беҙҙекеләрҙең тырышлығы бушҡа булманы - Дмитрий Макаров һәм Илька Хейккиненднең голдары уларға беренсе осорҙо 2:0 исәбе менән яблрға мөмкинлек бирҙе. Икенсе осор бер командаға ла мәрәй килтермәне. Ә матчтың һуңғы осоронда Иван Вишневскийҙың голы "Салауат Юлаев"ҡа тулы еңеү килтерҙе. Өфөләр ҡапҡасыһы Виталий Коваль был уйын миҙгелендә өсөнсө осрашыуы "ҡоро" исәп менән япты.

Новокузнецкиҙың "Металлург"ы менән осрашыуҙан һуң "Салауат Юлаев" 32 мәрәй менән Чернышев дивизионында беренсе баҫҡысты биләй. Артабан да егеттәргә уңыш юлдаш булһын.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯҠШЫ КЕШЕНЕ...

## йомошоң төшкәндә белерһең

Яҡшы күргән дуҫыңдың йомошон килгәс тә һора, яман күргән дуҫыңдың йомошон киткәндә һора.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ысын лидер һәр саҡ кешеләргә хеҙмәт итә. Уларҙың фундаменталь ихтыяждарына хеҙмәт итә һәм ошо юлда ул һәр саҡ популяр булмаҫҡа ла, һәр саҡ тәьҫорат тыуҙырмаҫҡа ла мөмкин. Әммә ысын лидерҙар өсөн шәхси дан түгел, ә мәхәббәт менән тулы хәстәрлек өҫтөнөрәк икән, улар ошондай хаҡ түләргә әҙер.

**(Юджин Б. Хабекер).**

Һеҙ әлеге ваҡыттағы вазифағыҙға ҡарағанда кешеләрҙе ныҒыраҡ яратырға тейешһегеҙ.

**(Джон Максвелл).**

Күптәр үҙ тормошонон иң яҡшы осорон... насарҙы тағы ла ҡыҙғанысыраҡ итеүгә сарыфлай.

**(Жан де Лабрюйер).**

Үҙ хеҙмәтегеҙҙе кемгәлер һатҡанда ла йәнегеҙҙе һатмағыҙ.

**(Джон Рескин).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Кәмәсе бер яугирҙы йылға аша ҡаршы яҡ ярға сығарып ҡуйырға ризалашҡан. Кәмә йылға уртаһына еткәс, һыуҙан аждаһа күтәрелгән. Шул мәлдә күк ҡара болоттар менән ҡапланған, ялағай ялтлаған, йылға ел-дауыл ҡупҡан. Ҙур тулҡындар кәмәне аяуһыҙ бәргеләгән, ә аждаһа кәмәләге ҡурҡыуҙан ағарынған кешеләргә бағып, тантана иткән. Кәмәсе әжәле ихтыярына буйһоноуын белдереп, ишкәктәрен ташлаған, ҡулдары менән йөҙөн ҡаплаған.**

**- Нинә кәмәлә ишмәйһең? - тип асырғанып ҡысҡырған яугир.**

**- Нинә ишергә? - тип ярһыған кәмәсе. - Юлыңа аждаһа сыҡҡан икән, тимәк, яҡты донъя менән хушлашырға! Аждаһанан ҡотолған кеше юҡ әле!**

**- Кеше үҙ әжәлен көтөп ултырырға түгел, ә ғүмер өсөн көрәшергә тейеш! - тигән яугир һәм ҡынынан ҡылысын һурып алып, һыуға ташланған. Кәмәсе тағы ла ныҒыраҡ ҡалтыранып, яугир менән аждаһаның алышын күҙәткән. Быуа яугир аждаһаның башын өҙөп, кәмәгә күтәрелгән. Шунда уҡ күктәге ҡара болоттар таралған, йылғалағы ел-дауыл тынып ҡалған. Ҡылысын ҡынына тығып, өнһеҙ ҡалтыранған кәмәсегә ҡарап, яугир былай тигән:**

**- Яуыз йән эйәләре кешеләрҙең ҡурҡыуы менән "туҡлана", уларға ҡарап тантана итә. Кешелә ҡурҡыу тойғоһо булмаһа, яуызлыҡ һис ҡасан баш ҡалҡыта алмаясаҡ..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Лэйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Азамат ӘБҮТАЛИПОВ, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Баш мөхәррир урынбаҫары** 246-03-24
**Бухгалтерия** 246-03-23
**Хәбәрселәр** 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.
«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**
Тиражы - 4700
Заказ 3531